ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 апрель (алағарай) 2022

№16 (1006)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Эшсе ҡулдарға ихтыяж



5

Бер-беребеҙҙе сәләмләйек,

бер-беребеҙгә йышыраҡ йылмайыйыҡ!



6

Балаң һәләтен үҫтерә бел!



8-9

Май үләндәре йыйы



12

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 757 һум 80 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? *Толерантлыҡ - ул ниндәйҙер шарттарҙа түҙеп, күнеп, килешеп йәшәүҙе аңлата. Һеҙ был төшөнсәне нисек аңлайһығыҙ һәм тормошоғоҙҙа уны ҡулланырға тура киләме?*

***Зәкирйән ӘМИНЕВ, философия фәндәре кандидаты:*** Эйе, сит телдән һүҙмә-һүҙ тәржемә иткәндә, толерантлыҡ түҙемлек, сабырлыҡ, әйләнә-тирәндәге ниндәйҙер хәлдәргә йәки кешеләргә, уларҙың тәртибе, холоҡ-ҡылығына һәм йәшәү рәүешенә ҡарата түҙемлек күрһәтеп, тотанаҡлыҡ һаҡлап йәшәү. Аҡыл эйәһе ҡартсәйем әйткәнсә, "үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел" тигән һымаҡ булып сыға инде. Күп осраҡта беҙ шулай йәшәйбеҙ ҙә кеүек. Икенсе яҡтан, бындай түҙемлектең дә сиге килеп сығыу ихтималлығын иҫтә тотоу кәрәктер, тип уйлайым. Шуға күрә лә, толерант булыу кәрәкме ул, тигән һорау тыуыуы ла бар бит. Түҙемлек, сабырлыҡ күрһәтеп йәшәүсе кеше, уйлап ҡараһаң, ихтыярһыҙҙан ғәйре ниндәйҙер кимәлдә зыян күреүсе булып сыға түгелме? Түҙеп йәшәүсенең шул уҡ ваҡытта үҙендә агрессия, ризаһыҙлыҡ тойғолары тупланыуы ла бар. Ҡайһы бер илдәрҙә, әйтәйек, айырыуса Францияла урындағы халыҡтың ситтән килгән мигранттар баҫымында йәшәүе хаҡында бөгөн күп яҙыла. Сит илдәрҙән һыйыныр урын эҙләп килеүселәр тора-бара үҙҙәрен хужаларса



иркен тота, үҙ мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуя, төп халыҡты һанламай, ихтирам итмәй башлай икән. Был, бәлки, урындағыларҙың артыҡ толерант булыуынан файҙаланып, бындай илдә нимә ҡыланһаң да ярай икән, тип аңлауҙан килеп сығалыр? Бына ошондай хаяһыҙлыҡҡа түҙергәме инде меҫкен француздарға? Толерант булып ҡыланырғамы артабан да?

Хәйер, был хаҡта уларҙың үҙҙәренең башы ауыртһын, әйҙә, ләкин ошонан сығып ғибрәт алмау ҙа мөмкин түгелдер. Дөрөҫөн әйткәндә, түҙеп йәшәйем, тип, шул уҡ ваҡытта үҙендә асыу, нәфрәт туплап йәшәү ике йөҙлөлөккә этәрә түгелме? Һәр нәмәнең сиге, самаһы була. Һәр кемдең дә сит-яттар тарафынан тейелгеһеҙ, үҙенең генә "биләмәһе" була һәм ул кешене башҡаларҙың ҡыҫылышынан, йоғонтоһонан аралап тора, уны хәүефһеҙлек мөхите тип әйтергә лә мөмкиндер. Йәғни, башҡалар менән психологик араlыҡ - дистанция һаҡлап йәшәү. Был хаҡта РФ Конституцияһының 24, 25 статьяларында ла хатта әйтеп кителә. Ошо тейелгеһеҙ шәхси араlыҡ һаҡланған һәм башҡалар тарафынан ихтирам ителгән хәлдә генә түҙемлек күрһәтеп, сабырлыҡ менән йәшәргә мөмкиндер.

Әлбиттә, "толерантлыҡ" һүҙен алып ташларға һәм уны "ихтирамлы мөнәсәбәт", "һыйышып татыу йәшәү" төшөнсәләре менән алмаштырырға ла була. Ләкин ниндәй генә хәлдә лә төп йөкмәтке кемдәндер ҡылыҡ-тәртибенә, тормош рәүешенә түҙеп йәшәүҙе түгел, ә башҡалар фекеренә, йола-ғәҙәттәренә, милләтенә, дини инаныуҙарына ихтирам менән ҡарауҙы аңлата. Был, әлбиттә, кешенән мәҙәни кимәл һәм тәрбиәлелек кеүек сифаттар талап итәләр.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "толерантлыҡ" һүҙен рус теленән алып ташларға һәм уны "халыҡтар дуҫлығы" тигән төшөнсә менән алмаштырырға тәҡдим итә икән, был термин этник-ара мөнәсәбәттәргә ҡағыла һәм, ысынлап та, бында дөрөҫлөк бар. Ә бына толерантлыҡтың сәйәси, гендер, раса, дин, синыф һәм белем айырмалыҡтарына ҡағылған мәғәнәһен икенсе төрлөрәк һүҙәр менән атарға кәрәк булаcаҡ. Хәйер, башҡорт теленә тәржемәһе уның былай ҙа "ихтирамлы мөнәсәбәт" тигән мәғәнә бирә. Йәғни, был кеше фекеренә, йәшәү рәүешенә һәм инаныуҙарына ҡыҫылмай, нейтралитет һаҡлап йәшәү мәғәнәһендә ҡулланыла. Һәр хәлдә, мин үҙемә ҡарата ошондай ҡүҙлектән сығып ҡарауҙарын теләр инем, сөнки һәр нәмәне үҙ исеме менән атап, тураҡ әйтеп һөйләү ғәҙәтем миңә ана шундай мөнәсәбәт талап итә лә инде, юғиһә, һәр һүҙеңдән хилафлыҡ эҙләп, бәйләнеп аптыратыусылар ҙа байтаҡ арабыҙҙа.

## БАШ ҠАЛАЛА...

### СЫҠ ӨМӘГӘ!

**БР Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә "Йәшел Башҡортостан" киң күләмле экологик акцияһы тураһында иғлан итеп, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров район хакимиәттәре башлыҡтарына яңы аллеялар булдырғанда ҙур ағастар ултыртыуға өҫтөнлөк бирергә ҡушты.**

Уның фекеренсә, бәләкәй үсентеләр ултыртыу, кеше факторын һәм ҡарҙы иҫәпкә алғанда, - мәғәнәһеҙ эш. Шулай уҡ үсентеләр һауа торошона ла бирешмәҫкә тейеш. Һәм ултыртылған ағастарҙы тейешенсә тәрбиәләгәндә генә ҡалалар йәшеллеккә күмеләсәк. Йола буйынса "Йәшел Башҡортостан" акцияһы йылына ике тапҡыр уҙғарыла. Унда республиканың барлыҡ ҡалалары һәм райондары ҡатнаша. Быйыл ул 23 апрелдән 10 майға тиклем дауам итә. Барлыҡ муниципалитеттарҙа ла берҙәм акция көнө булып 23 апрель тора. Әле 49 мең төрлө ағас һәм ҡыуаҡ ултыртыу, республика буйынса 40 яңы аллеяға нигеҙ һалыу планлаштырыла. Өфө мэры Ратмир Мәүлиев: "Беҙҙә 18-гә яҡын тематик аллея булдырыла. 800 ағас һәм 500 ҡыуаҡ - бөтәһе өс меңдән ашыу ағас ултыртыу күҙаллана", - тип билдәләнe.

### "ҮЛЕМҺЕҘ ПОЛК"

**Өфөлә "Үлемһеҙ полк" акцияһында 150 мең самаһы кеше ҡатнашырға йыйына. Ошо хаҡта баш ҡала мэрияһында ҙур сараны ойоштороуға арналған матбуғат конференцияһында белдерҙеләр.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, һуңғы бер нисә йылда тәүге тапҡыр "Үлемһеҙ полк" 9 майҙа - Еңеү көнөндә йәнә традицион форматта ойошторола. Әле "Үлемһеҙ полк"ты үткәреүҙә ҡатнашыу өсөн ирекмәндәр йыйыу башланды. Был Рәсәйҙең 16 йәше тулған һәр гражданы өсөн көнүҙәк. Ирекмәндәр колоннаны теҙергә һәм оҙатып барырға, шулай уҡ ветерандарҙы ҡунаҡ трибуналарына ултыртырға ярҙам итергә тейеш. Бынан тыш, акция ваҡытында медицина ирекмәндәре эшләй.

12+

✓ *Дуҫ йәшә, толерант бул, ләкин үҙ йөҙөңдө, асылыңды ла юғалтма, тамырыңдан айырылма, тип әйтмәксемен. Ысынлап та, төрлө милләт халыҡтарының дуҫ, татыу йәшәүе йәмғиәтебеҙ ҡеүәтен тәьмин итеп тора бит.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# ҠАҠ ҠОЙОРҒА ӨЙРӘНДЕМ...

**Мин тәм-том ашамайынса тора алмайым. Ләкин оҙаҡ йылдар магазинда һатылған ялтырауыҡ тышлы кәнфит-печеньеларҙы ашай торғас, кәүҙә ауырайҙы, йыш ҡына үҙәк көйә башланы, шулай уҡ ашҡаҙан да үҙенең барлығын ауыртыу аша йыш һиҙҙертә башланы. Башҡа аҙыҡ-түлекте самалап ашаһам да, үҙемде иҫләгәндән алып тәмле-татлынан баш тарта алманым, шуға бөтә бөгөнгө мөшкөл хәлемде шуларҙан күрәм.**

Бер яҡтан, кәнфит һәм шоколад яратыуым бер ни ҡәҙәр ауырлыҡтар тыуҙырһа ла, бөгөнгө көндә миңә аҡса килтереп торған шөғөл табырға ла булышлыҡ итте. Гәзит уҡыусыларға ошо шөғөләм тураһында һөйләгем килә.

Шулай бер магазинда ғәҙәти булмаған кәнфит күрҙем. Уларҙың тышына алма, сейә, груша һәм башҡа емеш-еләк төшөрөлгән һәм "Пастила", тип яҙылған ине. Һатыусы үлтереп маҡтағас, һатып алдым. Өйҙә уның тәмлелеген белеп, ауыҙ һыуҙарым ҡойолоп китте. Бер генә бөртөгө лә оҙаҡҡа етә, сөнки ҡатлы-ҡатлы итеп эшләнгән, төрлө тәмдәре менән айырыла, шулай уҡ интернет уны файҙалы, тип яҙа.

Пастила бала сағымда өләсәйем еләктән эшләп киптергән ҡаҡты иҫкә төшөрҙө лә, уны үҙем эшләп ҡарарға булдым. Беренсе тәжрибәм үтә лә уңышһыҙ булды. Ләкин айышына төшөндөм был эштең һәм тора-бара алманан ғына түгел, төрлө емеш-еләктән ҡаҡ эшләргә оҫтарып алдым. Шулай уҡ махсус киптерә торған аппарат һатып алғас, эштәр бөтөнләй көйләнде. Магазинға кәнфит тип сабыуҙан туҡтаным. Күрше-күләнде, туғандарҙы, хеҙмәттәштәремде һыйланым. Беренсе заказды нәҡ хеҙмәттәш ҡатын яһаны. Бөтә тырышлығымды һалып, уға өс төрлө ҡаҡ эшләп бирҙем. Унан китте "сарафан радиоһы", заказдар ҙа күбәйҙе, килем дә артты.

Был эшмәкәрлегемде киңәйтергә иҫәп тотам, сөнки заказдар етерлек. Хәҙер бөтә донъяның сәләмәт тормош алып барыу, дөрөҫ туҡланыу, тип зыҡ ҡубыуы миңә ҡулай ғына булды, сөнки тәбиғи продуктҡа һорау артҡандан-арта.

Гәзит уҡыусылар араһында ла, бәлки, минең шөғөлдө үҙ итеп, эш башлап ебәреүселәр булыр. Эш барышы ауыр түгел, тора-бара оҫталыҡ арта ғына. Ҡаҡты өй шарттарында нисек эшләргә өйрәткән видеороликтар интернетта бик күп. Өйрәнегеҙ, ҡарағыҙ, эшләгеҙ һәм аҡсалы булығыҙ.

**Әсмә ӨМӨТҠУЖИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**

---

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Толерантлыҡ - ул ниндәйҙер шарттарға түҙеп, күнеп, килешеп йәшәүҙе аңлата. Һеҙ был төшөнсәне нисек аңлайһығыҙ һәм тормошоғоҙҙа уны ҡулланырға тура киләме?***

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Дөрөҫөн әйткәндә, был "толерантлыҡ" тигән һүҙҙең мәғәнәһе мине лә күптән уйландыра ине. Нисек инде, ниндәйҙер хәлгә, йә булмаһа бигүк килешле булып етмәгән ҡылыҡ-холоҡтарға күрәләтә түҙемлек күрһәтергә була, тип аптырай инем. Ярай, кемдер түҙер ҙә, ти, ә бына минең сабырлығыраҡ холҡома йә ҡырыҫлығыма түҙемлек күрһәтеүселәр күп булыр инеме икән? Бының киреһе осраҡтарында "әпәй шүрлегеңә" менеп төшөүҙәре лә бар бит әле. Республика Башлығының тәҡдиме менән килешәм. Ысынлап та, ул әйтмешләй: "Башҡортостаныбыҙҙа башҡорт, рус, татар, мари, сыуаштар, православныйҙар, мосолмандар, йәһүдтәр бала саҡтан уҡ дуҫлашып бөткәндәр: бергә уҫәләр, уҡыйҙар, эшләйҙәр, өйләнешәләр, ҡатнаш ғаилә ҡоралар".

Ошо урында "ҡатнаш ғаиләләр"гә ҡарата шәхси фекеремде белдереп киткем килә. Дөрөҫ, йөрәккә бойороп булмай, төрлө милләт вәкилдәре бер-береһен табып, үҙ-ара килешеп, яратышып йәшәй икән, был бик һәйбәт. Ләкин тормош юлдашын үҙ милләтеңдән һайлау бурысы беҙгә - ата-бабаларыбыҙ васыяты, сөнки глобалләшеү осоронда былай ҙа бер халыҡ икенсеһе тарафынан "йотолорға" ғына тора. Ә бит милләтебеҙҙе, уның этник берлеген, йола үҙенсәлектәрен, күп быуатлыҡ тарихын, туған телен һаҡлап йәшәү һәр кемебеҙҙең изге бурысы. Әлеге бер милләттең икенсеһе тарафынан "йотолоу" күренеше ул, дөрөҫөн әйткәндә, артыҡ ныҡ толерант булыу бәләһеләр, ти тә уйланыла. Дуҫ йәшә, толерант бул, әлбиттә, ләкин үҙ йөҙөңдө, асылыңды ла юғалтма, тамырыңдан айырылма, тип әйтмәксемен. Ысынлап та, төрлө милләт халыҡтарының дуҫ, татыу йәшәүе, бер-береһенә ихтирамлы мөнәсәбәте йәмғиәтебеҙ берҙәмлеген, уның ҡеүәтен тәьмин итеп тора бит. Беҙҙә төрлө дини конфессиялар ҙа һыйышып, тыныс хеҙмәттәшлек итә. Дәүләтебеҙ власының закон сығарыу органдарында ла төрлө сәйәси партиялар аңлашып эшләй. Ә бына социаль өлкәлә, мәҫәлән, кешегә уның матди хәленә, белеменә, һөнәренә, хатта йыш ҡына сирле йә инвалид булыуына ҡарап та айырыу осраҡтары йәшәп килә, үкенескә. Кем һәм ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, кешегә ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтеү - ул юғары мәҙәнилек сифаттары талап итә торғандыр.

---

ИШАРА

# УҢАЙҺЫҘ МӘСЬӘЛӘМЕ?

**Ҡаршыма килгән оло йәштәрҙәге апайҙың уңлыһуллы ҡаранғанын шәйләгәс, ҡалаға һоҡланып киләләр, тип уйлаһам, уйы башҡала булған икән.**




- Яҡын-тирәлә туалет юҡмы ул, һеңлем? Үткән килгәндә лә этләнеп йөрөп ҡайтҡайным. Ыҙаланып йөрөмәскә тейеп, бөгөн хатта юлға сәй ҙә эсмәй сыҡҡайным. Гипертониянан ҡабул иткән дарыуҙар туалетҡа йыш йөрөтә, - тип аҡланған булды. Күмертауҙан документтар юлларға килгән апайға яҡындағы кафены өйрәтеп ебәрҙем.

Эйе, ҡалала йәмәғәт туалеттары мәсьәләһе ҡыҫкен. Был проблема, әлбиттә, бер беҙҙә генә түгел. Үҫешкән илдәрҙә лә "ҡыуаҡ арты"на йөрөү күренеше менән көрәшәләр. Ә беҙ берәй мөйөштә йәки ағас-ҡыуаҡ янында әсәһе йәки атаһы балаһының аяғын тотҡанын күрһәк, иғтибар ҙа итмәйбеҙ. Уның бәләкәйлеген генә аҡламайбыҙ, ә был хәлгә өйрәнеп бөткәнбеҙ. Тик оло кешеләргә лә күрергә тура килә. Ундай саҡта күрмәмешкә һалышып үтеп китеүҙән башҡа сара юҡ. Ҡыйыуыраҡтар иҫкәрмә яһап үтергә мөмкин. Әммә төп геройға нимә эшләргә һуң? Урамда бәҙрәф булмағас...

Кешенең был тәбиғи ихтыяжын ҡалала йәмәғәт туҡланыуы, сауҙа нөктәләре, хеҙмәтләндереү ойошмалары бер ни тиклем хәл итә итеүен. Кафе, ресторан, магазиндарҙа, матурлыҡ салондарының барыһында ла туалет бар, әммә бер нәмә лә һатып алмаһаң, заказ эшләмәһәң, унда инергә һиңә бер кем дә рөхсәт итмәйәсәк.

Яңыраҡ Һарытау өлкәһендә йәшәгән курсташым шылтыратып, йыш ҡына сит илдә ял итеүҙәре хаҡында һөйләне.

- Башҡортостандың иҫтәлекле урындарында ла йөрөгө килә, әлбиттә. Әммә әлегә республикала балалар менән оҙон юл йөрөү бик уҡ уңайлы түгел. Юл буйҙарында, ял итә торған урындарҙа бәҙрәфтәрҙең юҡлығы, булһа ла ҡул йыуыу, йыуыныу өсөн мөмкинлектәр булмауы ҡыйын. Ял һәм сәйәхәт итеүселәргә - был иң мөһим шарттарҙың береһе. Бер нисә йыл элек улдарыбыҙҙы республикалағы иң ҙур күл - Асылыкүлде күрһәтергә тип алып барғайныҡ, тап ошо бәҙрәфкә бәйле проблема сәбәпле, барған көндә үк кисен ҡайтып китергә мәжбүр булдыҡ. Бәлки, хәҙер шарттар яҡшырғандыр ҙа, тик әлегә унда юл төшмәй тора, - ти.

Эйе, юлда туалеттарҙың юҡлығы ла - ҙур мәсьәлә. Булған хәлдә лә, улар бысраҡ, инһәң, эсе кейемгә һеңеп килеп сығаһың. Яҡтылыҡ йәки ҡул йыуып сығыу түгел, ҡағыҙ кеүек элементар саралар ҙа юҡ. Шуға бәйле тағы һорау тыуа: әбрәкәйгә ҡайҙа барырға?

Пандемияға бәйле карантин саралары ваҡытында кафе, ресторандар ябылыу сәбәпле, бәҙрәфкә ҡайҙа барырға белмәгәндәр өсөн Рәсәй ҡалаларының береһендә бер эшҡыуар тәғәрмәсле кабина ултыртып, халыҡҡа унайлыҡ тыуҙырып ҡына ҡалмай, аҡса ла эшләй. Ә ниңә? Бизнес өсөн бик яҡшы идея! Таҙа һәм уңайлыҡтары булған кабиналар түләүле булһа ла, күпер төбөнә төшкәнсе йәки ҡыуаҡ эҙләп йөрөгәнсе, беҙҙә лә өйрәнерҙәр ине ул. Шулай бит?..

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Коронавирус пандемияһы башланғандан алып Башҡортостанда бөтәһе 284 552 кешелә сир раҫланған. Һуңғы тәүлектә 181 осраҡ асыҡланған. Тәүлек эсендә алты үлем осрағы теркәлгән, коронавирус ҡорбандарының дөйөм һаны 5 597-гә еткән. Бөтәһе 278 069 кеше һауығып сыҡҡан, уларҙың 211-е - һуңғы тәүлектә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров быйыл республиканың Граждандар форумын үткәрергә ҡушты. Граждандар форумы-2022 граждандар йәмғиәте институттарының, дәүләт власы органдарының, урындағы үҙидара органдарының үҙ-ара һөҙөмтәле эш итеүен һәм социаль партнерлығын тәьмин итеү, төбәктең коммерцияға ҡарамаған секторын үҫтереүҙең мөһим мәсьәләләрен асыҡлау өсөн уҙғарыла, тиелә документта.

✓Вице-премьер Азат Бадранов Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Республикаға идара итеү үҙәгендәге оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте.

✓Сибай ҡалаһының элекке мэры Рөстәм Афзалов Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры итеп тәғәйенләнде. Хөкүмәттең Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы ошо турала белдерҙе. Сибай хакимиәте башлығы вазифаһын әлегә Гүзәл Ишемғолова башҡара.

✓Бөгөнгәсә республиканың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры булып эшләгән Урал Искәндәров Башҡортостан Башлығы ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнде. "Урал Салауат улын бик мөһим вазифаны биләргә үҙем саҡырҙым. Профессиональ юрист, республиканы, тәбиғәт ресурстарын яҡшы белә, хәҙер минең көслө ярҙамсым бар", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓23 апрелдә онлайн һәм офлайн форматта "Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант-2022" акцияһы уҙғарыла. Башҡорт телендә иркен аралашҡан ҡатнашыусылар өсөн диктантты Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, телде яңы өйрәнә башлағандар өсөн Мирас Ишдәүләтов, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙған ҡатнашыусылар өсөн М. Гәрәев исемендәге башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәгенең баш белгесе Гүзәл Нуриева уҡый.

✓ *Башҡорт халҡында "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" тигән әйтем бар. "Атайсал" проекты аша ҡала һәм ауыл халҡы үҙҙәрен борсоған мәсьәләне уңышлы яҡташтары ярҙамында хәл итә башланы.*



ФӘҺЕМ

# ИНТЕРНЕТҺЫҘ БЫУЫН...



Көндәрҙән бер көндө улы атаһынан һораған:
- Атай, һеҙ нисек технологияларһыҙ, интернетһыҙ, компьютерһыҙ, телевизорһыҙ, кондиционерһыҙ, телефонһыҙ йәшәй алдығыҙ ул?

Атаһы шулай тип яуап биргән:

- Һеҙҙең быуын бөгөн бер ниндәй ҙә доға уҡымай, бер кемде лә ихтирам итмәй, китап уҡымай, ояла белмәй нисек йәшәй алған кеүек, беҙ ҙә яңы технологияларһыҙ йәшәнек. Беҙ, йәғни 1939-1985 йылдарҙа йәшәгән кешеләр, фатихалы һәм бәхетле быуын. Беҙҙең тормошобоҙ шуны иҫбатлай: бер ҡасан да велосипедта йөрөгәндә, уйнағанда шлем кеймәнек. Беҙ мәктәпкә беренсе көндән үк үҙебеҙ генә йөрөүҙән ҡурҡманыҡ. Уҡыуҙан һуң ҡояш байығансы уйнаныҡ, бер ҡасан да яртышар көнләп телевизор ҡарап ултырманыҡ. Беҙҙең дуҫтар ысын булды, ә интернеттағы таныштар түгел.

Һыу эскебеҙ килһә, крандан алып эстек, ә шешәнән түгел. Бер стакандан дүртәр-бишәр кеше эсһә лә, ауырымай торғайныҡ. Сирләп китһәк, атай-әсәйебеҙ арзанлы ғына дарыуҙар йәки халыҡ ысулдары менән дауаланы. Көн һайын картуф һәм икмәк ашаһаҡ та һимермәнек. Уйынсыҡты ла үҙебеҙ эшләнек. Китаптарыбыҙ, уйынсыҡтарыбыҙ менән алмашлап уйнаныҡ, уҡыныҡ.

Беҙҙең атай-әсәйҙәр бай булманы. Улар беҙгә үҙҙәренең һөйөүен бирҙе, рухилыҡты ҡәҙерләргә өйрәтте, ә матди байлыҡты түгел. Ғәҙеллек, тоғролоҡ, хөрмәт, ныҡышмалы хеҙмәт төшөнсәләре кеүек мәңгелек ҡиммәттәрҙе аңлап үҫтек.

Беҙҙең бер ҡасан да мобиль телефондар, PlayStation, Xbox, видеоуйындар, ноутбуктар, интернет-чаттар булманы.

Унын ҡарауы беҙҙең ысын дуҫтарыбыҙ булды!

Беҙ тиҫтерҙәребеҙгә бер ниндәй саҡырыуһыҙ ҡунаҡҡа бара инек, беҙҙе ябай ғына ризыҡтар менән һыйланылар. Беҙҙең иҫтәлектәр аҡлы-ҡаралы фотоһүрәттәрҙә ине, әммә улар сағыу һәм матур булды, ғаилә альбомдарын ҙур кинәнес менән ҡарай инек һәм олатайҙарыбыҙҙын портретын хөрмәт менән һаҡланыҡ.

Китаптарҙы сүплеккә ырғытманыҡ, кирәһенсә, ҙур сират тороп, һатып алдыҡ, уларҙы йотлоғоп уҡыныҡ.

Һеҙҙең кеүек Инстаграмда бөтә тормошобоҙҙо күрһәтеп, киң мәғлүмәт сараларында асыҡтан-асыҡ ғаилә серҙәрен һөйләмәнек, башҡаларҙы ла хөкөм итмәнек.

Беҙ уникаль һәм һеҙгә ҡарағанда аҡыллыраҡ булдыҡ, сөнки беҙ - ата-әсәһен тыңлаған һуңғы быуын. Бынан тыш, үҙҙәренең балаларын тыңларға тейеш булған беренсе быуын. Беҙ һеҙҙән аҡыллыраҡ һәм һеҙгә әле булһа ярҙам итәбеҙ, беҙ сикле. Шуға күрә беҙҙең ҡәҙерҙе белеп ҡалығыҙ! Беҙ юғалғансы өйрәнеп ҡалығыҙ!..

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Толерантлыҡ - ул ниндәйҙер шарттарға түҙеп, күнеп, килешеп йәшәүҙе аңлата. Һеҙ был төшөнсәне нисек аңлайһығыҙ һәм тормошоғоҙҙа уны ҡулланырға тура киләме?

***Айгөл ИШМОРАТОВА, БДУ студенты:*** Толерантлыҡ - киң мәғәнәле төшөнсә. Ул төрлө милләт халыҡтарының һыйышып тыныс йәшәү рәүешенә генә ҡағылмай, әлбиттә. Ә инде тап ошо өлкәгә ҡағылыусы толерантлыҡ терминын икенсе һүҙ менән алыштырырға тәҡдим ителә икән, рәхим итһендәр, бынан ғына уның асылы, йөкмәткеһе үҙгәрмәйәсәк бит. Беҙҙә шулай уҡ кешене тән тиреһе төҫөнә, ниндәй дин тотоуына, йә булмаһа сәйәси ҡараштары буйынса ла айырып ҡарау тигән нәмә юҡ, йәмғиәт бындай билдәләргә тыныс ҡарай. Ләкин мине ошо терминға ҡағылышлы бер сетерекле хәл ныҡ борсой. Былтыр Коммерсант.ru порталы рәсәйҙәрҙең енси аҙсылыҡҡа ҡарата толерантлығы, йәғни был күренешкә түҙемле (о, юҡ, тик ихтирам түгел!) мөнәсәбәт күрһәтеүселәр һанының артыуы тураһында "Левада-үҙәк" үткәргән һорау алыу мәғлүмәттәрен баҫып сығарҙы. Ләкин, бәхеткә күрә, опроста ҡатнашҡандарҙың 56 проценты был ғибрәт күренешкә үҙенең кире ҡарашын белдерҙе. 40 процент битараф булһа, ыңғай фекер белдереүселәр 3 процент тәшкил итә. Әйткәндәй, толерантлыҡ - ул битарафлыҡ түгел, ә бына был мәсьәләлә кемдер битараф икән, киләсәктә бындай ғәмһеҙлектең ҡиммәткә төшөүе лә бар. Ә әлеге 3 проценттың башын бутаусы - ул көнбайыш идеологияһы касафаты. Белеүебеҙсә, АҠШ һәм Европа илдәре йәмғиәте традицион булмаған енси йүнәлешле әҙәмдәргә үтә лә түҙем һәм сабыр ғына түгел, дөрөҫөрәге, бындай күренеште хуплап -йөпләп кенә тора. Көнбайыш донъяла бөгөн гомосексуализм, лесбиянлыҡ, бер иш енеслеләр никахы, "ирекле мөхәббәт" һәм башҡа шундай аҙсылыҡты тәшкил иткән ғәрип идеология әүҙем пропагандалана һәм күпселек аңына көсләп тағыла. Боҙоҡлоҡто асыҡтан-асыҡ пропагандалап, уның "бағыусылары" медицина өлкәһенә күпләп аҡса һалыусы супер-байҙар һәм миллиардерҙар икән, тип уҡыным. Был уларға әлеге боҙоҡлоҡтар әҙемтәһенә дусар булған әҙәмдәрҙе СПИД, ВИЧ һәм башҡа йоғошло сирҙәрҙән, йәнәһе, дауалап, ҙур килемдәр алыуға иҫәп тота икән.

Ошо көнбайыш йоғонтоһо беҙҙең илгә лә үтеп инә тора. Яңыраҡ бит хатта Өфөлә ана шундай зәғиф аңлылар митинг үткәреүгә рөхсәт һорап, баш ҡала мэрияһына мөрәжәғәт иткәйне, бәхеткә, беҙҙең йәшәү рәүешенә, тәрбиә маҡсаттарына тап килмәгән был сит-ят күренеште пропагандалау закон нигеҙендә тыйыла. Йәмғиәтебеҙҙең рухи һәм физик сәләмәтлеген ҡайғыртыу дәүләт әһәмиәтендәге мәсьәлә. Аң кимәлдәре зәғиф был аҙсылыҡтың шулай ҙа әленән-әле Мәскәүҙә һәм башҡа ҡалаларҙа үҙ лозунгылары менән урамға сығырға маташыуҙарында Рәсәйгә ҡаршы иғлан ителгән әлеге санкцияларҙың ҡыҫылышы юҡ, тип кем әйтә ала?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АТАЙСАЛҒА ҠАЙТАЙЫҠ!

**29 апрелдә "Яҡташлыҡ көсө - Сила землячества" форумында "Атайсал" проектына йомғаҡ яһаласаҡ. Былтыр 1 мартта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров инициативаһы менән республикала старт алған проектҡа ярашлы байтаҡ изге эш башҡарылды. Башҡорт халҡында "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" тигән әйтем бар. "Атайсал" проекты аша ҡала һәм ауыл халҡы үҙҙәрен борсоған мәсьәләне уңышлы яҡташтары ярҙамында хәл итә башланы.**

Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев проекттың нисек башланыуы хаҡында бына нимә ти: "Беҙҙең республикала бер-беренә ярҙам итеү йолаһы элек-электән бар. Башҡорттар туғандарын, ауылдаштарын йыйып, өмә эшләп, йорт һалған, башҡа эштәрҙе лә бергә башҡарған. Меценатлыҡ, тыуып үҫкән ҡалаға, ауылға ярҙам итеү традицияһы ла беҙҙә һәр ваҡыт булды. Радий Фәрит улы былтыр көҙ үҙенең кесе Ватанын яратҡан һәм уға ярҙам итергә әҙер булған илһөйәр кешеләрҙе берләштереү идеяһы тураһында белдерҙе. Ошо нигеҙҙә махсус Ataisal.ru сайтын булдырҙыҡ. Уға ярашлы, тыуған төйәгенә ярҙам итергә теләгән кеше унда теркәлә һәм бойомға ашырылған башҡа проекттарҙы ҡарай, ярҙам итергә теләгән объекттар, йәғни ауыл, ҡала мәктәп хакимиәттәре менән бәйләнешкә инә ала. Бөгөнгә 1,2 млрд һумлыҡ заявка килде. Был - бик ҙур сумма. Шунын яҡынса 600 млн һумлыҡ проекты бойомға ашырылды. Был да бик етди һан, сөнки уның федераль, республика бюджеты түгел икәнлеген аңлайбыҙ. Был - физик шәхестәрҙең инициативаһы һәм аҡсаһы. Проект старт алғас, башта ул меценатлыҡҡа ғына йүнәлтелгән тип уйлағайныҡ. Бер йылдан һуң йомғаҡ яһағас, уның төп мәғәнәһе кешенең тыуған төйәгенә һөйөүен күрһәтеү тип аңланыҡ. Бөгөн унда 2 меңдән ашыу кеше ҡатнаша..."

Урал Таһир улы әйтеүенсә, 29 апрелдә үтәсәк "Яҡташлыҡ көсө - Сила землячества" форумында проектҡа йомғаҡ яһаласаҡ. Ә иртәгәһенә республикала - "Иҫкә алыу көнө". "Атайсал"да ҡатнашҡан яҡташтар, һис шикһеҙ, тыуған төйәктәренә ҡайтып, яҡындары ерләнгән зыяраттарҙы тәртипкә килтерер. Форум юҡҡа ғына "Яҡташлыҡ көсө" тип аталмай. Бында төп бурыс - дәүләт кенә түгел, ә яҡташтарыбыҙ ярҙамында хәл итеп булған мәсьәләләрҙе табыу.

Урал Килсенбаев үҙе лә "Атайсал" проектында ҡатнаша. Былтыр яҙ Күгәрсен районы Һатлыҡ ауылының мосолман зыяратында хужалыҡ блогы төҙөлдө. Уның башланғысында икенсе проект - "Ҡашлаҡ шишмәһе"н төҙөкләндереү.

"Икенсе проектта ҡатнашырға теләүселәр һаны өс тапҡырға артты. Шуныһы бик мөһим ине: быға тиклем йылдар буйы аралашмаған кешеләр осрашты. Һәр кем бала саҡ, мәктәп йылдарын, бергәләп бесән һәм баҫыуҙа эшләгәнен иҫкә алды. Һуңынан күмәкләп мәсеткә төшкө ашҡа йыйылдыҡ. Был сара беҙҙе ныҡ берләштерҙе. Минеңсә, ошо осрашыуҙан һуң ауылдаштар нығыраҡ аралаша башланы", - ти Урал Килсенбаев.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда аҙыҡ-түлек етерлек. Сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев билдәләүенсә, министрлыҡ белгестәре көн һайын социаль әһәмиәтле тауарҙарҙың төп төркөмөнә мониторинг яһай. "Яңы логистик сылбыр төҙөү һәм валюта курсын кәметеү хаҡтарҙы, шул иҫәптән "борщ йыйылмаһы"на хаҡты тотороҡландырырға булышлыҡ итә", - тине Алексей Гусев.

✓11 апрелдә Рәсәйҙә полиомиелитҡа ҡаршы вакцинация башланды. Роспотребнадзорҙың матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәренә ярашлы, ваҡытында йәки бөтөнләй прививка яһалмаған 5 йәшкәсә балаларға, ЛНР-ҙан, ДНР-ҙан һәм Украинанан килгән 14 йәшкә тиклемге балаларға эшләнә. "Сир хәүефе юғары булған илдәрҙән полиомиелит вирусы инеү хәүефе янауы сәбәпле ошондай ҡарар ҡабул ителде", - тип хәбәр иттеләр ведомство вәкилдәре.

✓Томи Ламса үҙ теләге менән "Салауат Юлаев" хоккей клубының баш тренеры вазифаһын ҡалдырҙы. Тыуған иленә ҡайтып еткән фин белгесе әйтеүенсә, донъялағы хәл арҡаһында Өфөлә эште дауам итеү ҡатмарлашҡан. "Юлаевсылар"ҙың генераль директоры Ринат Бәширов һүҙҙәренсә, фин белгесенә клубты яңынан етәкләргә тәҡдим ителһә лә, ул билдәле сәбәптәр буйынса был вазифанан киткән. Яңы тренер тураһында ҡарар алдағы көндәрҙә иғлан ителергә тейеш.

✓Аккредитация үткән Рәсәй IT-компаниялары хеҙмәткәрҙәре армияла хеҙмәт итеүен кисектерә ала. Һанлы үҫеш, элемтә, киң коммуникациялар министрлығы аккредитация үткән IT-компанияларға кисектереү тураһында ҡағыҙҙәләр менән хат ебәрҙе. Тейешле заявканы 19 апрелдән 1 майға тиклем бирергә мөмкин. Шарттарға ярашлы, хеҙмәт килешеүе буйынса эшләгән, аккредитация үткән компанияла 11 айҙан да кәм эшләмәгән, һөнәре буйынса юғары белеме булған, 18-ҙән 27 йәшкә тиклемге Рәсәй Федерацияһы граждандары армияла хеҙмәт итеүен кисектерә ала.

✓Nurofen, Strepsils, Durex и Vanish брендтарына эйә Reckitt Benckiser Британия компанияһы үҙенең бизнесын Рәсәйгә бирә. Был турала компания рәсми рәүештә үҙе белдерҙе. Билдәле булыуынса, Reckitt Benckiser төрлө өлкәләге тауарҙар, шул иҫәптән дарыу, көнкүреш химияһы, шәхси гигиена саралары, аҙыҡ-түлек һата. Ул Vanish, Calgon, Cillit Bang, Clearasil, Durex, Strepsils, Nurofen һәм Dettol брендтарына эйә.

ҠЫҪҠАСА

# ТАБИПТАР КИЛӘ

✓ **"Сәләмәтлек поездары" тағы ла Башҡортостан буйлап эш сәфәренә юлланды. Был турала республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең Бәйләнештә селтәре биттәрендә хәбәр итте.** "Был республика буйлап сәләмәтлек поездарының сираттағы, дүртенсе тапҡыр сығыуы."Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһын беҙ алыҫта ятҡан тораҡ пункттарҙа йәшәүселәр республика клиникалары табиптарына күренһен, медицина тикшерелеүе үтеп, дауалана алһын өсөн 2019 йылда уҡ башлағайныҡ. Был акция урындарҙа көтөп алына һәм уға ҡыҙыҡһыныу артҡандан-арта бара", - тип яҙҙы төбәк етәксеһе. Элекке кеүек үк, автопоезд составында пациенттарҙы флюорографтар, маммографтар, шулай уҡ Ғ.Кыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы менән Республика кардиология үҙәге табиптары ҡабул итәсәк. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бөтәһе алты йүнәлештә: Өфө, Дыуан, Нефтекама, Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Белорет район һәм ҡалаларына Башҡортостандың мөмкин тиклем күберәк ауылдарын үҙ эсенә алыусы маршруттар төҙәгән.

✓ **Башҡортостанда импорт аналогтарҙы тулыһынса алмаштырған ауыл хужалығы техникаһын сығара башлаясаҡтар.** Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәрендә хәбәр итте. "Компания "АртАгро", беҙҙең "Өфө" индустриаль паркының беренсе резиденты, бының өсөн яңы ҡорамал алды. "АртАгро" быға тиклем сит илдән килтерелгән иген таҙарта торған станок эшләгән. Бында шулай уҡ Рәсәйҙә берҙән-бер орлоҡ өсөн гравитация өҫтәле урынлашҡан. "АртАгро" сауҙа йорто 2017 йылдан ауыл хужалығы техникаһын һатыу менән шөғөлләнә. 2020 йылда компания ҡорамалдың бер нисә төрөн етештереү буйынса үҙ эшен асты. 2021 йылда ул 60 эш урыны булдырып, ауыл хужалығы машинаһын етештереүгә 150 миллион һумлыҡ инвестиция индерҙе. Улар етештергән станоктар Рәсәй төбәктәренә оҙатыла башланы ла инде, әле Ҡаҙағстанға ла ебәрергә әҙерләнәләр.

✓ **Башҡортостанда 31 августа тиклем "тәгәрмәс" экологик акцияһы үтә. Ул тәбиғәтте иҫке тәгәрмәстәр сүплегенә әйләндереүҙән һаҡлауға һәм уларҙы артабан балаларҙың уйын майҙансығына йомшаҡ ҡатлам итеп ҡулланыу өсөн эшкәртеүгә йыйыу маҡсатынан ойоштоiола.** Әлеге ваҡытта Туймазының резина-эшкәртеү заводында иҫке тәгәрмәстәрҙе ҡайтанан эшкәртеү буйынса линия төҙәлә. Ул тәүлегенә 10 тоннаға тиклем тәгәрмәсте юғары сифатлы резина онтағы итеп сығара ала. Был онтаҡты артабан спорт һәм балалар майҙансыҡтарын төҙөкләндереүҙә ҡулланырға мөмкин буласаҡ. Предприятие тәгәрмәс монтажлау сервистарында һәм шәхси эшҡыуарҙар территорияларында тәгәрмәстәр ҡабул итеү кәрзиндәре урынлаштырырға әҙер.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АҪЫЛ ТАШТАР ҮҘЕБЕҘҘӘ



**Совет майҙанындағы архитектура ансамбле колоннадаһын "Башҡорт аҫылташтары" компанияһы әҙерләй. Был компания йәмәғәт зоналары, ҡунаҡхана комплекстары, бизнес-үҙәктәр, премиум класс торлаҡтар өсөн таштан изделиелар проектлау, әҙерләү һәм монтажлау буйынса махсуслашҡан.**

Күптән түгел Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров эш сәфәре сиктәрендә ошо предприятиела булып, ундағы эштәр менән танышты. "Башҡорт аҫылташтары" компанияһының проект етәксеһе Иван Голота әйтеүенсә, изделиелар әҙерләү өсөн гранит - Учалы районы Мансур ятҡылығынан, мәрмәр - Силәбе өлкәһе Ҡойылға ятҡылығынан. Таштар Волга буйы төбәгендә иң яҡшы техник ҡорамалдар менән йыһазландырылған ҡеүәтле биш етештереү машинаһында эшкәртелә. Әлеге ваҡытта предприятие Совет майҙанының архитектура комплексы өсөн колоннадалар әҙерләй. Һәр колоннада 9 тонна тарта, бейеклеге 5,7 метр. Майҙанға бөтәһе шундай 24 колоннада ҡуйыласаҡ, улар ҡаһарманлыҡ өлгөһөн мәңгеләштереп, генерал Шаймуратов һәйкәлен уратып торасаҡ. Колоннадаларҙы урынлаштырыу 1 майҙа башланасаҡ. Билдәле Рәсәй скульптор-монументалисы, генерал Шаймуратовҡа һәйкәл авторы Салауат Щербаков әйтеүенсә, архитектура ансамбле өс өлөштән торасаҡ. "Фигура үҙе - генерал Шаймуратовтың ҡаһарманлығы, әһәмиәте. Икенсеһе - Совет майҙаны - совет осоронон классик архитектураһын сағылдыра. Батырлыҡ рухын, башҡорт характерын күрһәтеү өсөн майҙанға бер аҙ тантана, байрамсаҡ төҫ бирергә уй тыуҙы. Өсөнсө өлөш - әлеге ике теманы берләштереп тороусы колоннадалар традицион архитектура стилендә бирелде. Бындай өлгәләр Санкт-Петербургта һәм Европала ла бар", - ти С.Щербаков.

# ХӘҮЕФЛЕ МИҘГЕЛ БАШЛАНДЫ



**Көндәрҙең йылытыуына һәм янғын хәүефенең артыуына бәйле, 2022 йылдың 15 апреленән Башҡортостандың урман фонды биләмәһендә янғын йәһәтенән хәүефле миҙгел асылды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһы Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.**

Урманда түбәндәгеләр тыйыла: усаҡ яғыу; һүндерелмәгән шырпы, тәмәке төпсөгө ташлау; шешәләр йәки быяла киҫәктәрен ҡалдырыу, сөнки улар яндырғыс линзалар кеүек тәьҫир итергә мөмкин; ағастар аҫтында, аҡланда, үлән, шулай уҡ баҫыуҙа, урманда ҡамыл яндырыу; ылыҫлы йәш урманда, торф ятҡылыҡтарында, ҡырҡындыларҙа, ҡоро үләнле урындарҙа, ағас сатырҙарында, шулай уҡ зарарланған урман участкаларында усаҡ яғыу; урман хужалығы эштәре башҡарғанда ағас ҡалдыҡтарын яндырыу.

Урманда янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн иҫкәртеү йәһәтенә йәки административ штраф һалына: граждандарға - 1500-3000 һум; вазифалы кешеләргә - 10000-20000 һум; юридик берәмектәргә - 50000-200000 һум.

"Башҡортостан Республикаһының Урман хужалығы министрлығы тәбиғәт янғындары менән бәйле ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуыуына юл ҡуймау өсөн янғынға ҡаршы режим ҡағиҙәләрен мотлаҡ үтәүҙе һәм тораҡ пункттарҙы уттан һаҡлау өсөн уяулыҡ күрһәтеүҙе һорай. Урманда йәки уның эргәһендә нимәләр янғанын күрһәгеҙ, Башҡортостан Урман хужалығы министрлығының Төбәк диспетчер хеҙмәтенә йәки Урман һағының берҙәм номерына шылтыратығыҙ: 8 (347) 218-14-14, 8 (800) 100-94-00", - тип белдерҙеләр министрлыҡта.

# АУЫЛҒА ҠАЙТЫҒЫҘ!



**Республикала агросәнәғәт комплексының йәш белгестәренә дәртләндереү аҡсаһы 750 мең һумғаса арттырылды. Хәҙерге ваҡытта 500 мең һум күләмендә гранттар бүленә.**

Башҡортостан Башлығы үҙенең указы менән агросәнәғәт комплексының йәш белгестәренә - юғары һәм урта уҡыу йорттарын тамамлап, ауыл хужалығы ойошмаларына һәм шәхси эшҡыуарҙарға эшкә урынлашҡан йәш белгестәргә ярҙам параметрҙарын билдәләгән 2009 йылғы документҡа төҙәтмәләр индерҙе. Документҡа ярашлы, 2023 йылда ауыл хужалығының йәш белгестәре өсөн дәртләндереү аҡсаһы 750 мең һум буласаҡ. Программа шарттары буйынса, дәүләт ярҙамына дәғүә иткән белгестең йәше 35-тән артмаҫҡа, профиле белеме һәм ярты йылдан ашыуыраҡ эҙлекһеҙ хеҙмәт стажы булырға тейеш.

Быйыл 53 йәш белгескә 500-әр мең һумлыҡ грант тапшырыла. Конкурста бөтәһе 78 кеше ҡатнашты. Еңеүселәрҙең икәүһе - урта һөнәри, 41-е - юғары белемле. Агросәнәғәт комплексында кадрҙарға ҡытлыҡ,ә 30 йәшкә тиклемгеләр йәш хеҙмәткәрҙәр - яҡынса 8 процент, шуға күрә дәүләт программаһы ҙур ярҙам булып тора, тип билдәләнеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында.

# БАҠСАСЫЛАРҒА ЯРҘАМ



**Быйыл Башҡортостан бюджетынан баҡсасылыҡҡа булышлыҡ итеүгә 100 миллион һум бүленде. Шуның 50 миллион һумы - электр менән тәьмин итеү мәсьәләләрен хәл итеүгә, 50 миллион һумы юл инфраструктураһына йүнәлтелә.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика баҡсасыларының "SMART-баҡсасы" беренсе форумында ошо турала белдерҙе. Унын һүҙҙәренсә, трансформаторҙар һәм электр тапшырыу линиялары заманса йөкләмәләргә яуап бирмәй. Уларҙың күбеһе иҫкергән. Даими техник хеҙмәтләндереү, капиталь ремонт, селтәрҙәрҙе яңыртыу йәки алмаштырыу талап ителә. "Баҡсасылыҡ ширҡәттәренең тағы бер проблемаһы - юл инфраструктураһы. Баҡсасылыҡ ширҡәттәренә инеү юлдарының дөйөм оҙонлоғо - 1 600 саҡрым. Хужалары билдәләнгән 30 саҡрымлыҡ юлды ремонтлауға быйыл 50 миллион һум йүнәлтәбеҙ. Был 77 баҡсасылыҡ ширҡәтенә инеү юлын һалырға мөмкинлек бирергә тейеш", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

Баҡсасыларҙы транспорт менән хеҙмәтләндереү мәсьәләһенең киҫкен тороуы ла билдәләнде. Йыл һайын "Башавтотранс" апрель аҙағынан башлап октябргә тиклем баҡсасылыҡ ширҡәттәренә маршруттар ойоштора. Коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәттәренә тиклем 59 миҙгелле маршрут, юл хаҡы өсөн түләгәндә льготаларҙың бөтә төрҙәре лә ғәмәлдә. Ләкин, Радий Хәбиров билдәләүенсә, уға Өфө арьяғында баҡсалары булған кешеләр мөрәжәғәт иткән. Унда йәмғеһе 50-ләп коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәте эшләй. Халыҡты канат юлында һәм паром кисеүендә йөрөүгә бәйле ташламалар борсой. Әммә йыл һайын 150 мең самаһы кеше файҙаланған был транспорт төрҙәре "Алға" берҙәм транспорт картаһының "бәхетле сәғәт" льготаһы системаһына инмәй. Республика Башлығы республиканың Транспорт министрлығына, Өфө хакимиәтенә "Алға" картаһын паромда ла ҡулланыу мөмкинлеген ҡарарға, техник мөмкинлек булһа, был мәсьәләне хәл итергә ҡушты.

Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Быйыл Башҡортостан халҡы ҙур ваҡиғаны билдәләй - халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл. Был исем тыуған еренә, халҡына һөйөү һаҡлаған һәр кем өсөн ҡәҙерле. 25 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың 90 йыллығына бағышланған тантаналы кисә була. Режиссеры - Сулпан Аҫҡарова, сценарий авторы - Гөлсәсәк Саламатова. Киске сәғәт 7-лә башлана.

✓2024 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында Фехтование үҙәге төҙөү планлаштырыла. Республиканың спорт министры Руслан Хәбибов ошо хаҡта белдерҙе. "Беҙ уны мотлаҡ төҙәрбеҙ", - тине министр, Токиолағы олимпия чемпионы Аделина Заһиҙуллинаның сығышына яуап биреп.

✓"Smart Office" компанияһы "Өфө" индустриаль паркында автоматлаштырылған офис мебеле производствоһын асырға йыйына. Башҡортостандың Үҫеш корпорацияһында (парк операторы) билдәләүҙәренсә, инвестор тап ошо урынды һайлаған, сөнки "Өфө"нөң төп резиденты - "Кроношпан" ағас эшкәртеү заводы. Предприятиелар элек тә хеҙмәттәшлек иткән, ләкин хәҙер яңы производство ташыуға һәм логистикаға бәйле булмай, сығымдар ҙа кәмей.

✓Өфө терәк-хәрәкәт аппараты зарарланғандар араһында йөҙөү буйынса Рәсәй чемпионатын ҡабул итә. Ярыштар 18-26 апрелдә Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәге бассейнында ойошторола. Рәсәйҙең Паралимпия комитеты президенты Павел Рожков һүҙҙәренсә, Башҡортостандың баш ҡалаһына башҡа илдәрҙән дә вәкилдәр килә. Белоруссиянан - ун, Донецк Халыҡ Республикаһынан иһә өс спортсы.

✓Өфөнөң Әхмәтов урамы, 293 адресы буйынса традицион йәрминкә сауҙаһы башланды. Кушнаренко һәм Өфө районы ауыл хужалығы етештереүселәре йәрминкәгә үҙ продукцияларын килтерҙе, тип хәбәр ителә ҡала мэрияһы сайтында. Өфө халҡы махсуслаштырылған сауҙа урындарына күплә килә һәм йәшелсә, киптерелгән емеш-еләк, бал һатып ала. Йәрминкәлә шулай уҡ баҡсаға яҙ ултыртыла торған еләк-емеш ағастары, декоратив культуралар үсентеләре лә бар.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Эшсе ҡулдарға ихтыяж булыуын коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү тармағында 251 водитель-механизатор, 466 юл эшсеһе вакансияһы булыуы ла раҫлай.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЭШСЕ ҠУЛДАРҒА ИХТЫЯЖ

**Уҙған аҙнала Башҡортостандың өҫтөнлөклө һөнәри әҙерлек үҙәгендә һөнәри белем биреү ойошмаларының директорҙары менән осрашыу үтте. Унда Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев та ҡатнашты һәм оператив кәңәшмәлә ошо хаҡта ла һөйләп китте.**



Бөгөн баш ҡалала 34 мең студент белем ала, улар 64 компетенция буйынса уҡый. Кадрҙар төрлө йүнәлештәр - торлаҡ-коммуналь хужалығы, төҙөлөш, IT-системаһы һ.б. тармаҡтар буйынса әҙерләнә. Заман менән бергә атлайым тиһәң, һәр ваҡыт камиллашып торорға ла кәрәк. Был йәһәттән, Өфөлә "WorldSkills Russia" чемпионаты уҙғандан һуң 109 заманса оҫтахана булдырылған, һөнәри белем биреү объекттары комплекслы яңыртыла. Эшсе ҡулдарға ихтыяж булыуын коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү тармағында 251 водитель-механизатор, 466 юл эшсеһе вакансияһы булыуы ла раҫлай. Һуңғы йылдарҙа эшсе һөнәрҙәренә иғтибар артыуы ҡыуаныслы, юҡһа, барыһы ла йылы урын табырға тырыша ине, ә кемдер атҡа бесән һалырға ла тейеш бит - аҡыллыға ишара.

Көн тәртибенә сығарылған темаларға килгәндә, 2019 йылдан алып рөхсәт ителмәгән урындарҙа иғландар элеүгә ҡаршы көрәш алып барыла. Уҙған йылда ошо йәһәттән 1900 административ протокол төҙөлгән. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексы талаптарына ярашлы, бындай тәртипһеҙ ҡылығы өсөн граждандарға 2 меңдән 6 меңгә тиклем, ә вазифа биләүселәргә 10 меңдән - 16 меңгә тиклем штраф һалыу ҡаралған. Хоҡуҡ боҙоу ҡабатланғанда, штраф күләме лә ике тапҡырға арта. Баш ҡала "Автодозвон" системаһы бына бер нисә йыл инде ошо рөхсәт ителмәгән урындарға реклама һәм иғландар урынлаштырыуға ҡаршы көрәшә, йәғни иғландарҙа күрһәтелгән телефон һандары буйынса шылтыратып, гражданды иҫкәртәләр һәм хоҡуҡ боҙоуҙы туҡтатырға ҡушалар. Әгәр граждан был тәҡдимгә күҙ йомоп ҡарай икән, уға даими рәүештә автошылтыратыу килеп торасаҡ, уны "Ҡара исемлек"кә индереп тә булмай, бары тик административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протокол төҙөлгәндән һуң яҙылған ғариза нигеҙендә генә туҡтатырға мөмкин. Бөгөн ошо системаға индереү өсөн 10 меңдән ашыу материал килгән.

Баҡсаларына йылға аша йөрөгән граждандар өсөн дә яңылыҡ бар: быйыл навигация 22 апрелдә асылыр тип көҙәллана. Баш ҡалала ташҡынға һәм халыҡты йылға аша ташыуға 11 - үҙйөрөшлө, 5 ҡулдан идара ителгән судно әҙер.

Шулай уҡ көн ҡаҙағына ҡала өмәләре ваҡытында йыйылған сүп-сарҙы сығарыу һәм Өфө территорияһында рөхсәт ителмәгән сүп-сар түгеү урындарын булдырмау мәсьәләһе ҡуйылды. Оператив кәңәшмәлә килтерелгән мәғлүмәттәргә ярашлы, 21 марттан 18 апрелгә тиклем уҙғарылған санитар айлыҡ ваҡытында 12019 кубометр күләмендә сүп-сар йыйылған һәм сығарылған.

Һәм тағы ла иғтибарҙы йәлеп иткән бер мәл: ошо көндәрҙә Республика Башлығы Радий Хәбиров урамда һатыу иткән әбей-бабайҙарҙы ҡыумаҫҡа, ә уларға ваҡытлыса сауҙа нөктәләре ойоштороға ҡушҡайны. Оперативкала ошо хаҡта ла сығыш булды һәм был йүнәлештә алып барылған эштәр тураһында мәғлүмәт бирелде. Бәлки, был билде тағы ла ҡыҫыбыраҡ бәйләргә ишара булғандыр?..

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТАШЛАМАЛАР



**Рәсәйҙәр өсөн элегерәк ғәмәлдә булған автомобилдәрҙе утилләштереү программаһын һәм илебеҙ автомобилдәрен һатып алыу өсөн 150 мең һумға тиклем ташламалар системаһын тергеҙеү планлаштырыла.**

Был турала "Известия" хәбәр итте. Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығына был башланғысты "Руслом.ком" ассоциацияһы ебәргән. Ассоциация директоры Виктор Ковшевный һүҙҙәренсә, 2010-2018 йылдарҙа илдә иҫке автомобилде эшкәртеүгә тапшырыу буйынса дәүләт программаһы эшләй, яңыһын һатып алыу өсөн ташлама бар ине. Был юлы дисконтты 50 меңдән 150 мең һумға тиклем арттырырға тәҡдим ителә.

## ТЫЙЫЛА



**Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт Рәсәй биләмәһендә Google компанияһы һәм уның мәғлүмәт ресурстары рекламаһын таратыуҙы тыйҙы, тип хәбәр итте ведомствоның матбуғат хеҙмәте.**

Быға корпорацияның күп тапҡыр Рәсәй ҡануниәтен боҙоуы сәбәпсе. Google компанияһының YouTube видеохостингы - илдең Украинала барған махсус операцияһы тураһында ялған мәғлүмәт тараткан төп майҙансыҡтарҙың береһе. Бынан тыш, Роскомнадзор белдереүендә әйтелгәнсә, компания һаманғаса экстремистик ойошмалар тураһында 12 меңдән ашыу мәғлүмәттең һылтанмаһын юймаған.

ҠЫҪҠАСА

## БЫНДАЙ ПРИЮТ КӘРӘК!

✓**Тиҙҙән Башҡортостандың баш ҡалаһында "Әсә һәм бала" социаль приюты асылыуы ихтимал.** Инвестиция сәғәтендә Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ошо проектты ҡараны. Бындай башланғыс менән "Йәшәүгә хоҡуҡ" Башҡортостан төбәк йәмәғәт ойошмаһы вәкилдәре сығыш яһаны."Приюттың маҡсаты - ауыр тормош хәлендә ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарға һәм балаларға бушлай комплекслы ярҙам күрһәтеү. Социаль приютта бер үк ваҡытта республикабыҙҙан һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән 100-гә яҡын балалы ҡатын-ҡыҙ йәшәргә мөмкин", - тип хәбәр итте Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте. Инвесторҙар ҡаланың Калинин районында яңы "Гастелло" сауҙа үҙәген төҙөргә тәҡдим итте. Инвестор Алексей Матвеев әйтеүенсә, торлаҡ төҙөлөшө әүҙем бара, шуға заманса сауҙа-социаль объекттарға ихтыяж бар. Төрлө перспективаларҙы ентекле тикшергәндән һуң, Ратмир Мәүлиев проекттарҙы хупларға тәҡдим итте.

✓**Башҡортостандың Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр министрлығы республика компанияларына сит илдә теркәлеүҙә ярҙам күрһәтә.** Ведомство башлығы Маргарита Болычева хәбәр итеүенсә, әлеге ваҡытта уларға Ҡаҙағстанда һәм Төркиәлә бүлендек компанияларын асырға теләгән ун предприятие мөрәжәғәт иткән. "Урал пружина заводы" яҡын сит илдәрҙә теркәлгән дә инде, әле "Уфанет" рәсмиләштерелә. "Ошо юридик берәмектәр аша продукциябыҙ башҡа илдәргә оҙатыла, ситтән республикаға индерелә", - тине министр. 2021 йылда Ҡаҙағстанда һәм Белоруссияла Башҡортостан вәкиллектәре асылды. 2020 йылда Төркиәлә вәкиллек эшләй башланы. 2022 йылда Рәсәйҙең Үзбәкстандағы һәм Ҡытайҙағы сауҙа вәкиллектәре ҡарамағында республика офистарын асыу күҙаллана. 2024 йылға вәкиллектәр селтәрен һигеҙгә еткереү планы бар, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр министрлығында.

✓**Вирусологтар май айында ковидтың яңы тулҡынын фаразлай.** Коллектив иммунитетҡа өлгәшеүгә бәйле коронавирустың яңы күтәрелеше февралгә ҡарағанда көсһөҙөрәк булырға тейеш, тип иҫәпләй вирусолог, Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Александр Лукашев. Әлеге ваҡытта Европаның һәм Төньяҡ Американың ҡайһы бер илдәрендә яңы коронавирус йоҡтороу осраҡтарының артыуы күҙәтелә, тип билдәләне вирусолог. Ҡытайҙа йәнә коронавирус тарала. Атап әйткәндә, Шанхайҙа карантин индерелде. "Шуға күрә бер нисә аҙнанан беҙҙә лә сирҙең башланыуын көтөргә мөмкин. Ләкин һандар февраль тулҡынына ҡарағанда күпкә аҙыраҡ булыр, моғайын, сөнки коллектив иммунитет ҡаҡшаһа ла, ярайһы уҡ юғары кимәлдә ҡала", - тип хәбәр итте ТАСС агентлығы ғалимдың һүҙҙәренә һылтанма менән.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөтөлһөҙлөк

❖ Яҫтыҡ тышын алып, эсенә киптерелгән юл япрағы, шиңмәҫгөл сәскәһе, ҡомалаҡ, бөтнөк, ромашка, мәтрүшкә тултырырға. Бер ҡосаҡ хуш еҫле бесән тығырға. Кискеһен йоҡларҙан алда таҫҡа әҙ генә һыуыҡ һыу ҡойоп, аҡты шунда тығып һалҡын алырға. Түшәккә ятҡанда аяҡ осона эҫе һыу тултырылған йылытҡыс һалырға. Яҫтыҡҡа ла эҫе һыу һирпеп алырға. Саф һауала, аҡланда йоҡлаған кеүек хуш еҫтәр бөркөлгән яҫтыҡта тыныс йоҡоға талаһың.

❖ Боланут һәм туҡранбаш үләндәрен тигеҙ өлөштә алып, ваҡларға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Сәйҙе йоҡлар алдынан 1 балғалаҡ бал ҡушып эсергә.

### Бойлоҡһоҙлоҡ

**Бойлоҡһоҙлоҡтан (кесе ярауҙы тота алмау) халыҡ дауаһында түбәндәге эсулдар бар.**

❖ 2 балғалаҡ ваҡланған талҡан емеш (толокнянка) япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ҡымыҙлыҡ үләне (кислица обыкновенная) япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был ағыулы үләндән эшләнгән дауаны ҡулланғанда иғтибарлы булыу мөһим.

❖ 1 балғалаҡ киптерелгән етен үләнгә (льнянка обыкновенная) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә, һыуынғас һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Етен үләнден көслө булыуын иҫәпкә алып, был рәүешле дауаланыуҙы 2-3 аҙнанан артыҡ үтәргә ярамай.

❖ 4 балғалаҡ ваҡланған бесәй тырнағы (алтей) тамырына 2 стакан ҡайнатылған һыуыҡ һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм бойлоҡһоҙлоҡ йәки ул һыҙландырып килгәндә көнөнә 3 тапҡыр сирек стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөн термосҡа һалып 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөп, төнәтмәне 4 өлөшкә бүлергә һәм ашарҙан 1 сәғәт алда эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

## ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Шулай уҡ ағастан ҡабарынҡы орнаментлы һандыҡтар ҙа булған, бизәк боронғо ысул менән ерлекте соҡоп эшләнгән. Үткән быуаттың 50-се йылдарында оҫта эшләп биргән һандыҡтарға хужабикәләр майлы буяу менән сәскәләр һәм япраҡтар төшөргән. Ҙур япраҡтар һәм сәскәләрҙән торған һүрәт сүпләп сигелгән әйберҙе хәтерләтткән. Барыһынан да айырылып торған һандыҡты 1958 йылда Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылында Ырыҫбаева Мәймүнә өйөндә осраттыҡ. Уны ХХ быуат башында урындағы оҫта Шәрифулла Ҡәйүмов эшләгән. Орнамент һандыҡтың алғы яғында һәм ҡапҡасында урынлашҡан. Ялпаҡ ҡабарынҡы һырлау ҡулланылған. Урталағы ҙур бизәк төптәре менән тоташҡан лира уйын ҡоралын хәтерләтә, уның ике яғында өс йондоҙ. Был композиция хикмәтле һыҙатлы ҡыҫан эсендә урынлашҡан, мөйөштәрендә - үҙәккә ҡарай йүнәлтелгән бәләкәй генә һөңгә баҫҡтары.



*Һырлы һандыҡ. Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылы, 1958 йыл. Г.И. Мөхәмәтшин фотоһы*

1976 йылда Ҡаһарман ауылындағы өйҙәрҙең береһендә соланда ултырған ҙур ғына боронғо һандыҡ күрҙек, уның ал яғы ҡырыу станогы ярҙамында эшләнгән яртылаш-яртылаш таяҡсалар, ҡыя шаҡмаҡ һәм түңәрәктәр менән биҙәлгән. Һандыҡтың ҡапҡасы һөҙәк булған.



*Ҡағылған биҙәкле һандыҡ. Белорет районы Ҡаһарман ауылы, 1976 йыл. Автор фотоһы*

Өй эсенең йыһазы тураһында һөйләгәндә ағас сәң-гелдәктәрҙе телгә алмай булмай. Уларҙы ҡыҫан рәүешендә эшләгәндәр, йыҡа ғына тар таҡталарҙы йышып, ағас бурсаларға кейҙереп ултыртҡандар, төбө сентә йәки киндерҙән булған. Сәңгелдәктә түбә таҡтаһына пружина менән элгәндәр. Сабый йорттоң иң йылы һәм унайлы яғын биләгән, ул ус төбөндәгеләй барыһына ла күренеп торған. Ғәҙәттә сәңгелдәктең бурсаларын һырлап яһағандар. Ҡайһы берҙә ҡырыу станогы ярҙамында матурлағандар.

Өй эсен биҙәүгә йүнәлтелгән халыҡ ижады ҡайһы бер осраҡта шундай көтөлмәгән нәмәлә сағылған. Бер өйҙә фабрикала эшләнгән стена сәғәте осраһа, икенсеһендә уның ситтәре семәрләп ҡулдан яһалған булған.



*Сәғәт тышлығы. Күгәрсен районы Юлдыбай ауылы, 1970 йыл. Автор фотоһы*

Шулай уҡ балалар уйынсыҡтары араһында артыҡ деталләштереп тормай ғына ҡырып эшләнгән тәгәрмәсле ағас ат табылған. Һырланған ҡумталар, ҡаптар осраған. Йыш ҡына был һәр кемдең оҫталығын күрһәтергә теләп башҡарылған үҙаллы ижад емешенән ғибарәт булған. Шулай ҙа бындай оҫталыҡ үрнәктәре дөйөм халыҡтың милли мәҙәниәте һыҙаттарын сағылдырған, сөнки аңлы рәүештәмә йәки күңеле һиҙемләүенә таянып, һәр кем бала сағынан уҡ уның рухын, теҙәләшәнен һәм аһәңлеген тойоп үҫкән. Нәфис ҡул эштәре ауыл өйөнөң ғәҙәти йыһазына килешеп торған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

## ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

**Һуңғы йылдарҙа гәзитебеҙҙә күп кенә авторҙарыбыҙ тарафынан төрлө матур һүҙҙәр хаҡында мәҡәләләр баҫылып тора. Телебеҙҙә гүзәл һүҙҙәр, ысынлап та, бихисап. Кемдәрҙер "әсәй", икенселәр "тыуған ил", "туған тел", өсөнсөләр "изгелек", "миһырбанлыҡ" тигән һүҙҙәрҙең матурлығы хаҡында һөйләй. Ҡайһылар бер-беребеҙгә өндәшә торған ягымлы һүҙҙәрҙе иҫкә ала, шуларҙы ҡулланып йәшәһәк, тормошобоҙҙоң тағы ла йәмлерәк булыуы хаҡында фекерләй. Бына шундай милләттәштәремдең күплегенә һөйөнәм.**

# БЕР-БЕРЕБЕҘҘЕ СӘЛӘМЛӘЙЕК,

## бер-беребеҙгә йышыраҡ йылмаяйыҡ!



Боронғолар "Йылы һүҙ - йән аҙығы, яман һүҙ - йән ҡаҙығы", тигән. Егеттәребеҙгә "батыр", ҡыҙҙарыбыҙға - "һылыу", тиҫтерҙәребеҙгә - "ҡорҙаш", исемдәштәребеҙгә - "аҙаш", бөтөнләй белмәгән кешеләребеҙгә -"яҡташ", хатта "туған" тип мөрәжәғәт итеп, донъялыҡтағы ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙҙе матурлыҡҡа төрәйек, тигән мәғәнәле мәҡәләләрҙе кинәнеп уҡыйым. Боронғолар оло йәштәрҙәге ир-аттарыбыҙҙы "уҙаман", "аҡһаҡал" тип тә йөрөткән.

Ошо атамалар лөғәтебеҙҙә һирәгәйеп барғандай. Бөгөнгө көн уларҙы башлыса тел белгестәре - уҡытыусы, яҙыусы, журналистар ғына ҡуллана тиерлек. Ҡасандыр гәзиттәребеҙҙең береһендә ниндәйҙер мәҡәләм буйынса әңгәмәләшкән авторҙарҙың береһе мине "Хәлил уҙаман" тип атауы күңелемә яҡҡайны. Шунан бирле мин дә бына ошо һүҙҙе үҙемдең ҡорҙаштарыма ҡарата ҡулланырға тырышам. Бала сағымда атайым ауылдағы оло ир кешеләр хаҡында "Фәлән уҙаман" тип һөйләгәнен ишеткеләй торғайным. Уҙаман тигән һүҙҙең асылын күптәр, бәлки, аңлап та етмәүе ихтимал. Уны бөгөнгө ҡайһы бер милләттәштәремә "старейшина", "патриарх" тигән урыҫ һүҙҙәре аша аңлатыу дөрөҫ булыр тип уйлайым. "Кесегә шәфҡәт ит, уҙаманға хөрмәт ит" тигән әйтем дә бар. Ҡайһы бер гәзит һәм журналдарға яҙған мәҡәләләремде "Аҡһаҡал һүҙе" рубрикаһы аҫтына ҡуйып сығарыуҙары ла оҡшай. Бындай матур һүҙҙәребеҙҙе халҡыбыҙ теленән төшөрөп ҡалдырғы килмәй. Тиҫтә йылдар элек "Киске Өфө" аша "Агиней" һүҙе менән таныштырғайным. Иманлы, ысын асыллындағы, һәр кемгә өлгө итеп ҡуйырҙай олораҡ йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы шулай тип атау ҙа уларға ҡарата ихтирам тойғоһо уята.

Элегерәк оло кешеләрҙең бер-береһе менән "арыумы", "арыумыһығыҙ", тип күрешкәнен иҫләйем. Милләттәштәребеҙҙең боронборондан килгән бындай өндәшеүҙәре, уларҙың бер-береһенең хәленә битараф булмауының, таныш-тоноштарын, күрше-күләнен ҡайғыртыуының да билдәһелер. "Һау бул", тип хушлашыу ҙа шундайыраҡ маҡсатҡа эйә. "Хәйерле иртә", "хәйерле көн", "хәйерле кис", "хәйерле төн" тип бер-береһенә теләк теләү ҙә мәнәсәбәттәребеҙҙе йылауыы һүҙҙәр. "Хәйер" (гәрәпсәнән урыҫ теленә "отлично", "превосходно", "благо" тип тәржемәләнә) башҡа бихисап һүҙҙәр һымаҡ уҡ, беҙҙең телгә динебеҙ менән бергә килгән. Берәй хәл булғанда (яҡшымы ул, насармы) һәр саҡ "хәйерлегә булһын" тип әйтәләр. Беҙ мәктәптә уҡығанда уҡытыусы ағай һәм апайҙар һәр саҡ оло кешеләргә (таныш булмаһа ла) һаулыҡ һорашып йөрөргә өйрәтәләр ине. Хәҙер ҙә, әлбиттә, шулайҙыр. Айырыуса, ауылдарыбыҙҙа урамда осраған балаларҙың "Һаумыһығыҙ" тип үтеүен йыш ҡына күрергә тура килә.

Бер-берегә ниндәйҙер һүҙҙәр әйтеү хаҡында фекерләп, бәғзеләр "һүҙ көсө" тигән терминды ла ҡулланып әбәрә. Һүҙ үҙе ниндәйҙер бер тылсымлы көскә эйә булмай, әлбиттә. Быны дөрөҫ аңлау кәрәк. Тик кешегә әйткән һүҙең яҡшы, йә иһә, кирәһенсә, насар булып, Раббыбыҙ тарафынан уның ҡабул ителеүе һәм уның ғәмәлгә ашырылыу-ашырылмауы бар. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, һинең ниндәйҙер теләгеңдең үтәлеү-үтәлмәүе фәҡәт Аллаһ Тәғәләнең көсө һәм уның ҡулында тип ҡарау кәрәк. Мәҫәлән, Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с кешене ҡарғауҙы тыйған. Сөнки берәү икенсе кешегә яман теләктәр теләй икән, уның һүҙҙәре һис тотҡарлыҡһыҙ күктәргә оса һәм унан тәғәйенләнгән кешегә ("адресатҡа") төшөрөлә. Әгәр ана шул кеше был ҡарғышҡа лайыҡ түгел икән, насар һүҙ унан "ҡаҡлығып", ҡабаттан күккә менә һәм... ҡарғаған кешенең үҙенә ҡайта! Ошо хаҡта Бәйғәмбәребеҙҙән сахих хәҙис бар. Халыҡта бәғзе бер ҡарғарға яратыусыға "карғышың үҙ башыңа төшмәгәйе", тигән иҫкәртеүҙе һәр кемдең ишеткәне барҙыр... Ә инде кешеләргә ҡарата әйтелгән яҡшы һүҙҙәрең, изгелекле доғаларың өсөн фәҡәт шатланып ҡына йәшәргә ҡала. Уның өсөн үҙеңә тик әжер (гәр. вознаграждение) генә вәғәҙә ителә. Берәй кешенең үҙенә ишеттермәй, уның өсөн Аллаһҡа ялбарыу айырыуса яҡшы. Шул мәлдә бындай изгелекле теләктәрең өсөн фәрештәләрҙән: "Үҙеңә лә шул булһын", - тип доға ҡылыуы хаҡында ла Бәйғәмбәребеҙҙән с.ғ.с. риүәйәт бар.

Халҡыбыҙҙа киң таралған "сәләм" һүҙендә айырыуса туҡталып китмәксемен. Ғәрәптән күскән был һүҙ ифрат күп мәғәнәгә эйә. "Имен булыу", "ҡотолоу" тигәндә аңлата ул. Шулай уҡ, "иҫән-һау" (сәләмәт) тип тә тәржемәләнә. "Тыныслыҡ", "һиллек" тигән мәғәнәһе лә бар был һүҙҙең (бәғзе бер һүҙлектә урыҫ теленә "мир, безопасность" тип тәржемә ителгән).

Сәләм - Аллаһ Тәғәләнең туҡһан туғыҙ исеменең береһе. Бәйғәмбәр (саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм) Раббыбыҙҙан ниҙер үтенеп доға ҡылғанда, Уның исемдәрен әйтеп мөрәжәғәт итергә ҡушҡан. "Сәләм" тип кенә әйткәндә, беҙ, әлбиттә, был һүҙҙең әле һанап киткән тәржемәүи мәғәнәләре хаҡында ғына фекерләйбеҙ. Ә ана шул һүҙҙең алдына "Әл" артикле ҡуйыла икән, был фәҡәт Аллаһ Тәғәләгә генә хас булған исемде аңлата. Ҡағыҙға "Әл-Сәләм" тип яҙыла ул, әммә ғәрәп теле ҡағиҙәһенә ярашлы, беҙ уны "Әс-сәләм" тип уҡыйбыҙ. Мосолмандарға бер-береһен "Әссәләмү ғәләйкүм!" тип сәләмләргә ҡушылған. Был сәләмләүҙе "һаумы", "привет" тигән һымаҡ ябай ғына һүҙбәйләнеш йә иһә "карттарса һаулыҡ һорашыу" тип кенә аңлау ярамай. Уның "Һеҙгә Аллаһтан именлек булһын!" тигән оло мәғәнәгә эйә булыуын белергә тейешбеҙ (урыҫтар уны "Мир вам!" тип тәржемәләгән). Кешеләрҙең бер-береһе өсөн Раббыбыҙға ялбара торған изге доғаһы тип аңлау кәрәк быны. Ана шундай сәләм биргән кешегә "Үә ғәләйкүм әс-сәләм!" тип яуап ҡайтарыу кәрәк, был "Һәм һеҙгә лә Аллаһтан именлек, һаулыҡ булһын!" тигән мәғәнәгә эйә. Мосолмандар осрашҡанда ла, айырылышҡанда ла (көнөнә нисә мәртәбә осрашыуына ҡарамаҫтан) бер-береһен тап ана шулай сәләмләргә тейеш, һәм быны сауабы ла ҙур. Шулай күрешкән ике мосолман ҡабаттан айырылып киткәнсегә тиклем, уларҙың икеһенең дә гонаһтары бер-бер артлы ҡойолоп төшөп тороуы хаҡында Бәйғәмбәребеҙҙән с.ғ.с риүәйәт бар.

Ир кеше ҡатын-ҡыҙға сәләм бирергә тейеш түгел, имеш, тип ишеткеләгәнем бар. Әммә шәриғәттә бындай тыйыу юҡ. Гүзәл затҡа сәләм биреү ярамай, тигәндәр, моғайын, ҡул биреүҙе күҙ уңында тоталыр. Ысынында, яҡын туғаның булмаған ҡатын-ҡыҙҙар менән генә ҡул бирешеп күрешеү хупланмай. Ә ҡатыныңа, әсәйеңә, ҡәйнәңә, апайһеңлеләреңә, ҡыҙҙарыңа ҡул биреп күрешергә мөмкин.

Урам буйында китеп барғанда хатта бөтөнләй таныш булмаған мосолмандар ҙа бер-береһе менән күрешәләр. Тышҡы ҡиәфәттән (һаҡал, теүәтәйҙән) танылмылыр, йәш егеттәрҙең сәләм биреп уҙыуҙарын күреп, ололарса ҡыуанам. Үҙем дә уларҙы сәләмләргә тырышам. Хатта бер мәл ҡаршыма көрәк һаҡаллы, башына ҡара теүәтәй, шулай уҡ ҡара төҫтәге оҙон елән кейгән берәүгә сәләм биргәс, уның минә яуап бирмәгәнен күреп аптырағайным. Һуңғараҡ ҡына төшөнөп ҡалдым: был сиркәүҙә хеҙмәт иткән христиан кешеһе булды, ахырыһы...

Тағы бер бик мөһим нәмә хаҡында иҫкә алып китеүҙе кәрәк тип һанайым. Милләттәштәребеҙ бер-береһенә йылмайыу бүләк итергә бер ҡасан да тартынмаһын ине. Хатта йылмайғылары килмәгән саҡтарында ла... Бәйғәмбәребеҙҙән с.ғ.с кешегә әйтелгән йылы һүҙҙең дә саҙаҡа икәнлеге хаҡында хәҙисе бар. Йылмайыу тураһында уйлана башлау менән беҙ йәш саҡта популяр булған бер йырҙың һүҙҙәре иҫкә төшә:

*Йылмайып тыуа матур таңдар,*
*Йылмайып килә йылы яҙҙар,*
*Донъяла иң гүзәл ерҙә*
*Шатланып-йылмайып бергә*
*Йәшәйек беҙ, йәшәйек, дуҫтар!*

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *Күрәһең, урта быуаттарҙа һырҙыларҙың ата-бабалары Евразия далаларында көн иткән олораҡ бер ҡәүем тармаҡтарының береһе булып, билдәле бер тарихи сәбәптәр арҡаһында Көньяҡ Уралға ҡайтып, ошонда ерегеп ҡалған.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҺАЛЙОТ, ТЕРҺӘК, ҺЕҢРӘН, БӘКӘТИН, ҺЫРҘЫ, ШУРАН-

## оло башҡорт иленең кесе ырыуҙары улар



Башҡортостандың Себер даруғаһында Рәсәй хакимиәте документтарында "Чирлинская волость", тип теркәлгән административ территория була. Был башҡорттарҙың һырҙы, йәиһә сырҙы ырыуы ерҙәренә ҡарай. Һырҙыларҙың килеп сығышын асыҡларға мөмкинлек биргән тарихи материалдар юҡҡа иҫәп. Ғалим-этнолог Р.Ғ. Кузеев фекеренсә, һырҙы башҡорттары, ҡыуаҡандар кеүек үк, күпкә ҙурыраҡ һәм көслөрәк булған табын (ҡара-табын) этник берләшмәһенә ингән була. Р.Ғ. Кузеев уларҙың ырыу тамғаларының бер иш булыуы, шәжәрәләрендә, риүәйәттәрендә яҡын ҡәрҙәш икәнлектәре хаҡында бәйән ителеүен ышаныслы дәлил итеп ҡарай. Башҡа бер сығанаҡтарға ярашлы, оло табын берләшмәһенең алты тармағы була: табын ырыуы үҙе, ҡыуаҡан, һырҙы, бишул, ҡумрыҡ һәм баҙраҡ.

Әммә табын этник берләшмәһенең социаль-сәйәси тамырҙары булыуын да иҫәпкә алырға кәрәктер. Уға ингән ҡәүемдәрҙең тарихи сығышында билдәле айырымлыҡтар бар. Табындарҙың боронғо тамырҙары фарсы (иран) телле уйшин (усунь) ҡәбиләләренә барып тоташһа, ҡыуаҡандар монгол мөхитенән сыҡҡан ҡәүемдәрҙән иҫәпләнә. 1744 йылда Пекинда "Һигеҙ байраҡ составында булған маньчжур ырыуҙарын дөйөм барлау" тип аталған хеҙмәт баҫыла. Ошо китапта аталып үтелгән 233 монгол һәм маньчжур ҡәбиләләре исемлегендә Кэокин тип аталғаны ла иҫкә алына, был башҡорттарҙың ҡыуаҡан тигәненә бермә-бер тап килә. Һырҙы/сырҙы ырыуы атамаһына килгәндә, уның этимологияһына иғтибар итеү фарыз. "Һыр/сыр" - атаманың тамыры, ә "-ҙы" - һүҙ яһаусы суффикс (көнсығыш диалектында "-лы" суффиксына тап килә). Бәғзе бер тикшеренеүселәр боронғо төрки телендә "чыри" һүҙенең йә ваҡ балыҡты, йә балыҡ һурпаһының һөҙлөгән аңлатҡанына иғтибар итә. Әммә ни сәбәптән ошо башҡорт этнонимының ваҡ балыҡ йәиһә балыҡ һурпаһы мәғәнәһенә тап килеүен аңлатыуы ҡыйындыр. Бында бер сағыштырыу урынлы кеүек тойола: шул уҡ Көнсығыш Башҡортостандың әйле (әйҙе) ырыуы атамаһының ай (әй) һүҙе менән бәйле булыуына һис бер шик юҡтыр. Башҡортостаныбыҙҙа Әй исемле гүзәл йылға ла бар бит. Ә тарихсыларыбыҙ ни эшләптер Урта Азияла боронғо осорҙарҙа уҡ Һыр (Сыр) атамалы йылға (Һырдарья/Сырдарья) барлығына һис бер иғтибар итмәгән. Ә шул уҡ Көнсығыш Башҡортостан ерен төйәк иткән башҡорттар үҙ шәжәрәләрендә һәм риүәйәттәрендә ата-бабаларының ҡасандыр Амударъя һәм Һырдарья үҙәндәрендә йәшәүҙәре хаҡында бәйән иткән. Һырҙылар, тимәк, Һырдарья буйынан килеүселәр, тип фараз ҡылырға ерлек бар.

Нисек кенә булмаһын, күрәһең, урта быуаттарҙа һырҙыларҙың ата-бабалары Евразия далаларында көн иткән олораҡ бер ҡәүем тармаҡтарының береһе булып, билдәле бер тарихи сәбәптәр арҡаһында Көньяҡ Уралға ҡайтып, ошонда ерегеп ҡалған. Әҙүлерәк, Урал һырттарының көнсығыш яғына күсенгәнсе, һырҙылар Йүрүҙән буйында ла йәшәп алған. Ҡайһы бер топонимик атамалар ошо хаҡта һөйләй. Хәҙерге Салауат районының Сулпан (Чулпан) ауылынан алыҫ түгел Сырҙы йорт, Сырҙы зыярат, тип аталған урындар бар. Һырҙыларҙың ҡыуаҡандар менән бер үк ваҡытта күсенеп йөрөүе, йәнәш ерҙәрҙә йәшәүе хаҡында алдараҡ әйтелгәйне. Шуға күрә шул уҡ Салауат районында ҡороп юғалған бер бәләкәй йылғасыҡтың үҙәне әлегә тиклем Ҡыуаҡан йылғаһы тигән гидроним менән аталып йөрөтөлөүе лә тиккә түгелдер.

Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышы ерҙәрен биләгән оло Әйле берләшмәһе биләмәләрендә әлеге ваҡытта бөтөнләйгә онотолған Шуран олоҫо ла булған. Шурандарҙың башҡа башҡорт ырыуҙары менән боронғо бәйләнештәре тураһында яҙма сығанаҡтар ғына түгел, ауыҙ-тел ижадында ла бер ниндәй ҙә мәғлүмәт табылмаған. Бәлки, ошо этноним менән аталған төркөм икенсе бер ырыуҙың бер тармағы ғына булғандыр. Шулай булһа ла, шуран ырыуы төркөмө рус хакимиәте документтарында айырым бер олоҫ булараҡ телгә алына. XVIII быуат башында төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының аҫаба ерҙәрен рус промышленниктары, заводчиктар, төрлө сәбәптәр табып, алдап-юлдап тигәндәй, тартып ала башлай. Хатта һатып алыу килешеүҙәре лә тупаҫ боҙола. Ерле башҡорт ырыуҙары вәкилдәренә батша власы органдарына ялыу яҙыуҙан башҡа сара ҡалмай. Ошондай бер документҡа, башҡалар менән бер рәттән, Шуран олоҫонон Булат исемле бер арҙаҡлы уҙаманы ла үҙ тамғаһын ҡуйған. Чусовая йылғаһы буйындағы башҡорт ерҙәрен законһыҙ үҙләштергән граф Строганов һәм урындағы башҡорттар араһындағы оҙайлы бәхәс хаҡында 1725 йылда Өфө провинция канцелярияһына ебәрелгән коллектив мөрәжәғәттә ошондай юлдар бар: "От нас, Сибирской дороги Мекетинской волости от Оларгула, Челжеуцкой волости от Боскуна, Катайской волости от Карабаша, Табынской волости от Абызана, Терсяцкой волости от Камая, Сенирянской волости от Назара, Шуранской волости от Булата, Чирлинской волости от Мамбетя, А[й]линской волости от Чювашбая, Кубаканской волости от Кашака, Кипчацкой волости от Утяша, Каратабынской волости от Курмангула, Сызгинской волости от Табыкая, и от всех старшин и младших Вам, князю Ивану Григорьевичу премного челобитье. После челобитья слова: Как всемилостивейшему Всероссийскому государству, преклоня головы свои, начали служить, то владели от начатия содержания Всероссийского престола царя Ивана Васильевича из ясашного платежа и из подводной гоньбы сею вотчиною, и ныне нет пустых вотчин. А сию вотчину волею своею не дадим тем Строгановым, понеже от царства царя Ивана Васильевича спору нету. А Государь излюби[л] нам [и] из ясаку пожаловал - дал те вотчины..."

Был үтә аҙ һанлы этник төркөмгә ҡараған башҡорттарҙың ата-бабалары боронғо төрки ҡәүемдәре составына ингән, тип фараз итергә була. Шуран исемле ҡәбилә XVI быуатта фарсы авторы Мулла Сәйф-ад-Дин бен Дәмелла Шах-Аббас Ахсикентиның "Маджму ат-таварих" тигән әҫәрендә телгә алына. Ул XIII - XV быуаттарҙа Алтын Урҙаның һуңынан "үзбәктәр" тигән дөйөм исеме аҫтында билдәле булған оло ҡәүеменең 92 ырыуы (аймағы) иҫәбенә индерелә. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр шурандарҙы шул уҡ үзбәктәрҙең ширин ырыуы менән сағыштырып, уларҙы бер үк ырыу икән, тип бутала. Әммә әле атап үтелгән авторҙың әҫәрендә ширин ырыуы ла, шуран да айырым аймаҡтар булараҡ теркәлгән. Джучи улусындағы башҡорт шурандары менән күскенсе үзбәктәрҙең шириндары бер үк ваҡытта гәйәт ҙур территория биләгән Алтын Урҙаның төрлө тарафтарында йәшәй. Шуран башҡорттарының ҙур ғына бер өлөшө Көньяҡ Уралдан байтаҡҡа көнбайыштараҡ булған ерҙәрҙе төйәк итеп, Ҡазан даруғаһында ла Шуран олоҫон хасил иткән. Татарстандың хәҙерге Лаеш районында, Кама буйында әле лә Шуран исемле рус ауылы бар; был топоним бында ҡасандыр шуран ырыуы кешеләре йәшәгәнлегә хаҡында белдереп тора.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 12-15-се һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Рейд барышында совет командованиеһы тарафынан корпусҡа, шул иҫәптән 112-се Башҡорт атлы дивизияһына ла гвардия исеме бирелгәс, Башҡортостан хөкүмәте ҡаһарман яугирҙарға ҡотлау телеграмаһы ебәрә, ошо хаҡта дивизияға ла радиограмма аша хәбәр килеп етә. Тыуған ерҙән килгән ҡотлау барса яугирҙарға еткерелә, улар исеменән яуап хаты ла әҙерләнә: "...Принимая доблестное звание гвардейской дивизии, мы хорошо понимаем, что оно обязывает нас быть еще более непримиримыми и смелыми в борьбе с заклятым врагом. Мы заверяем вас, что личный состав дивизии под руководством Ставки ВГК еще крепче будет бить фашистов и вместе со всем многонациональным советским народом добьется окончательного их разгрома... Помните, что успехи Красной Армии в борьбе с фашистскими оккупантами тесно связаны с прочностью тыла. Гв. генерал-майор М. М. Шаймуратов". Әммә комдив һәләк булып ҡалғас, ошо хат Башҡортостанға рейдтан сыҡҡандан һуң ғына ебәрелә, уға дивизияның яңы командиры Г.А. Белов ҡул ҡуя.

112-се Башҡорт атлы дивизияһы составында алыштарҙа ҡатнашҡан командирҙар һәм ябай һалдаттар һуғыштан һуң яҙған хәтирәләрендә комдив, генерал-майор М.М.Шаймуратовты оло ихтирам менән, хөрмәтләп иҫкә ала. Улар рейд ваҡытында ла, унан алда булып үткән алыштарҙа ла башҡорт генералының юғары кимәлдәге, бик тә һәләтле полководец булыуын, күп осраҡтарҙа дивизия өлгәшкән боевой уңыштарҙың тап М.М. Шаймуратовтың хәрби операцияларҙы оҫта ойоштороуы менән бәйле икәнен раҫлай.

Рейдҡа сығыр алдынан да комдив бик ентекле әҙерлек эштәрен ойоштора: боеприпастар, аҙыҡ-түлек, фураж, яғыулыҡ етерлек кимәлдә туплана, барса аттар ҙа өр-яңынан дағалана. Дағалар етерлек булмағас, дивизия тимерселәренә ярҙамға тирә-яҡтағы ауылдарҙан даға сүкей белеүселәр йәлеп ителә. Рейдҡа инмәҫ борон комдив үҙе поход шарттарында кәрәк була торған ҡорамалдарҙың, ат ҡарау өсөн тәғәйенләнгән әйберҙәрҙең дә етерлек алынғанлығын тикшерә.

Алыш барышы һәр саҡта ла алдан күҙаллағанса килеп сыҡмай. Иң киҫкен, хәл иткес мәлдәрҙә комдив яугирҙары араһында була, һалҡын ҡанлылығы, ҡаҡшамаҫ ихтыяр көсө менән һалдаттарын дәртләндерә, еңеүгә ышаныс уята. Шулай бер саҡ дошман һөжүмен кире ҡаҡҡанда генералдың команда пункты бик көслө ут аҫтында ҡала. Штаб начальнигы команда пунктын артҡараҡ күсерергә тәҡдим итә. М.М. Шаймуратов уға: "Әгәр дивизия командиры барыһының күҙ алдында артҡа сигенә икән, бөтөн частар ҙа уның артынса сигенә башлаясаҡ", - тип яуаплай. Генералдың һалдаттары ла ҡаушап ҡалмай: ошо алышта дошмандың 2 танкыһы яндырыла, ике батальонға яҡын һалдат һәм офицеры юҡ ителә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ ***Бала уйнаған уйынсығын боҙа икән, ҡыуанырға кәрәк - ул ҡыҙыҡһына башланы; әгәр уйынсыҡты боҙоп, кире йыйһа, икеләтә ҡыуанырға кәрәк - баланың фекерләү һәләте тамыр ебәрә.***

# БАЛАҢ ҺӘЛӘТЕН ҮҪТЕРӘ БЕЛ!

**Уҡыусылар, өлкән синыфтарҙа уҡый башлау менән, үҙҙәренең буласаҡ һөнәре тураһында етди уйлана башлай. Әлбиттә, уларға ярҙам итеү маҡсатында мәктәптәрҙә һәм башҡа төрлө тәрбиә биреү учреждениеларында бик күп эштәр башҡарыла. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡайһы бер уҡыусылар, барыбер, мәктәпте тамамлағансы үҙҙәренә һөнәр һайлай алмай. Уның бер сәбәбе - һәләттәренең асылмауында. Ғәҙәттә, һәләттәренә ярашлы һөнәр һайлайҙар бит.**

Белеүебеҙсә, һәр бала был донъяға ниндәйҙер һәләттәр менән тыуа. Әгәр баланың тәбиғи үҫешенә бөтә шарттар ҙа уңғай булһа, 13-14 йәштәрҙә улар асыҡ күренергә тейеш. Ә бөгөн шул йәштәргә еткән күп кенә балалар үҙҙәренә нимә кәрәк икәнен дә белмәй, бер нимә менән дә ҡыҙыҡһынмай. Ошо урында, мәктәптәрҙә етәрлек кимәлдә эшләп еткермәйҙәр, тип әйтергә мөмкиндәр. Мин быға ҡаршы түгелмен - уныһы ла барҙыр. Ләкин балаларҙың һәләттәре, бөтә шарттар ҙа уңғай булһа, ғаиләлә үк асыла башларға тейеш. Шуға балаларҙың һәләтен үҫтереү, беренсе сиратта, ата-әсәләрҙең бурысы ул.

Ғаилә тәрбиәһендә нимәне күҙ уңынан ысҡындырауҙар һуң? Ҡайһы бер ата-әсәләр балаларға тәрбиә биргәндә, башлыса, әхләҡи тәрбиәне күҙ уңында тота. Йәғни уларға, нимә яҡшы, нимә насар икәнен аңлаталар. Ә бына тәбиғи һәләттәрен үҫтереүгә бөтөнләй иғтибар итмәйҙәр. Киләсәктә "Уңдырышлы тупраҡ" әҙер булғас, һәләттәре тамыр ебәрә башлай. Һәм артабанғы ете йыл эсендә улар "шытып сыға." Йәғни 13-14 йәштәр тирәһендә балаларҙың һәләттәрен асыҡ төҫмөрләргә була. Был осорҙа улар ниндәйҙер шөғөлдәр менән ҡыҙыҡһыналар, төрлө түңәрәктәргә йөрөй башлайҙар.

Тағы ла ете йыл дауамында, 21 йәштәргә тиклем була инде, шул һәләттәрен камиллаштырыу башлана: шуларға ярашлы предметтарҙы ҡыҙыҡһынып өйрәнәләр, профилле кластарҙа уҡыйҙар, артабан ниндәйҙер махсус уҡыу йортон тамамлап, үҙҙәренә оҡшаған профессияға эйә булалар.

Күреүебеҙсә, ете йыл һайын кешенең һәләттәре ниндәйҙер үҫеш кисерә бара. Әгәр бөтә шарттар ҙа уңғай булһа инде. Ниндәйерәк шарттарҙы уңғай тип атайым һуң? Хәҙер һүҙем шулар тураһында, йәғни мәҡәләмдең төп өлөшөнә килеп еттек. Шулай итеп, беренсеһе бит әхләҡи яҡтан тәрбиәле булыу ғына етмәй, ә ниндәйҙер һөнәргә лә эйә булырға кәрәк. Шуға балаларҙы үҙаллы тормошҡа әҙерләгәндә, әхләҡи тәрбиә менән һәләтте үҫтереү бергә барырға тейеш.

Ғаилә тәрбиәһендә һәләтте үҫтереү өсөн мәктәптәрҙәге һымаҡ ниндәйҙер үҙенсәлекле алымдар өҫтөндә эшләү кәрәкмәй. Ә тәрбиә барышында бала һәләтенең асылыуына һәм үҫешенә уңғай йоғонто яһаған ҡайһы бер шарттарҙы булдырыу талап ителә. Мин шулар тураһындағы үҙ тәжрибәм менән уртаҡлашырға уйлайым. Башта һәләттәрҙең үҫеше тураһында бер нисә һүҙ әйтеп үтәйем.



## Һәләттәрҙең үҫеш этаптары

Үрҙә әйтелгәнсә, тәбиғи һәләттәр балаға тыуғанға тиклем үк орлоҡ итеп һалына. Уларҙың "шытып" китеүенә уңғай шарттар - "уңдырышлы тупраҡ" кәрәк. Баланың ете йәшкә тиклемге үҫеше үҙендә шундай "тупраҡты" барлыҡҡа килтереү осоро ул. Был осорҙа улар бик әүҙем уйнайҙар, үҙҙәрен уратып алған тормош менән ҡыҙыҡһыналар, төрлө һорауҙар бирәләр. Бына ошо эшмәкәрлектәр бөтәһе лә балаларҙың аңын, аҡылын, психикаһын "уңдырышлы тупраҡ" кимәленә еткерә лә инде.

## 1. Балалар уйнарға тейеш

Балаларҙың һәләттәрен асыу өсөн иң һөҙөмтәле күренеш - ул уйындар. Уларҙы башҡа бер нәмә лә алмаштыра алмайҙыр. Егерменсе быуаттың беренсе яртыһында Европала бер төркөм ғалимдар уйнап үҫкән һәм уйын күрмәгән балаларҙың үҫештәрен күҙәткән. Һәм шундай күренештең шаһиты булалар: уйнап үҫкәндәр төрлө һөнәр эйәләре булып китә, ә икенселәре артыҡ оҫталыҡ талап ителмәгән ҡара эштәрҙе башҡарыусы эшселәр булып ҡала.

Күреүебеҙсә, уйын балаларҙың һәләтен асыуҙа ҙур роль уйнай. Шулай уҡ башҡа сифаттарҙы ла үҫтерә. Артыҡ күп һөйләмәй генә, шуларҙың иң мөһимдәрен һанап үтәм.

Балалар уйындарҙы үҙҙәре ойоштора икән - үҙаллы ҡарар ҡабул итеп, ниндәйҙер эште ойошторорға өйрәнәләр. Йәғни уларҙа үҙаллылыҡ тәрбиәләнә. Шулай уҡ үҙаллы ҡарар ҡабул итергә өйрәнгән балаларҙа яуаплылыҡ тойғоһо ла формалаша. Бынығы, беренсенән.

Икенсенән. Күмәк уйындар ҡайһы бер балаларҙа етәкселек сифаттарын тәрбиәләй. Сөнки ундай уйындарҙы кемдер башлап ебәрергә тейеш. Шуға балалар араһынан ойоштороусылар айырылып сыға башлай. Улар, ғәҙәттә, уйындың сюжетын уйлап сығаралар, артабан уйын барышы менән дә идара итәләр. Бына шул ваҡытта етәкселек һәләтенең орлоҡтары һалына ла инде.

Өсөнсөнән. Уйындар барышында балаларҙың ижади һәләттәре үҫә. Сөнки ҡайһы бер уйындарҙы үҙҙәре уйлап сығаралар, улар өсөн кәрәкле уйынсыҡтарҙы ла үҙҙәре эшләргә мөмкиндәр.

Дүртенсенән. Кеше менән аралашырға өйрәнәләр. Уйын барышында балалар йыш ҡына талашып та, һуғышып та китергә мөмкиндәр. Шул уҡ ваҡытта уртаҡ тел табып, ярашырға ла өлгөрәләр. Бына шулай, бәрелеп, һуғылып, илашып, көләшеп бер-береһе менән ысын мәғәнәһендә һөйләшергә, үҙҙәрен яҡларға өйрәнә улар. Кеше менән һөйләшә белеү - йәшәү өсөн иң кәрәкле сифаттарҙың береһе ул.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡайһы бер ата-әсәләр балаларын уйнауҙан тыя. "Буш менән булышҡансы, ваҡыттарың файҙалы үткәрһендәр", - тип ниндәйҙер эштәр ҡушалар. Шулай уҡ уҡытыусылар ҙа, уйнап йөрөгәнсе уҡыһындар, тип, өйгә эштәрҙе күп итеп бирәләр. Ғәҙәттә, шундай шарттарҙа тәрбиәләнгән балаларға профессияны ата-әсәләренә һайларға тура килә...

## 2. "Ярамай" тип әйтергә ярамай

Балаға, бигерәк тә ете йәшкә тиклем, "ярамай" тип әйтергә ярамай. Ул өйҙә нимәләр тейә йәки нимәнелер боҙа икән, уны яуызлыҡ уйлап эшләмәй. Ғөмүмән, ул осорҙа бала яуызлыҡ һәм изгелек төшенсәләрен белмәй. Ә ҡыҙыҡһыныусанлығы уны нимәгәләр тейергә этәрә. Мәҫәлән, уйынсыҡ машинаның һүтә икән, уның эсендә нимә бар икән, тип ҡыҙыҡһына. Ҡыҙыҡһыныу - бик мөһим психологик күренеш ул. Сөнки тормошто танып белеү йәки нимәгәлер өйрәнеү һәр ваҡыт ҡыҙыҡһыныуҙан башлана. Икенсе төрлө әйткәндә, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ - белемгә этәреүсе көс.

Әгәр балаға әйләнгән һайын "ярамай" тип әйтә башлаһаң, уның ҡыҙыҡһыныусанлығы һүнә. Артабан үҙен уратып алған мөхиткә битарафлыҡ күрһәтә башлай. Мәктәптә йөрөй башлағас, уҡытылған предметтар менән дә ҡыҙыҡһынмаясаҡ. Әлбиттә, ҡыҙыҡһынмаған баланың һәләттәре лә асылмай ҡала.

Шуға, өйҙәге ҡиммәтле һәм һаулыҡ өсөн ҡурҡыныс булған әйберҙәрҙе алыҫҡараҡ йыйырға ла балаларға тулы ирек бирергә кәрәк. Әйҙә, нимә теләй, шуны эшләһендәр: уйнаһындар, әҙләнһендәр, соҡоһондар, асып ҡараһындар, боҙһондар... Шул ваҡытта уларҙың төрлө яҡлап һәләттәре асылыр, үҫер, камиллашыр. Мәҫәлән, бала уйнаған уйынсығын боҙа икән, ҡыуанырға кәрәк - ул ҡыҙыҡһына башланы; әгәр уйынсыҡты боҙоп, кире йыйһа, икеләтә ҡыуанырға кәрәк - баланың фекерләү һәләте тамыр ебәрә; әгәр ике оҡшаш уйынсыҡты боҙоп, уларҙан бер уйынсыҡ йыйһа, баланың ата-әсәһе бәхетле - уның ниндәйҙер ижади һәләттәре асыла башланы. Әгәр инде бала уйнағандан һуң уйынсығын һәр ваҡыт шул килеш ҡалдырып китә икән, ул ваҡытта етди уйланырға кәрәк - уның башында нимәлер тәртиптә түгел...

## 3. Һорауҙарына яуап бирегеҙ

Бала 4-5 йәштәр тирәһендә әүҙем рәүештә һорауҙар бирә башлай. Мин уйлайым, был күренеш бөтә ата-әсәләргә лә таныштыр. Һәм нимә эшләргә кәрәк икәнен дә беләләрҙер. Тағы ла ҡайһы бер мәлдәргә туҡталып китәйек.

Балаларҙың һорау бирә башлауы - уларҙың интеллектуаль үҫешенең күрһәткесе ул. Шул осорҙа фекерләү һәм хәтерләү һәләттәре бик әүҙем формалаша башлай. Шуларға ярашлы, танып-белеүҙәре көсәйә һәм уларҙың күберәк белгеләре килә. Шуға ата-әсәләрен һорауҙар менән күмеп ташлайҙар.

Һорауҙарына яуап алалар икән - уларҙың интеллекты юғарыраҡ күтәрелә. Артабан шул кимәлгә ярашлы тағы һорауҙар тыуа. Бына шулай уларҙың аҡылы үҫә. Ундай шарттарҙа үҫкән балалар мәктәпкә барғас, тырышлыҡтары һәм белемдәре менән башҡаларҙан айырылып торасаҡ. Иң мөһиме: интеллект кимәле ни тиклем яҡшыраҡ үҫешә, шул тиклем һәләттәренең асылыуына шарттар яҡшыра. Үрҙә әйткәнсә, "уңдырышлы тупраҡ" барлыҡҡа килә.

Шуға ата-әсәләр балаларының һорауҙарына яуап бирергә тейеш. Мөмкин тиклем бөтәһенә лә. Әгәр яуабын белмәйҙәр икән: "Ҡайһы бер нәмәләрҙе асыҡлайым да шунан яуап бирермен," - тип әйтергә һәм ҡыйын булһа ла вәғәҙәне үтәргә кәрәк. Әйткәндәй, хәҙерге смартфондар, айфондар заманында яуапты үҙҙәре менән бергә эҙләргә лә була. Ул ваҡытта ундай кеҫә телефондары ниндәйҙер уйындар өсөн генә түгел, ә уларҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе лә табырға була икәнен аңлаясаҡтар. Артабан ниндәйҙер һорауҙарына яуапты үҙҙәре лә табырға мөмкиндәр.

Әгәр инде һорауҙарына "Башты ҡатырма, кит бынан!" йәки "Бәләкәйһең әле ундай нәмәләрҙе белергә!" тигәнерәк яуаптар бирәләр икән, балаларҙың ҡыҙыҡһыныусанлығы аҡрынлап юҡҡа сыға. Һәм, әл-

✓ ***Икенсе көнөнә үк каруансылар әйҙәүсе егеттең ни тиклем кәрәк булғанлығын аңлай башлаған. Ни өсөн тигәндә, туҡтап ял иткән урындарынан иртә таңдан ҡайһы тарафҡа китергә икәнлекте белмәй оҙаҡ ҡаңғырған улар.***

биттә, интеллектуаль үҫеше лә туҡтай. Был бигерәк тә мәктәпкә барғас нығлап һиҙеләсәк. "Балағыҙ бер нәмә менән дә ҡыҙыҡһынмай, йоҡлап тик ултыра", - тип әйтәсәк уҡытыусыһы уның ата-әсәләренә...

### 4. Балалар хаталанырға хоҡуҡлы

Бала нимәләр эшләгәндә хаталаныуҙан ҡурҡырға тейеш түгел. Уның өсөн әрләргә ярамай. Киреһенсә, хаталарын аңларға һәм төҙәтергә ирек бирергә кәрәк. Ғөмүмән, был осраҡта ата-әсәләр ситтән генә күҙәтеүсе һәм йүнәлеш биреүсе булып ҡалырға тейештәр.

Бер нәмәнән ҡурҡмаған бала ғына үҙ эшен рәхәтләнеп башҡара. Башта хаталарына артыҡ иғтибар итмәҫ. Күпмелер ваҡыттан һуң, шул хаталарҙан әҙерәк йонсоғас, уларҙың сәбәптәрен асыҡларға тырышасаҡ: анализлар, уйланыр һәм һығымта яһар. Артабан, үҙенең мөмкинлектәрен асыҡлағас, шуларға ярашлы дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итә башлар. Шул ваҡытта уның төрлө кимәлдәге һәләттәре үҫешә башлай ҙа инде. Шулай уҡ бала "сәйҙе өрөп ҡабырға" өйрәнә, "ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ" тигән һүҙҙәрҙең ысын мәғәнәһенә төшөнә башлай. Иң мөһиме: ундай тәрбиә алған балалар, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡас, әҙерәк хаталанасаҡтар.

Күреүебеҙсә, хаталаныу, бер яҡтан, баланың һәләттәрен асырға һәм үҫтерергә булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, уның аҡылы ла үҫә башлай. Бына шуға ата-әсәләр:

- Балам, хаталаныуҙан ҡурҡма, хаталаныу яҡшы нәмә ул - тормош тәжрибәң һәм аҡылың артасаҡ. Тик шуны ҡолағыңа киртеп ҡуй: бер хатаны ике тапҡыр ҡабатлау - аҡылһыҙлыҡ, - тип өйрәтергә тейештәр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғаиләлә лә, мәктәптә лә хаталаныу йыш ҡына ҡаты язаға тарттырыла. Ундай тәрбиәнең ыңғай яҡтарына ҡарағанда кире яҡтары күберәк. Мәҫәлән, яза алыуҙан ҡурҡҡан бала алдарға өйрәнә башлай. Икенсенән, эҙләнеүҙән туҡтай - был һәләттәренең асылыуын тотҡарлаясаҡ. Өсөнсөнән, аҡылы үҫмәй ҡала. Әлбиттә, ундай балалар киләсәктә аҙым һайын ебәргән хаталары менән ата-әсәләренең сәстәрен ағартасаҡтар. Нимә сәсәһең, шуны ураһың була инде...

### 5. Һайларға ирек бирелһен

Үҫмер осорона еткәс, 11 йәштән 14 йәштәргә тиклемге ара була инде, балалар әүҙем рәүештә төрлө түңәрәктәргә, өҫтәлмә белем биреү учреждениеларына йөрөй башлай. Был тәбиғи, сөнки шул осорҙа уларҙың һәләттәре "морон төртә". Бына шул һәләттәренә ярашлы ниндәйҙер түңәрәктә шөғөлләнә башлай улар.

Тик ата-әсәләр ҡәтғи рәүештә ниндәйҙер бер түңәрәккә йөрөүҙе талап итергә тейеш түгелдәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундай күренештәр менән йыш ҡына осрашырға тура килә. Мәҫәлән, минә таныш бер ғаилә үҙҙәренең ҡыҙҙарын музыка мәктәбенә "Фортепиано" класына йөрөттө. Уның теләгенә ҡарап торманылар. Ҡыҙҙары көс-хәл менән музыка мәктәбен тамамланы һәм хәҙер фортепианоға әйләнеп тә ҡарамай. Өс йыл ваҡытын бушҡа үткәрҙе. Ә ул һүрәт төшөрөргә ярата ине...

...Балаларға һайланырға ирек бирергә кәрәк. Әйҙә, эҙләнһендәр, үҙҙәрен төрлө өлкәлә һынап ҡараһындар. Ҡайһы берәүҙәре шунда уҡ үҙҙәренә оҡшаған шөғөлдө табырҙар. Икенселәре үҙҙәренә нимә кәрәк икәнен башта аңлап етмәйҙәр. Шуға бер түңәрәкте һайлайҙар ҙа, күпмелер ваҡыттан һуң икенсе түңәрәккә яҙылалар. Артабан өсөнсөһөнә күсәләр. Ул шулай булырға тейеш. Бынан ҡурҡырға ярамай. Сөнки әле күренеп етмәгән һәләттәре уларҙы шулай эҙләнергә мәжбүр итә. Һәм, әлбиттә, улар табасаҡтар. Тик эҙләнергә ирек кенә бирһендәр...

Тағы бер мөһим күренешкә туҡталып китәйек. Мин 15 йылдан ашыу "Гитара" түңәрәген алып барам. Һәм шуға иғтибар иттем: минең түңәрәккә, башлыса, физика, математика, химия, грамматика, йәғни логик фекерләү талап ителгән предметтарҙан яҡшы өлгәшкән балалар йөрөй. Ә бит шул предметтар өлкәненә ҡараған түңәрәктәр ҙа беҙҙә бар. Ләкин унда уларҙың йөрөгөләре килмәй. Ни өсөн икәнен дә аңлата алмайҙар...

Бының сәбәбе - кеше мейеһенең төҙөлөшөндә. Белеүебеҙсә, ул һул һәм уң яҡ ярымшарҙан тора. Һул яғы логик фекерләүгә һәм шуға бәйле күренештәргә яуап бирә. Ә уң яғы - ижадҡа, хис-тойғоға, интуицияға, хыялға, фантазияға, ритмды тойоуға һ.б. Кеше сәләмәт булып формалашһын өсөн мейенең ике яғы ла бер тигеҙ үҫергә тейеш. Беҙҙең мәктәптәрҙә, башлыса, логик предметтар өҫтөнлөк итә. Бына шуға балалар төштән һуң уң яҡ мейене үҫтереүсе түңәрәктәргә - бейеүгә, йырға, һүрәт төшөрөүгә (һ.б.) йөрөргә тырыша. Психология күҙлегенән сығып әйткәндә, уң яҡ ярымшарҙың ихтыяжын үтәйҙәр. Был бик яҡшы. Уның өсөн ҡыуанырға кәрәк. Әгәр бала иртәнән кискә тиклем логик фәндәр менән генә шөғөлләнһә, һул яҡ мейе нық үҫешәсәк, ә уң яғы шул килеш ҡалыр. Был күренеш киләсәктә ниндәйҙер проблемалар тыуҙырыуы мөмкин.

Ғөмүмән, ата-әсәләр балаларының сәләмәт булып үҫеүен теләһә, уларға логика өлкәһенә лә, сәнғәт өлкәһенә лә ҡараған шөғөлдәр менән булышыу өсөн бер тигеҙ шарттар тыуҙырырға тейештәр. Киләсәктә бер шөғөлө уның профессияһына әүерелер, икенсеһе "хобби" булып китер...

### Йомғаҡлау

Бына мин үҙемдең тәжрибәм менән уртаҡлаштым. Йәғни ғаиләлә бала һәләттәренең асылыуына һәм үҫеүенә булышлыҡ итеүсе шарттар менән таныштырып үттем. Әлбиттә, башҡа төрлө ҡараштар ҙа барҙыр. Улар ҙа үҙ фекерҙәрен яҙып үтерҙәр, тип ышанам.

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БУЛАСАҠҠА САРА ЮҠМЫ?

**"Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты һыйпап ташлап булмай ҡул менән" тип әйтелә халыҡ йырында. Халҡыбыҙ йырҙарындағы был мотив, асылда, фажиғәле, әсе, әммә алда күреләсәк ҡотолғоһоҙ яҙмыш хаҡында. Ҡыҙыҡ килеп сыға: бәхетле, киңәнесле мәлдәр һәм тойғолар кисереүгә бәйле күреләсәк ваҡиғалар хаҡында ла шулай тип әйтергә буламы икән? Икенсе төрлө әйткәндә, яҙмыштың ҡатмарлыны, әсеһе генә ҡотолғоһоҙмо? Шулай ҙа, ваҡытты ҡамтарып, тарихтарҙы киренән ҡайтарып, яҙмыштарҙы киренән ҡороп, сәғәтте кирегә бороп, ваҡиғаларҙы үҙгәрткән осраҡта ниндәй булыр ине икән хәҙерге көнөбөҙ? Үткән тарихҡа теләк-шарт һөйкәлеше аша бер ниндәй йөғонто яһап булмаһа ла, яҙыласаҡтарына мөмкиндер бит, тием. Әйтәйек, үткәнеңдән фәһем, һабаҡ, ғибрәт алып, шундай уҡ күрәсәктән ҡотолоу мөмкин бит. Улайһа, буласаҡҡа, күрәсәккә сара булып сыға түгелме? Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**



Иге-сиге күренмәгән сүллек буйлап тәлкән-төлкән каруан барған, ти. Ундағы йөҙәрләгән дөйәләргә донъяның иң бай сауҙагәрҙәренең иң затлы әйберҙәре, алтын-көмөшө, нағышланған биҙәүестәре, кейем-һалымы һәм башҡа һатыу итеү әйбере артмаҡланған. Каруан һәр таң һайын ҡалҡҡан ҡояшҡа табан тарафҡа, оҙон көн һуҙымында дала үлсәме менән ҡарыштай ер үтеп, көндән-көн көнсығышҡа ығышҡан, көн төнгә ялғанған, ҡояш офоҡҡа ауышҡан.

Иң алдағы дөйәне етәкләп, тамаҡ хаҡына каруан оҙатыусыһы булып ялланған фәҡир генә егет атлаған. Уның торор өйө лә, ғаиләһе лә, кейер йүнле кейеме лә булмаған, ғүмере каруан оҙатып, юлда үткән. Ә байҙар менән уларҙың хеҙмәтселәре иһә, дөйәләрҙең һыртына беркетелгән сатырҙар ышығында йоҡо һимертеп юл үткән. Шулай фәҡир генә булһа ла, егет даланы, уның һәр бер ҡоҙоғон, туҡталҡа урыны-оазисын биш бармағындай яҡшы белеүе менән каруансы сауҙагәрҙәр араһында дан ҡаҙанған. Уға ышанғандар, иртәме-һуңмы, барыр ерҙәренә алып барып еткереренә тамсы ла шикләнмәгәндәр.

Бына турһыҡтағы һуңғы тамсы һыуҙар эселеп бөтөүгә каруанды әйҙәүсе егет сираттағы ҡоҙоҡ янына алдағы дөйәнең моронон төрттәргән. Киңәнеп-киңәнеп, һыуһындары ҡанғансы, ҡорһаҡтары тулып ауғансы, мулҡынып һыу эскән юлсылар. Инеш янында төн ҡунып, таңдан тамаҡланып, дөйәләрен тағы бер тапҡыр һуғарып, турһыҡтары тулғансы һыу алып, инде ҡуҙғалып киттек тигәндә генә уларҙы урындағы бер һуғышсан ҡәбилә яугирҙары килеп баҫҡан. Уларҙан ҡото алынған сауҙагәрҙәр "Алыш бармы, атыш бармы?" тиеп әйтергә лә ҡурҡып, тегеләрҙән үҙҙәрен имен-аман ебәреүҙең хаҡын белешкән, азатлыҡҡа хаҡ бесә башлаған.

- Алтын-көмөшөгөҙ, барлыҡ тауарҙарығыҙ үҙегеҙгә ҡалһын. Беҙ, һеҙ уйлағанса, юлбаҫарҙар түгел. Һеҙгә шартыбыҙ шул: беҙгә бер кешегеҙҙе генә бирһәгеҙ, шул еткән. Хоҙайыбыҙ аҙам балаһын ҡорбанға килтереүебеҙҙе һорай, - тигән ҡәбилә башлығы.

Сауҙагәрҙәр оло аптырашҡа ҡалып, бер-береһенә ҡарашып ҡатҡан, ҡорбанға бирер кеше таба алмайынса, оҙаҡ баш ватҡан. Кемеһелер шыбаға тотошоуҙы тәҡдим иткән дә, үҙенең өҫкә сығыуынан ҡурҡып, шундуҡ һүҙен кире алған. Шул саҡ сауҙагәрҙәр араһында абруйлы һаналған береһе:

- Буласаҡҡа сара юҡ. Күрер аҙабыбыҙ ошо булғандыр инде. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың бер нисә ҡатыны, тағы ла әллә күпмешәр балаларыбыҙ бар. Уларҙың күҙ йәшен ҡойҙороп, етем итмәҫ өсөн, Алла хаҡына беҙ, бик ҡыйын булһа ла, анау каруаныбыҙға юл күрһәтеүсе егетте быларға бирергә тура килер. Уның илар ҡатыны ла, етем ҡалыр балаһы ла юҡ, - тигән.

Сауҙагәрҙең был тәҡдиме башҡаларҙың дөйөм хуплауы менән ҡаршы алынған. Ҡайһыһылыр уның аҡыллы кәңәшен ишеткәндән һуң күҙенә йәш алып:

- Эйе шул, ағай, һүҙеңә ҡеүәт. Буласаҡҡа, ысынлап та, сара булмаған өсөн дә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе был сәфәребеҙгә ошо егетте биреп сығарған бит инде. Бына беҙ сүллек буйлап ай самаһы килдек, егет беҙҙе үҙ юлыбыҙҙан бер иле лә яҙлыҡтырмай алып килде. Бына хәҙер инде беҙҙең алға һынауҙың иң ауыры килеп етте һәм Хаҡ Тәғәләнең ризалығы өсөн беҙ уға үҙенең бәндәһен кире ҡайтарырға бурыслы, - тип оло сауҙагәрҙең һүҙен йөпләп үк ҡуйған.

Шулай итеп, ҡәбилә яугирҙары каруанды әйҙәүсе егеттең аяҡ-ҡулын сырмап алып ҡалған. Каруан иһә, сүллек буйлап меңәр-меңәр саҡрымдарға һуҙылған юлын артабан дауам иткән. Тағы ла офоҡҡа ҡояш ауышҡан, тағы ла көн төнгә ялғанған. Икенсе көнөнә үк каруансылар әйҙәүсе егеттең ни тиклем кәрәк булғанлығын аңлай башлаған. Ни өсөн тигәндә, туҡтап ял иткән урындарынан иртә таңдан ҡайһы тарафҡа китергә икәнлекте белмәй оҙаҡ ҡаңғырған улар. Бер-береһен енешә алмай, һуғышыр сиккә еткән каруансылар. Улар юл башлаусы егеткә һалышып, хатта каруандың иртә таңдан ҡояш ҡалҡҡан тарафҡа ҡуҙғалырға тейешлегенә лә иғтибар итмәгән булған. Шуға күрә яңылыш йүнәлеш икенсе көндә үк алынған һәм бишенсе көн тигәндә каруан ҙур бер әйләнеш яһап, икенсе таңда ҡуҙғалған урынға тағы килеп сыҡҡан. Ошо мәлдә инде уларҙың әсәр һыуҙары ла бөткән. Каруансылар баштарын ташҡа һуғырҙай булған да бит, ҡом араһында һыу ғына түгел, ташы ла табылмаған. Хәҙер инде сауҙагәрҙәр аҡтыҡ хәлдәрен йыйып, каруанды әйҙәүсе егетте ҡорбан итергә ҡалдырып киткән ҡоҙоҡто нисек булһа ла табыу маҡсаты менән кире тарафҡа ҡуҙғалған. Әммә күңелдәренә инеп ултырған ҡурҡыу тойғоһо уларҙы тағы ла аҙашыу түңәрәгенә индереп, сарсауҙан талсыҡҡан дөйәләр һәм уларҙың хужалары берәмләп-берәмләп каруандан айырылып ҡала барып, тағы ла өс көн үтеүгә, каруан тотошлай таралып юҡҡа сыҡҡан. Уның ҡарауы, дөйәләрҙе һәм каруансыларҙы сүл бүреләре, ҡарһаҡтар ашап киңәнгән...

Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, буласаҡҡа сара юҡ, тип әйтеүсе сауҙагәр һис тә яңылышмаған. Ул үҙҙәренә ситтәрҙең һөкөм итерен дә, каруанды әйҙәүсе егетте ҡорбанға тип бирерҙәрен дә, аҙаҡ ошо сәбәпле каруандың һәләкәткә осрарын да иҫтә тотоп, ошо һүҙҙәрҙе әйткән булып сыға. "Әгәр ҙә атайымдың үлерен кисә белгән булһам, бер телем икмәккә алмаштырған булыр инем", тип аслыҡтан илаған малай хәленә ҡалған сауҙагәрҙәр. Улар, бәлки, ҡатындарын тол, балаларын етем ҡалдырмайбыҙ, тип ошо юлды һайлап дөрөҫ тә эшләгәндер. Әммә улар барыбер ҙә намыҫ принцибына ҡаршы барыуы һөҙөмтәһендә һәләкәткә тарыған.

...Халҡыбыҙҙың шанлы ла, ҡанлы ла үткәне хаҡында уйланып ултырам да, һәр заманда табылған тәфтиләүҙәр тарафынан хакимдар алдында "Был милләт ер йөҙөнән юҡ ителде" тигән рапорттар бирелһә лә, яңы мең йыллыҡҡа, яңы быуатҡа тиклем йәшәйбеҙ икән, бында мин атай-олатайҙарыбыҙҙың намыҫ принцибына тоғролоғона бәйле сәбәпте күрәм. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе тап шуның өсөн дә йәшәтәлер, тим. Буласаҡҡа сара булмаһа ла, намыҫҡа, иманға, әхлаҡҡа тоғролоҡ һаҡлағанда, киләсәкте күрербеҙгә сара бар, тимәк.

***Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.***

**✓ Шул саҡта ғына Ғәйнулла ағайҙы иҫләнем. Былтыр Искәндәрҙе етәкләп, өйөнә барҙым, рәхмәт әйттем, хәйер бирҙем. Ул Искәндәрҙе өшкөрҙө, башын һыйпап, йәнә: "Ҙур кеше буласаҡ был бала, Алла бирһә", - тине. Рәхмәт инде уға.**



Наил ҒӘЙЕТБАЙ

# ЙӘН

(Романдан өҙөк)

Хәкимә тағы тынды. Айҙар шунда уҡ кисә Санияның "мин һине яратам" тигән һүҙен иҫенә төшөрҙө. Уның тәне буйлап өшөткөс ҡалтырау йүгереп үтте. Ни генә тиһәң дә, Айҙар насар әҙәм!.. Тағы бер бәлә булып, оятһыҙ рәүештә Хәкимәнең йөрәгенә инергә йөрөй! Йә, Хоҙай! Ары ни булыр? Әгәр Айҙар ҙа Хәкимәгә ҡарата рәхимһеҙ ҡыланһа, ул быға түҙмәйәсәк бит!

- Етмәһә - мин... - тип уфтанды егет үҙе лә һиҙмәҫтән ауыр һулап.

- Нимә - һин? - Ҡатын Айҙарға боролоп, һораулы ҡараш ташланы.

- Мин дә һинең янда алдашып йөрөйөм кеүек... Улай ярамай, аңлайым, - Айҙар көрһөндө. - Тик үҙем дә белмәйем: алдашыумы былар бөтәһе лә, әллә ысынмы?..

- Мин һине аңлайым, - тине лә ҡатын, ҡапыл Айҙарға һыйынды. Егет уны ҡосаҡлап алды. Йәш кенә көйө ауыр ҡайғылар кисерергә өлгөргән ҡатын уға бик йәл! Мөмкин булһа, уны бөтә бәләләрҙән һаҡлар, ҡотҡарыр ине. Шул тойғоға бирелеп, Айҙар Хәкимәне яурынынан тотоп борҙо ла үҙенә ҡыҫты. Ошо минутта егет ҡатынға ҡарата аңлата алмаҫтай йылы тойғо кисерҙе. Хәкимәне ҡосаҡлап, ошолай оҙаҡ-оҙаҡ ултыра алырына төшөндө. Ҡапыл Сания иҫенә төштө, уның менән был тиклем татлы хистәр егетте ялмап алғанын хәтерләмәй. Был - нимә? Күңелендәге бығаса йәшеренгән аңлайышһыҙ хистәр аныҡлыҡ алырға йыйынамы? Ләкин уның ҡайһы тарафҡа боролоуон тоя башлаһа ла, был турала хатта үҙенә лә асылырға ҡурҡты.

Ҡапыл Айҙар Хәкимәнең яурындары әкрен генә һелкенеп-һелкенеп алыуын һиҙҙе. Ҡатын илай ине...

Егет уны нығыраҡ ҡосаҡланы. Шулай итеп, йөрәген өтөп алып барған ауыртҡыс уйҙарҙан, әрнеүҙәрҙән Хәкимәне ҡотҡарырға теләне. Ошондай иркәләүҙәргә нығ һыуһаған ҡатын, әсе яҙмышын уйлап, һулҡылдап иларға тотондо.

- Хәкимә, илама... - Айҙар, ҡатынды тынысландырырға теләп, арҡаһынан һыйпаны. - Бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ... Мин һине... Бар бәләләрҙән ҡотҡарырға тырышырмын... Мин бит һине яратам... Мин дә яратам һине, Хәкимә! Ишетәһеңме?

Ҡатын, башын егеттең яурынынан алып, йәшле күҙҙәрен күтәрҙе лә:

- Айҙар... - тине әкрен генә. Үҙе егеттең һүҙҙәренең ихласлығын белергә теләгәндәй, уға текәлеп ҡараны. Шунан күҙҙәрен йомоп, ҡапыл егетте үҙенә нығ итеп ҡыҫты, ирендәрен эҙләп тапты...

Улар шулай байтаҡ ултырҙылар. Бер мәл, баштарын күтәреп, бер-береһенә, шунан тирә-яғына ҡаранылар. Был минутта ҡапыл айнып, томан эсенән сыҡҡан кеүек тойола ине икеһенә лә.

- Рәхмәт, - тине Хәкимә, егеттең ҡулын ҡыҫып, бер килке өндәшмәй ултырғандан һуң.

- Ни өсөн? - Егет ҡатынға ғәжәпләнеп ҡараны. Ул, ысынлап та, Хәкимәне аңламаны. Рәхмәт әйтерлек ни эшләне әле ул? Бәләләрҙән ҡотҡарырмын, тиеүе өсөнмө?

- Яратам, тип әйткәнең өсөн. - Ҡатын йәмле күҙҙәре менән егеткә ҡарап йылмайҙы. - Беләһеңме, ошоғаса миңә бер егет тә "яратам", тип әйтмәне. Ысын. Хатта Фәрхәт тә. Мин "Яратаһыңмы?" тип һорайым, ә ул әллә ниндәй икенсе һүҙҙәр һөйләй, әммә... "яратам", тимәй. Хәҙер уйлайым, ул бит алдашмаған, күрәһең, ҡатынын ятҡан.

Хәкимә күңелһеҙ генә көлөп алды.

- Кисә һин дә әйтмәгәс, бик ҡайғырҙым. Сибәр тиҙәр, ә "яратам" тимәйҙәр. Яҙмышым шулдыр тип, төнө буйы илап сыҡтым. Бөгөн әйттең. Рәхмәт... Тик... Тик...

Хәкимә тынып ҡалды.

Айҙар һағайып ҡатынға ҡараны:

- Нимә?

- Һорайыммы икән? - тип икеләнде Хәкимә алдына текәлеп ултырған көйө. Шунан ниндәйҙер ҡарарға килеп, ҡарашын егеткә күтәрҙе. - Ярай. Һорайым... Ә һинең Санияға "яратам" тип әйткәнең булдымы?

Айҙар Хәкимәнең күҙҙәренә туп-тура ҡараны.

- Хәтерләмәйем, - тине ул. Ысынлап та, егет быны иҫләмәй. Уға кейәүгә сығырға тәҡдим итеүе, туй хаҡында һөйләшеүе булды. Ә "яратам" тип әйттеме, юҡмы - бөтөнләй башынан сыҡҡан.

- Ә хәҙер нисек һуң?

- Белмәйем... - Айҙар, бер нөктәгә уҡталып, уйланып ултырҙы. - Белмәйем... Миңә Сания йәл... Беҙ бит туй үткәрергә һөйләшеп бөттөк! Ул шундай ихлас әҙерләнә!..

Айҙар, күңелен сорнаған әсе тойғоларға сыҙамай, урынынан тороп китте. Шунан өндәшмәй генә уны күҙәтеп ултырған Хәкимә ҡаршыһына килеп баҫты.

- Ниңә икегеҙ бер юлы килеп сыҡтығыҙ миңә? - Егет бар күңеле менән әсенеп әйтте был һүҙҙәрҙе. Әммә улар Айҙарҙың һорауы түгел, ә рәхимһеҙ ысынбарлыҡтан ҡотолорға теләп үрһәләнеүе ине.

- Бер юлы осраһаҡ ни, һин бит Санияны һайлағанһың. - Ҡатын үпкәләгәнерәк тауыш менән әйтеп ҡуйҙы. - Ә ниңә уны?

Иң ауыр һорау яңғыраны Айҙар өсөн. Ошо ерҙә егеттең телефоны телгә килде. Самат икән. Айҙар уны тыңлап торманы, һүндерҙе лә ҡатынға ҡарап алды. Был ауыр һорауға яуапты егет үҙе лә белмәй. Әммә өндәшмәй ҡалырға ла ярамай. Ошоно асыҡламайынса, артабан уларға һөйләшер һүҙ ҙә юҡ. Егеттең ҡаушауын күреп, Хәкимә ярҙамға килде. Ул Айҙарға ҡарап көлөмһөрәне лә:

- Минең ирһеҙ бала табыуым арҡаһындамы? - тип һораны егеттең күҙҙәренә тура ҡарап.

- Юҡ, - тине Айҙар Хәкимәнең үтәнән-үтә күрергә тырышҡан ҡарашына түҙеп. - Тәүҙә, әлбиттә, ҡыйын булды. Ләкин аҙаҡ ул хаҡта бөтөнләй уйламаным. Ә кисә Искәндәр менән танышҡас, үҙ улым кеүек яраттым уны... Бигерәк һөйкөмлө малай! Уға тиклем дә һине бик яҡын күреүемде һиҙенә инем, тик уны үҙемдән дә йәшерә инем. Ә Искәндәрҙе күргәс... уны ла, һине лә... яратыуымды аңланым.

- Айҙар! - Ҡатын Айҙарға һыйынды, шунан ҡосаҡлап алды һәм, башын егеттең күкрәгенә һалып, тынып ҡалды. Тәненең әкрен генә ҡалтырауынан уның, был юлы, бәлки, шатлығынандыр, йәнә илағаны һиҙелде.

Айҙар Хәкимәне тынысландырырға теләп, сәсенән һыйпаны, йәштәрен һөртөргә тырышты.

- Илама, Хәкимә, - тине егет. - Илама. Бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ.

Хәкимә рәхмәтле ҡарашын егеткә күтәрҙе.

- Искәндәр хаҡында һүҙҙәрең менән һин үлтерҙең мине! Ул бахыр бала... Ниндәй ғәйебе барҙыр инде...

Хәкимә йәштәрен туҡтата алманы. Айҙар, уның хәлен аңлап, бер һүҙ өндәшмәне, фәҡәт үҙенә ҡыҫып, сәсенән, сикәләренән һыйпаны. Ҡатын тыныслана төштө лә телгә килде.

- Бая әйтә биреп ҡуйғайным бит, Ғәйнулла ағай мине бер гонаһтан ҡотҡарҙы тип... Бынан биш йыл элек миңә ҡот осҡос ауыр ине. Атай-әсәйем мәрхүм булды, Фәрхәт ташлап китте. Ауырлымын. Өләсәйем постелдә ята. Ни эшләргә? Ҡайһылай йәшәргә?.. Хәҙер бала ла тыуһа, нисек ҡарармын уны? Бер мәл күрше-күлән ҡатындарҙың кәңәшен тыңлап, аборт яһатырға булдым. Баймаҡ больницаһына барырға хәл иттем. Иртәгә шунда юлланам тигән көндө, осраҡлы рәүештә Ғәйнулла ағай тап булды. Минең менән магазинға килгәндә лә йүнләп һөйләшмәгән кеше ни сәбәптәндер туҡтатты. Шул саҡта уның әйткән һүҙҙәре бөгөнгөләй хәтеремдә. Һаулыҡ һорашҡас, ул: "Хәкимә һеңлем, - тине. - Һинең башыңа бик гонаһлы уй килгән. Баш тарт ул ниәтеңдән. Алғы тормошонда улың бик күп ҡыуаныстар килтерәсәк һиңә, ярҙам итәсәк, үҙе ҙур кеше буласаҡ", - тине. "Улың", тине. Әле эсем саҡ беленеп тора, ә Ғәйнулла ағай нисектер ауырлы икәнлегемде лә, абортҡа йыйынғанымды ла һиҙгән, иң ғәжәбе - "ҡыҙың", тимәне, "улың", тине. Мин шаҡ ҡаттым. Ғәйнулла ағай аборт яһатырға уйлауымды ҡайҙан белгән? Тәнем буйлап көслө ҡалтырау йүгереп үтте. Мин шунда уҡ бөтә күңелем менән ышандым уның һүҙҙәренә. Барманым абортҡа. Күптәр өгөтләп, әрләп ҡараны, ауырлыҡ менән ҡурҡытты, әммә ҡолағым төбөндә һәр саҡ Ғәйнулла ағайҙың һүҙҙәре торҙо. Әлбиттә, ҡыйын булды. Түҙҙем. Бына хәҙер Ғәйнулла ағайға рәхмәт әйтеп бөтә алмайым.

Ҡатындың был хикәйәте тетрәндерҙе Айҙарҙы. Искәндәрҙең, шундай һөйкөмлө малайҙың, тыумайынса үлтерелеүен күҙ алдына килтерә алманы ул. Айҙарҙың йөрәге ауыртып ҡыҫылды. Хәкимәнең биш йыл элек кисергән ауырлыҡтарын йөрәге менән тойҙо ул. Ҡатынға, уның улына, был ике сибек йән эйәһенә ҡарата йәлләү, яратыу хисе күңелен ялмап алды, бөтә ауырлыҡтарҙан һаҡлау теләге бар булмышын сорнаны. Ғәйнулла ағай ҙа көтөлмәгәнсә асылды Айҙарға. Бына ниндәй кеше икән ул! Олоғайып барған был ирҙе егет ауыл бабайы тип кенә ҡабул иткәйне. Ниндәйҙер хикмәт бар, тимәк, унда. Самат шундайыраҡ ниҙер һөйләй ине шул Ғәйнулла ағай тураһында.

- Ә рәхмәт әйттеңме һуң? - тип һораны Айҙар.

- Тәү осор уның ҡайғыһы булдымы ни? Искәндәр тыуҙы, уны ҡарау, өләсәйҙе дауалау, болнистарға йөрөтөү, донъя көтөү баҫып алды. Мин ике-өс йыл баш күтәрмәй шулар менән булыштым. Өләсәйемде саҡ аяҡҡа баҫтырҙым. Бына әле генә, һуңғы йылдарҙа ғына, Аллаға шөкөр, күҙем асылып ҡалды. Шул саҡта ғына Ғәйнулла ағайҙы иҫләнем. Былтыр Искәндәрҙе етәкләп, өйөнә барҙым, рәхмәт әйттем, хәйер бирҙем. Ул Искәндәрҙе өшкөрҙө, башын һыйпап, йәнә: "Ҙур кеше буласаҡ был бала, Алла бирһә, - тине. - Унан күрәсәк ҡыуаныстарың алда әле", - тине. Рәхмәт инде уға.

Икеһе лә, әле генә һөйләшкәндәрен уйлап, өндәшмәй ултырҙылар.

Бер аҙҙан:

- Ә Искәндәр хаҡында Фәрхәт беләме? - тип һораны Айҙар.

- Юҡ. - Ҡатын уфтанып ҡуйҙы. - Бынан ҡайтҡас та, оҙаҡҡа һуҙмай, ҡатыны Фәрхәтте Мәскәүгә күсереп алып киткән. Күрәһең, минән нығ ҡурҡҡандыр. Шунан һуң уның үҙе лә, хәбәре лә юҡ.

- Нисек йәшәргә мөмкин шундай матур баланы белмәйенсә? - тип аптыраны Айҙар. - Хатта миңә, Искәндәрҙе киләсәктә күрмәһәм, ҡыйын булыр кеүек.

- Ысынмы? - Хәкимә күңелһеҙ хәтирәләрҙән ҡотолоп йылмайҙы.

- Ысын, - тине Айҙар ихлас күңелдән. - Сәғәт нисә? Әйҙә, уны барып алайыҡ!

- Иртәрәк әле, - тип икеләнде лә Хәкимә, ҡыуанысл ы йылмайып, урынынан торҙо. - Әйҙә! Йоҡларға ятмаҫ борон!

Хәкимә менән Айҙар, әле генә уларҙы сорнап ебәрмәй тотҡан күңелһеҙ тойғоларҙан арынып, балалар баҡсаһына табан ашыҡты...

*(Әҫәр тулыһынса быйыл "Ағиҙел" журналының 5-се һанынан баҫыла башлай).*

**(Аҙағы. Башы 14-15-се һандарҙа).**

ӘЙТЕШ

**Баймаҡ районының Рәйес Түләк исемендәге "Йәнгүҙәй" әҙәби-ижад берекмәһе ағзалары "Бәйләнештә" селтәрендәге төркөмөндә әленән-әле сәмләнеп шиғри бәйгеләр, төрлө конкурстар ойоштороп тора. Әле яңыраҡ улар афоризмдар, тапҡыр фекерле ҡыҫҡа шиғырҙар ижад итте. Әлбиттә, афоризмдарҙың төрлөһө бар, әммә улар нисек кенә булмаһын, күңелгә ҡағылмай үтмәй.**

# УЙЛАМАЙ ҒЫНА ӘЙТЕП ТӘ,

## уйлағанын әйтеү бар...

● Аҡсаң булһа, дуҫ табылыр.
● Асыҡ ауыҙға ел керә.
● Күҙең булып та күрмәҫкә мөмкин.
● Ауыҙҙың ҙурлығы һүҙ һөйләргә ирекле тигәндә аңлатмай.
● Мыйыҡ үҫтерәүе еңел,
Алып йөрөү ауырыраҡ.
● Аҡ һаҡал аҡылға ҡарамай.
● Ир кеше хөкүмәт кеүек ул - хаталарын танырға тейеш түгел.

**Мансур Рәхимғолов.**

● Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙәр һум аҡсаһы булған йөҙ дуҫың булһын.
● Кредитҡа ҡарағанда декрет яҡшыраҡ.
● Ипотека ауыҙҙы яптыра.
● Ғүмер-кредит. Түләп бөтөп китәбеҙ.
● Кеше йә шиғыр, йә аҡылдан яҙа.
● Элек йәш һәм матур инек, хәҙер матур ғына.
● Атайым һаҡал ебәрмәйенсә, мин мыйыҡ үҫтермәйем.
● Аҡыллы ҡатындар аҡыллы ирҙәрҙең тик етешһеҙлеген күрә.

**Әхмәр-Ғүмәр Үтәбай.**

● Һөйләй белеү - ней етте шуны һөйләү түгел.
● Һүҙе һүҙгә оҡшамай, ауыҙы һүҙҙән бушамағандың һүҙ һайын бәҫе төшә.
● Ауыҙың һөйләгәнде ҡолағың ишетһен.
● Тел һөйәкһеҙ, тик уйламай һөйләгән һүҙ һөйәкле.
● Тиле менән бәхәскә инмәһәң, башың ауыртмаҫ.
● Һөйләгән һүҙ әрем булмаһын, күңел байлығың әрәм булмаһын.
● Илһам барҙа яҙырһың, булмағанда аҡылдан яҙырһың.
● Енмеш менән бәхәсләшмә, башың ауыртыр.

**Рәйсә Иҫәнбаева.**

● Кредит менән ипотека шәкәр тәмен оноттора.
● Ҡоро хыял менән тау аҡтарып булмай...
● Шиғыр яҙ, тик юлдан яҙма!

**Лилиә Ғәниева.**

● Ғәмһеҙлек шундай көскә эйә - хатта ярҙарына һыймай шашҡан йылғаларҙы ла ҡайраҡ таштар менән баҫтырып ҡуя.
● Күҙ тейеүҙән генә түгел, күҙ төшөүҙән дә һаҡланыу кәрәк.
● Күҙҙе майландырып ҡарау майҙа йөҙөп йөшәүҙе аңлатмай.
● Бер алманы бишкә бүлерҙән алда биш тоғро дуҫ кәрәк.
● Хыялға бай - һыйға ярлы.
● Шағир менән шиғырсыны бутарға ярамай.
● Бәйге, тиһәләр, бәйҙән ысҡынған эт иҫкә төшә.

**Яңылбикә Мөхәмәтйәнова.**

● Ялағай ялманлай,
Шулайтып дан яулай.
● Ошаҡсы һүҙ ташый,
Намыҫлы эш башлай.

**Рәсимә Ишемова.**

● Кемгәлер аҡ та ҡара, ҡара ла ҡара - иҫбатлап ҡара!
● Берәүҙәр хаттин ашҡан - туғанынан баш тартҡан.
● Үргә элһәң дә, түргә элһәң дә сабата сандали була алмай.
● Ҡыйбатлы тун шкафта тороп иҫкерә.
● Һөймәгәнгә һөйкәлгән - кәкре ағасҡа һөйәлгән.
● Эсең ҡара булғансы, тышың ҡара булһын.
● Затыңды белһәң - халҡыңдың ҡәҙерен белерһең, иленде һөйөрһөң.

● Оҙон толом аҡыл юҡлығын, оҙон һаҡал аҡыллы тигәндә аңлатмай.
● Тамсы ташты тишәме юҡмы, таш башты тишә әләгеүе бурыс.
● Ҡар-ҡар тип йөрөп әллә ҡарға үҙен моң эйәһемен тип хис итә - эре генә баҫып китә ҡарҡылдап.
● Болотло көн, эңер түгел, аяҙытһа, ҡояш сыға.
● Ҡайһы бер ир-ат өйләнеүҙән һөйләнеүҙе хуп күрә.
● Беләккә ҡарап та йөрәктең табанға төшөүе ихтимал.
● Шаҙрамын, тип үпкәләмә көҙгөгә, әҙәп булһа, ҡарамаҫтар йөҙөңә.
● Көлөү ҙә гел генә шатлыҡты аңлатмай.
● Мөхәббәткә ярыҡ ялғаш та кәртә түгел - йөҙә лә йөҙә бирә.

**Зәкиә Сөләймәнова.**

● Элек һөйләшеп тел тала ине, хәҙер яҙышып ҡул тала.
● Бәйге ул иҫкән ел генә.
● Бәйге өсөн генә бәйҙән ысҡынһаң, бәйелдән яҙырһың.
● Хәҙерге бәйге интернетҡа бәйле.
● Һәйбәт йәшәгән һайын сәнске тел күбәйә.
● Телең булмаһа, һин - ҡол.
● Туған теленә тоғро етәксе генә ысын етәксе.
● Туған телен хөрмәт итмәгән туған - ул туҙан.
● Тик туған тел генә байыта.
● Тормош - үҙе бәйгенең бәйгеһе.
● Туған тел тоғролоҡто ярата.
● Сереп байыған - туғанынан баш тартҡан.
Дан һөйгән - туғанын оноҡтан.
● Туғаныңды ла туған телеңдә һөйләтеп булмай.
● Көслө булыу ирһеҙ йәшәгәндә беленә.
● Көсһөҙ иқәнеңде белгең килһә - туғаныңды тыңла, ул һиңә әйтеп бирә.
● Ирлене "И" хәрефе лә донъяла хөрмәтле итә.
● Яңғыҙ булһаң, аңһыҙ булма.
● Үҙ илебеҙҙә олтанбыҙ.
● Үҙебеҙҙекеләр үҙебеҙҙе үҙһенмәй.
● Хәҙер кешенең аҡылы ла, теле лә, күҙе лә, бармаҡтары ла телефонда.
● Кеше байлыҡ өсөн үҙе йәшәгән ерҙе лә ҡуймай соҡой.
● Сит-яттар тәүҙә магазинын урынлаштыра, аҙаҡ килеп үҙҙәрен урынлаштыра.
● Ҡай саҡ бирешмәҫ өсөн көләргә тура килә.

**Риана Вәлиева.**

● Сереҥ һөйләп ҡалдырмаһаң ашыңдан,
Һаҡлан һәр саҡ ошо яҡын дуҫыңдан.
● Үҙенән кәм булһаң - дуҫың эй яҡшы,
Ә күтәрелһәң - булыр ул шаҡшы.
● Эт өрһә лә, яҡындарың
Бер ҡасан да ташламаҫ,
Көнләшеүе хаттин ашһа,
Дуҫ ҡабат яҡынламаҫ.
● Һайыҫҡан шыҡрыҡлай, тип,
Гел ҡунаҡ көтмә,
Дуҫың бер ҙә һатмай ул, тип
Һис өмөт итмә.
● Кәзә һис тә һарыҡ булып баҡырмаҫ,
Дошман дуҫҡа бер ҡасан да әйләнмәҫ.

**Нәфисә Мәмбәтова.**



● Кәкре ҡайынға терәү кәрәкмәй.
● Таң әтәсе кис тә ҡысҡыра.
● Ҡышын бесәй кеүек йөшәп, йәйен әтәс булһамсы.
● Етлекмәгән булһа етәксе,
Етлеккәндәр була хеҙмәтсе.
● Хайуандар беҙҙең дуҫтарыбыҙ -
Бешкән иттән боһорап торһа туҫтағыбыҙ.
● Ағас ишек тә, алтыны ла ике тотҡалы.
● Дарья ла инештән юл ала,
Дингеҙгә етеп юғала.
● Ултырһа ла тәхеттә,
Тәхетһеҙ һалалар ләхеткә.
● Кешегә соҡор ҡаҙған -
Ҡоларға үҙенә яҙған.
● Уйын йәшермәгән дошман,
Күпкә артыҡ әүермән дуҫтан.
● Юғарыға тиҙ менә буш ҡыуыҡ,
Күтәрә уны ел ҡыуып.
● Атта ла бар, тәртәлә лә,
Ат һуң бикле кәртәлә.
● Күргең килһә яҙғы көндө көҙөн,
Аҡса бир ҙә ҡара
Ҡатын-ҡыҙҙың йөҙөн.
● Ҡапыл күтәрелгән,
Тиҙ үк түңкәрелгән.
● Этеп күтәрҙеләр,
Төртөп түңкәрҙеләр.
● Түрҙә саҡта ҙурланылар,
Түбән төшкәс хурланылар.
● Алйот һәр саҡ үҙе булып ҡала,
Аҡыллы алйотлана ала.
● Һуҡыр тауыҡҡа бөтәһе лә тары,
Халыҡтың һуҡыр булыуын ил теләй бары.
● Тере сағында нәжескә буяйҙар,
Үлһә, маҡтап туймайҙар.
● Күп маҡталған - ваҡланған.
● Бүреләр йөрөгәндә олоп,
Йылан түргә менде шыуып.
● Көлмә, ҡарттар тип йүләр,
Ҡартлыҡ һиңә лә киләр.
● Өҫтөн булһа гәҙәт,
Булмаҫ әҙәп.
● Ҡорос та тутығып тишелә,
Бөгөлә бәһлеүән кеше лә.
● Ҡыйбатлы тун өҫтә туҙа,
Батыр ғүмере яуҙа уҙа.
● Намыҫын һаҡлай батыр,
Үҙен маҡтай бахыр.
● Һандуғастар күп булһа, ҡарға тауышы ла таңһыҡ була.

**Әкрәм Ҡәйепҡолов.**

● Туған тел - аманат,
Һаҡламаһаң - яманат.
● Бешкән бутка туйҙырыр,
Һүҙ бутҡаһы ялҡтырыр.
● Әсә балаһына ғүмер менән бергә туған тел дә бүләк итә.

● Бер ауыҙ һүҙҙең дә мәғәнәһе төрлө.
● Һүҙ ат түгел, ысҡынһа - тоттормай.
● Тел абындыра ла, табындыра ла.
● Тутыйғошто ла һөйләргә өйрәтәләр.
● Арҡан оҙон, смс ҡыҫҡа.
● Тыңлаған белмәй, һөйләгән белә.
● Йәйы һүҙ ҙә ялҡыта.
● Заман боҙоҡ түгел, тел боҙоҡ.
● Тел сарлау салғы сүкеү түгел.
● Күңелдә күтәреүгә лә, күңел ҡырыуға ла бер һүҙ етә.
● Һүҙ саманы ярата.
● Тел яраһы оҙаҡ ҡанһырай.
● Һүҙҙе лә ҡыйыш әйтеп, тура тейҙереп була.
● Шағир эше - һүҙ эҙләү.
● Ялҡауҙың һүҙе телендә, ҡулы - кеҫәһендә.
● Яҡшы һүҙ - татлы ризыҡ.
● Хәҙер туҙға яҙмайҙар, телефонға яҙалар.

**Көнһылыу Сөләймәнова.**

### Әлфоризмдар

● Бесәй ҡарай көҙгөгә:
Көҙгөләге бесәйҙең
Мыйығына ҡыҙыға!
● Ишәк менгән тәхеткә:
Артыҡ ашап ташлаған -
Һыймай сығыу юлына!
● Бысаҡ тотҡан ҡулын йотҡан
Һунарсының юлбарыҫ...
● Үҙе ялтыр, ныҡ булһа ла
Энә файҙаһыҙ еңһеҙ...
● Ҡойроҡ болғаусыларҙың
Тештәре лә бар!
Көләме, ырылдаймы -
Айырыу ҡыйын...
● Хәтерең шәп, тиеп үпкәләйҙәр миңә - мине үпкәләтеп онотоп бөткәндәр!
● Башымды алйотҡа һалам
Ышанып ялғаныңа...
Көҙән сәскә атҡан еләк
Алданған алтынына...
● Тиран хужа байҙарҙы яҡлай, ярлыларҙы иҙә.
Ғәҙел хужаның байҙарға талаптары ҙур, ярлыларҙы йәлләй.
● Ҡайырылһа уң ҡанатың -
Күтәрә алмай һул ҡанатың...
Яңғыҙ ҡанат елпенһә лә
Тауҙар уға башын эймәҫ...
● Ел болара сал далала
Ҡолатырға ағасы юҡ -
Ағас булһа, ел-дауылға
Ҡоторорға ирек тә юҡ...
● Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй,
Яҙҙар килә ҡарғаһыҙ ҙа -
Йәшәй, алмай, әммә ләкин
Ҡарғалары яҙҙарһыҙ ҙа...
● Аҡмай йылға тауға табан -
Ергә һеңә ҡоролоҡтан...
Тамсы тамып тишә ташты -
Һыуҙың көсө күпкә артыҡ!
*(Күҙ йәштәре битте йыумаһа, эскә ағып тишә йөрәкте...)*
● Ташты ярыр үҫкән ағас-
Ҡоро таяҡ яра алмай!
● Сүлләктә күҙ йәше тиҙ кибә -
Һынауҙар сыныҡтыра һынмағанды...
● Алмаз пландарҙың да "ә бөлки"һе була.
● Икеләнеп-шикләнеп ултырһаң, ғүмер үтә лә китә..
● Киләсәктә матур хәтирәләр булһын өсөн хәҙер бәхетле бул!
● Бөтә тишекҡә яраған тығындар була.
● Бөтә нәмә лә ике яҡлы: тыштан ялтыр эстән тутыҡ, тыштан тутыҡ эстән ялтыр.
● Таяҡтың йыуан башы төшә икән, ызнащит тотҡан кешенең ҡулы нәҙек.
● Буш мискә тиҙерәк тишелә.
● Айыуҙың юлын ҡыйған ҡуян батырлығы менән маҡтанып өлгөрмәй.
● Һыйырға септә килешмәй, всирауна ат йөгән һөйрәй.

**Әлфиә Юлыҡ.**

*✓ Сит ил ғалимдары асыҡлауынса, тауыҡ һурпаһы һалҡын тейеүҙән һаҡлай. Ундағы карнозин тип аталған матдә инфекцияны иртә осорҙа юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙОҠОҒА ТАРТАМЫ?

■ Ғалимдар белдереүенсә, көндөҙ бер туҡтауһыҙ йоҡоға тартып тора икән, был организмда D витамины етешмәүенең бер билдәһе булыуы ихтимал. Сомнологта иҫәпә тороусы пациенттарҙы тикшереп ҡарағандан һуң уларҙың барыһына ла тап ошо витамин етешмәүе асыҡланған. Әлегә был тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән өлкә, шуға табиптар әле тикшеренеүҙәрҙе дауам итә. Шул уҡ ваҡытта, көн һайын йоҡоһо туйып уяныусы кешеләрҙе табыуы һирәк, ти белгестәр. Болотло көн, тынсыу эш бүлмәһе лә йоҡоно килтерә. Сөнки был осраҡтарҙа атмосфера баҫымы түбәнәйә һәм баш мейеһе кислород менән насар тәьмин ителә. Төшкө аштан һуң да был күҙәтелеүе ихтимал, сөнки ҡан ашты эшкәртеү өсөн ашҡаҙанға тулыша, һөҙөмтәлә мейе тағы ла энергияһыҙ ҡала. Был осраҡтарҙа саф һауаға сығырға, хәрәкәт итергә кәрәк.

■ Калифорния университеты ғалимдары белдереүенсә, артыҡ ашағандан һуң кеше үҙен сәғәт бүлкәттәрен алыштырғандай тоя, сөнки ул шундай уҡ әҙемтәләр барлыҡҡа килтерә. Яңы йыл байрамдарынан һуң кешеләр артыҡ ашап ҡына ҡалмай, ә төндәрен дә өҫтәл артында ултырырға күнегә. Организм быға бөтөнләй күнекмәгәнлектән, көслө генә стресс кисерә, тип яҙа Glob News. Доктор Луис Пташектың лабораторияла сысҡандарҙа үткәргән һынауҙары күрһәтеүенсә, был организмдағы биологик ритмдарҙың боҙолоуы менән янай.

■ Сит ил ғалимдары асыҡлауынса, тауыҡ һурпаһы һалҡын тейеүҙән һаҡлай. Ундағы карнозин тип аталған матдә инфекцияны иртә осорҙа юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә. Карнозин организмда даими булһа, тимәк, кеше миҙгел инфекцияларына ла бирешеп бармаясаҡ. Доктор Стэфан Реннард ун йыл элек үк тауыҡ һурпаһының дауалау үҙенсәлектәре тураһында белдергәйне. Ул һурпаның тап ошо төрө нейтрофилдар хәрәкәтен туҡтатыуын һәм өҫкө тын юлдары инфекцияһы билдәләрен кәметеүен раҫлаған. Күптән түгел Небраска университеты ғалимдары үткәргән һынауҙар быны дөрөҫләгән. Был тәжрибәлә ҡатнашыусыларҙың барыһы ла һалҡын тейҙереп ауырыған. Уларҙың бер өлөшөнә - һалҡын, икенсе өлөшөнә йылы һыу, өсөнсөһөнә тауыҡ һурпаһы биргәндәр. Билдәле булыуынса, йылы шыйыҡса һалҡын тейгәндә лайланы сығарыуҙы тиҙләтә, ә был тын юлдарын таҙарта. Әммә йылы һыуға ҡарағанда тауыҡ һурпаһы быны яҡшыраҡ башҡара. Бынан тыш, тауыҡ һурпаһы танауҙа һаҡланыу механизмын да эшләтеп ебәрә, шуға ла инфекция организмға үтеп инә алмай.

■ Сит ил тикшеренеүселәре әйтеүенсә, һимеҙлек кешенең дөйөм торошона ғына түгел, ә психик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһап, йыш ҡына депрессияға алып килә, бындай кешеләр эштә лә тиҙерәк арый. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, физик әүҙемлек өсөн ваҡыт табыусылар бындай проблемаларға осрамай, мәҫәлән, аҙнаһына 4 тапҡыр спорт менән шөғөлләнеүселәр депрессияның нимә икәнен дә белмәй. Ғалимдар физик күсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

**Май еттеме, шифалы үҫемлектәр йыя башларға ла мөмкин. Уларҙың күбеһен әлеге осорҙа турамаларға ҡушып ҡулланырға була. Сананы йәй әҙерлә, тигәндәй, әле үк ҡышҡылыҡҡа кәрәкле дауаны хәстәрләй башлау осоро ла был ай. Һеҙҙең иғтибарға май айында уҡ йыйып ҡулланырға яраҡлы бер нисә шифаны тәҡдим итәбеҙ.**

# МАЙ ҮЛӘНДӘРЕ ЙЫЙ



## Биҫтау үләне

**Биҫтау (көйөҙ) үләне, йәки баллыҡай ҙа тип йөрөтөлгән, ә русса "медуница неясная", "медуница лекарственная" тип нарыҡланған һәм Башҡортостанда киң таралған үҫемлек бик файҙалы икән. Халыҡ медицинаһында уның үләне ҡулланыла, тимәк, сәскәһе, япрағы һәм һабаҡтары бергә бик шифалы, тигән һүҙ. Биҫтау үләненең тамырында кофе һәм литосперма кеүек фенолкарбон кислоталары бар, үләнендә дуплау матдәләре, рутин, каротин, С витамины күп. Үҫемлектең япрағы һәм сәскәһендә лә С витамины бар.**

Биҫтау үләне сәскә атҡан мәлендә йыйыла. Әйткәндәй, уның яңы ғына атҡан сәскәләре алһыу, ә һеркәләнделгәндәре күк төҫтә була. Күләгәлә һәм ҡоро урында киптерелә, ҡәҙимгесә һаҡлана. Халыҡ дауаһында биҫтау үләне балалар туберкулезынан иң яҡшы сараларҙың береһе һанала. Был үҫемлек ярҙамында тын алыу юлдарының бронхит, фарингит, ҡурылдай астмаһы, пневмония ауырыуҙарын, бөйөр шеше, геморрой, ҡатын-ҡыҙҙар ағзаларының шешеүенән ҡулланалар, шулай уҡ үләндең төнәтмәһен экзема, псориаз, витилиго, яҫы ҡыҙыл тимрәү, сиҡан сыҡҡанда, тиренең вируслы ауырыуҙары, коллагеноз, васкулит булғанда эсәләр.

Биҫтау эске секреция биҙҙәре эшмәкәрлеген яҡшырта, иммунитетты нығыта, организмдың һаҡланыу үҙенсәлектәрен күтәрә. Үлән ҡан тәнсәләре барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итерлек микрэлементтар тупланмаһына бай.

Был ауырыуҙарҙан шифалы төнәтмә бөтә осраҡта бер төрлө тиерлек әҙерләнә: 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Ә бына яңы йыйылған йәш үләнде турамаға ҡушып ашау файҙалы, бигерәк тә ҡалҡан биҙе эшмәкәрлеге түбәнәйгән осраҡта. Киптерелгән үләнде ҡыш та ҡулланырға мөмкин, әммә иң ҡиммәтлеһе - үләндең һуты. Уны әсемәһен өсөн 1:1 нисбәтендә араҡы менән ҡушып һаҡларға кәрәк һәм уның ярҙамында лейкоз, ҡалҡан биҙе ауырыуҙары, аҙҡанлылыҡ, ҡайһы бер үпкә һәм башҡа шешенеү сирҙәрен дауалайҙар.

**Шешенеү һәм тын ҡыҫылыуҙан.** Термосҡа 2 ҡалаҡ яңы (йәки 1 ҡалаҡ киптерелгән) биҫтау үләнен һалып, 400 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 100-әр мл эсергә.

**Үпкә ауырыуҙары, бәүел ҡыуығы, геморрой** булғанда биҫтау, юл япрағы, шалфей, һарыгүҙ һәм әремде тигеҙ өлөштә алып ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә һәм 3-4 минут ҡайнатырға. Бер стакан тулы булғансы ҡайнар һыу өҫтәп ҡойорға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Уңалмаған яра.** Үҫемлектең япраҡтарын кәбеҫтә тоҙлағандағы кеүек итеп, һуты сыҡҡансы ыуаларға һәм уңалмаған яраға ҡапларға.

**Пиелонефрит һәм цистит.** Бер тигеҙ өлөштә (1-әр ҡалаҡ) биҫтау үләне, ҡара ҡарағат һәм ҡыҙыл көртмәле япраҡтарын алып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп, ҡараңғы урында ярты сәғәт тоторға һәм һөҙөргә. Көнөнә 4-5 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

**Ҡарлыҡҡан тауыштан.** 2 ҡалаҡ үләнде 20 минут төнәтеп, бал өҫтәп (ҡарабойҙай балы яҡшыраҡ) йылы көйөнсә көнөнә 4-5 тапҡыр 50-шәр мл эсергә.

Башҡорт халыҡ дауаһында был үләндең бер төрө һаналған кәкүк башты (медуница мягчайшая) яраға бәйләр булғандар, ул ҡанды тиҙ ойоштороған, эренләүҙән һаҡлаған.

## Ынйы сәскә

**Ынйы сәскә, йәки русса "ландыш майский" урманда, урман ситендә, ялантуғайҙарҙа үҫә. Республикабыҙҙа һуңғы осорҙа һирәк осрай торған үҫемлеккә әүерелә бара, шуға уны бик һаҡсыл файҙаланыу талап ителә.**

Ынйы сәскә үләне (япрағы, сәскәһе һәм һабағы) май һәм июнь баштарында әҙерләнә, ҡайсы йәки бысаҡ менән ҡырҡып алына. Кисекмәҫтән күләгә урында йоҡа итеп йәйеп, йыш әйләндереп киптереү талап ителә. Шунһыҙ үлән тиҙ боҙола. Уны ҡоро урында һаҡлағанда шифаһы ике йылға етә. Тик уның ағыулы булыуын да хәтерҙән сығарырға ярамай: башҡа үләндәрҙән айырым тоторға кәрәк.

Ынйы сәскәһен аҙлап ҡына әҙерләп ҡуйыу ҙа дауаланыу өсөн етә. Япраҡтарын айырым киптерергә, яңы ғына йыйып алынған сәскәһенән төнәтмә эшләргә мөмкин - йөрәк мускулдарының тонусын күтәрә, үҙәк нервылар системаһын тынысландыра.

Ынйы сәскәһе төнәтмәһен шулай уҡ астма, эпилепсия, күҙән йыйырһа, баш ауырығанда һәм ашҡаҙан ауыртҡанда, ауыр физик эштән ауырыҡһынып торғанда ла ҡулланалар.

**Йөрәк ауырыуҙары.** Ынйы сәскәһенең йөрәк гликозидтары көслө тәьҫир итмәй, сөнки улар ашҡаҙан-эсәк юлында тиҙ генә тарҡалып бөтә. Уларҙың көсөн валериана йәки энәлек төнәтмәләренә ҡушып арттырырға була, ләкин был осраҡта ла бөтә сирҙәрҙән дә дауа була алмайҙар, тик нервылар ҡаҡшауға бәйле йөрәк ауыртҡан осраҡта ғына. Төнәтмәне әҙерләү өсөн яңы өҙөлгән сәскәләрҙе банкаға 3/4 өлөш итеп тултырып, өҫтөнән сығарып спирт ҡойорға. 2-3 аҙна төнәткәндән һуң һөҙөргә. Уны көнөнә 2-3 тапҡыр һыуға 10-15 тамсы тамыҙып эсергә.

**Күҙән йыйырһа.** 4 грамм яңы сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғас, һөҙөргә. Һәр 2 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Мейегә ҡан һауыу ҡурҡынысы янағанда һәм Базед ауырыуынан** - шул уҡ төнәтмәне эшләргә, әммә көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Ҡараһыу (глаукома).** 1 балғалаҡ яңы сәскәһе, ярты стакан яңы кесерткән япрағы (май айынығы), 1 ҡалаҡ һыуҙы ҡушып, ҡараңғы урында 8-9 сәғәт төнәтергә, шунан ярты балғалаҡ аш содаһы ҡушырға. Килеп сыҡҡан дауаны күҙҙәргә ҡапларға кәрәк.

**Конъюнктивит.** 10 тамсы ынйы сәскә төнәтмәһенә 90 тамсы ҡайнатылған йылы һыу ҡушырға. Марля тампонын шуға сылатып, күҙҙәргә баҫырға.

***Иҫкәрмә:*** ынйы сәскә сәскәләренең төнәтмәһе йөрәк һәм ҡан тамырҙарының киҫкен органик үҙгәрештәре, киҫкен миокардит, эндокардит һәм киҫкен кардиосклероз булғанда ҡулланыу тыйыла.

Шулай уҡ ынйы сәскәһе дауаларын бауыр һәм бөйөр ауырыуҙары киҫкенләшкәндә лә ҡулланырға ярамай. Бешкән ҡыҙыл емештәре ағыулы, быны белмәгәндәргә, айырыуса балаларға аңлатырға кәрәк.

Ынйы сәскә менән ағыуланғанда төп күрһәткестәр: күңел болғана, ҡоҫтора, эс китә, аритмияның төрлө төрҙәре, парасистолия, ҡарынсыҡ тахикардияһы, мускулдар хәлһеҙләнеүе, баш ауырта, тирегә аллергия сыға, үтә ныҡ ярһыу, күҙ күреме һәм төҫтәрҙе айырыу һәләте боҙолоуы.

## Ҡуҙғалаҡ

**Ҡуҙғалаҡ флавоноид, липид, аҡһым, минераль тоҙҙар, органик кислоталар (алма, ҡуҙғалаҡ, лимон кислоталары), каротин, В1, В2, С, К, РР витаминдарына бай.**

Ҡуҙғалаҡ аш һеңдереүҙе, эсәк, үт ҡыуығы, бауырҙың эшен яҡшырта. Шулай уҡ был үлән колит ауырыуы төрҙәрен, ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙарын, геморройҙы дауалауҙа ҡулланыла.

**Ҡуҙғалаҡ түлһеҙлектән дә ярҙам итә.** Әҙерләү ысулы бик ябай: 1 ҡалаҡ ҡуҙғалаҡҡа бер стакан эҫе һыу ҡойорға, һүрән утта 1 минут ҡайнатырға, һыуынғансы төнәтергә. Стакандағы төнәтмәне өскә бүлеп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

Ҡуҙғалаҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың да, ираттың да климакс осронда файҙалы. Әбүғәлисина ҡуҙғалаҡты даими ашағанда, климакс тиҙерәк һәм еңел үтә, тип иҫәпләгән. Ҡатын-ҡыҙға уның төнәтмәһен айына 7 көн күрем килерҙән алда эсергә кәрәк (ул саҡта күрем ауыртыныуһыҙ, нервыларһыҙ, аҙ күләмдә киләсәк). 1 ҡалаҡ киптерелгән ҡуҙғалаҡ япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. 1 стакан төнәтмәне өскә бүлеп, көн дауамында ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

Ҡуҙғалаҡты бешкәнсе ҡайнатырға ярамай, был осраҡта ҡуҙғалаҡ кислотаһы барлыҡҡа килә. Шулай уҡ ҡуҙғалаҡты ауырлы саҡта, бөйөр шеше ауырыуы, юғары әселектәге гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шеше ауырыуҙары осрағында ҡулланырға ярамай. Ҡуҙғалаҡ кальций матдәһен үҙләштереүҙе ауырлаштыра.

✓ *Әлеге табаҡһыҙ ирҙең янында ла табаҡ бар икән. Был хәлдәрҙән бик тә ҡәнәғәт ҡалған ир: "Әй, Әбү Ҡоләбә, һинең һүҙең менән мине улым ғазабымдан һәм күршеләремдән оялыуҙан ҡотҡарҙы", - тип рәхмәтен белдергән.*



ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ЯҘҒЫ ХӘҮЕФТӘР

**Көн йылыныу менән кешеләргә тағы ике хәүеф янай. Уның береһе талпан булһа, икенсеһе - сыҫҡандар. Уларҙың икеһе лә инвалидлыҡҡа, хатта үлемгә килтергән ҡурҡыныс вирус тарата. Уларҙан нисек һаҡланырға? Ниндәй иҫкәртеү саралары бар? Медицина профилактикаһы врачы Маргарита Әнүр ҡыҙы УТИЦКАЯ шул хаҡта һөйләй.**



## Талпан энцефалиты

Талпан энцефалиты менән ауырыусыларҙың күп өлөшө май-июнгә, ҡайһы берҙә июлгә тура килә. Шуға күрә айырыуса ошо мәлдә һаҡлыҡ сараларын күреү мөһим. Инкубация осоро - 10-14 көн. Сир юғары температура, баш ауыртыуы, укшытыу менән башлана. Шулай уҡ муйын, ярын, күкрәк, арҡа һәм мускулдар ауыртыуы күҙәтелә.

Бөжәктән һаҡланыу өсөн ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәгеҙ. Урманға, йылға буйына сыҡһағыҙ, ябыҡ, еңле кейем кейегеҙ. Салбар балағын итек, ботинка ҡуңысына тығығыҙ. Ҡолаҡ, муйынды ҡаплап торһон өсөн яулыҡ ябынығыҙ. Мазь һәм спрей-репелленттар ҡулланығыҙ. Ике сәғәт һайын үҙегеҙҙең, берберегеҙҙең өҫтөн тикшерегеҙ. Ял итергә туҡтаһағыҙ, асыҡ, таҙа урынды һайлағыҙ. Ҡайтҡас та өйгә инмәҫ борон өҫкө кейемегеҙҙе сисеп ҡағығыҙ, өйгә ингәс, тәнегеҙҙә талпандың юҡлығын тикшерегеҙ.

Әгәр талпан ҡаҙалһа, мөмкин тиклем тиҙерәк дауаханаға, фельдшер-акушерлыҡ пунктына мөрәжәғәт итегеҙ. Вирусҡа тикшереү үтеү һәм, кәрәк булһа, ваҡытында дауалана башлау өсөн врач-инфекционисҡа барығыҙ. Бөжәктә энцефалит вирусы асыҡланһа, уға ҡаршы иммуноглобулин һалдырығыҙ. Препаратты талпан ҡаҙалғандың дүртенсе көнөнән дә ҡалмай һалдырыу мөһим.

Бөжәкте ни тиклем тиҙерәк сығарһаң, инфекцияның ҡанға әләгеү хәүефе шул тиклем аҙыраҡ. Медицина учреждениеһына барыу мөмкинлеге булмаһа, уны үҙаллы алырға тәләһегеҙ, түбәндәге ҡағиҙәләрҙе үтәгеҙ:

- талпанды пинцет йәки еп менән эләктереп, уны һытып ҡуймаҫ өсөн ҡабаланмай ғына тартып алығыҙ, сөнки ул һытылһа, эсендәге ағыуы яра аша организмға эләгәсәк.
- ҡаҙалған урынды 70 процентлы спирт, 5 процентлы йод йәки башҡа төрлө дезинфекция сараһы менән эшкәртегеҙ;
- талпанды сығарғас, ҡулығыҙҙы һабынлап йыуығыҙ.

Сығарыу өсөн башҡа ысул ҡулланмағыҙ. Мәҫәлән, бөжәкте ҡурҡытыр өсөн ул ҡаҙалған урынға көнбағыш майы йәки башҡа еҫле шыйыҡса һөртөү хәлде ҡатмарлаштыра ғына.

Талпандың вируслы икәнен билдәләү өсөн уны тере килеш яҡшы ябылған һауытта лабораторияға тапшырырға кәрәк. Тикшергәс, тешләнгән кеше прививка эшләтмәгән булһа, талпан ҡаҙалғандан һуң 96 сәғәт дауамында энцефалитҡа ҡаршы иммуноглобулин индерелә. Шулай уҡ 21 көн буйына ул кеше күҙәтеү аҫтында була. Боррелиоз, гранулоцитар анаплазмоз, моноцитар эрлихиоз кеүек башҡа төрлө инфекциялар асыҡланһа тейешле дауалау билдәләнә. Әгәр талпан ҡаҙалғандан һуң бер ай дауамында температураңыҙ күтәрелһә, үҙегеҙҙә насар тойһағыҙ, урыны ҡыҙарып ҙурайып торһа, врачҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

## Сыҫҡандар

Геморрагик биҙгәк - бөйөрҙә һәм ҡан тамырҙарын зарарлаған тәбиғи сығанаҡлы ауырыу. Йорт һәм ҡыр сыҫҡандары таратҡан вирус уларҙың кибеп, саң менән һауаға таралған бүлендеһе аша кешегә күсә. Уны күп осраҡта урманға, һунарға, балыҡҡа барғанда, еләк, бәшмәк йыйғанда, ауыл хужалығында, баҡсала, дачала, гараж һәм һарай-ҡурала саңлы эш башҡарғанда йоҡторалар.

Ауырыуҙың тәүге билдәләре 14-тән 20 көнгә тиклем барлыҡҡа килә: тән температураһы ҡапыл 38-40 градусҡа тиклем күтәрелә, баш һәм мускулдар ауырта, дөйөм хәлһеҙлек күҙәтелә, ҡайһы берҙә укшыта. Һуңғараҡ бил, эс ауырта, тән тиреһенә сабыртма сыға, күҙҙәр насар күрә. Был сир менән ирегеттәр йышыраҡ ауырый. Саңлы эш башҡарғандан йәки тәбиғәттә булғандан һуң 1,5 ай дауамында ауырыу билдәләрен тойһағыҙ, дауаханаға мөрәжәғәт итеү мөһим.

**Төп иҫкәртеү сараларына түбәндәгеләр инә:**

- ҡапҡан, ағыу ҡулланып, кимереүселәргә ҡаршы даими көрәш алып барыу;
- саңлы эш башҡарғанда бирсәткә, респиратор, мамыҡ-марля битлек кейеү;
- кимереүселәр йөрөгән хужалыҡ бинаһында эшләр алдынан уны елләтеү, дезинфекция сараларын ҡулланып йыуыу, эш тамамланғас, ҡулды һабынлап йыуыу;
- аҙыҡ-түлекте кимереүселәр инмәһен өсөн ябыла торған һауыттарҙа һаҡлау, сыҫҡан ашаған ризыҡты ташлау;
- туҙанлы эш ваҡытында тәмәке тартмау, ҡулды ауыҙ, күҙ, танау тирәһенә яҡын килтермәү;
- тәбиғәттә сыҡҡанда ял итеү өсөн ҡыуаҡлыҡ, кипкән үлән, ҡороған ағастар ятҡан урындан йыраҡ урындарҙы һайлау.

Ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәһегеҙ, үҙегеҙҙе хәүефтән һаҡларһығыҙ.

**Ләйсән СӘЛИХОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Тормош энергияһы менән банктағы иҫәбегеҙҙең бәйләнеше

Кеше организмы энергетик уратма менән уратып алынған. Был физик тәндең күсермәһе. Энергетик уратманы үлсәп, иң мөһиме, уны үҙгәртеп була. Ул аң менән тәнде бәйләп тороуҙа ҙур роль уйнай, шулай уҡ сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһай. Йәғни ул икенсе энергетик уратмалар менән бәйләнештә тора - ғаилә ағзаларына, яҡындарығыҙға, башҡа мөнәсәбәттәргә йоғонто яһай. Ғәмәлдә, беҙҙең менән нимә генә булмаһын, тәүҙә ул энергетик уратма кимәлендә тормошҡа аша.

Күҙгәгә ҡарап, ҡасандыр нимәнелер яңылыш эшләгәнегеҙҙе йәки яҡшыраҡ эшләгәнегеҙҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Бәлки, уға үҙегеҙгә үҙегеҙ әле лә дөрөҫөн әйтергә ҡурҡҡан бәләкәй генә бер нәмә сәбәпсе булғандыр? Һәр кемдә үҙе лә һиҙмәҫтән баҫып ҡалдырған һиҙәт була. Уны баҫып ҡалдырыу энергетик уратмағыҙға йоғонто яһай. Уның боҙолоуына килтерә, йәғни, үҙ сиратында, энергия ағымына һәм уға бәйле булған бөтөн нәмәгә: сәләмәтлеккә, мөнәсәбәттәргә, именлеккә, байлыҡҡа кәртә булып тора.

НАСА-ның Йыһанға осоуҙар үҙәгенең ғалимтикшеренеүсеһе Барбара Бреннан 20 йыл кешенең энергетик уратмаһын үлсәү һәм өйрәнеү менән шөғөлләнә. Ул, кешеләр үҙе риза булмаған нимәләр була икән, тимәк, "ул энергетик структуралағы үҙгәрештәрҙе тарта - был үҙеңде ғәфү итә белмәү менән бәйле", ти. Артабан: "Үҙен ғәфү итеп, кеше үҙ уратмаһындағы энергияға юл аса, һәм был тормошта кәрәк булған энергия ағымын тергеҙә", - тип раҫлай.

Кем булыуығыҙ, нимә менән шөғөлләнеүегеҙ мөһим түгел - үҙегеҙҙе ғәфү итегеҙ. Был һеҙгә, хәрби наградаларығыҙға, спорт приздарына, ныҡлы ғаиләгә ҡарамаҫтан, файҙа ғына килтерер.

Аныҡлап әйткәндә, был етди эш һәм һеҙгә кешене өс өлөшкә бүлеп, уның һәр ҡайһыһынан айырым ғәфү итеүҙе һорарға кәрәк. Был өлөштәр булып аҡсы аң, аң һәм юғары аң тора.

## Тормошоғоҙҙағы иң мөһим кеше менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу

Түбәндә һеҙҙең энергетик уратмағыҙҙы һәм барлыҡ файҙалы нәмәләрҙең, шул иҫәптән, аҡса ағымын да таҙартырға ярҙам иткән өс күнекмә бирелә.

Хәҙер һеҙ үҙегеҙҙе ғәфү итергә өйрәнәсәкһегеҙ һәм быны түбән кимәлдән, тәрән булмыштан, шәхестең төпкө өлөшөнән - аҡсы аңдан башлаясаҡһығыҙ. Аҡсы аң ер аҫты мәмерйәһенә оҡшаған, унда беҙҙең барлыҡ хәтер һаҡлана. Бер ниндәй хәүефһеҙ һеҙҙең һуңғы тинегеҙгә бәхәс ҡорорға мөмкин: ошо хәтер араһында алға китергә ҡамасаулағандары, байлыҡ энергияһы ағымын тотоп тороусылары ла бар.

Артабанғы бер минутлыҡ дәрестәрҙә һеҙ үҙегеҙҙе аңлы һәм аңһыҙ кимәлдә ғәфү итә аласаҡһығыҙ.

Карл Юнг аңды һыу һауыты менән сағыштырған. Беҙ был символды ҡулланасаҡбыҙ: һыуҙа һеҙ үҙ сағылышығыҙҙы күреп, уны ғәфү итәсәкһегеҙ.

Күнекмәләр менән киләһе һанда таныштырырбыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле комартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

## Саҙаҡаның файҙаһы

Әбү Ҡоләбә хәҙрәттәре кистәрҙең береһендә ҡәбер әһелдәренең барсаһының тышҡа сығып, ҡәберҙәрен тирәләп ултырғанын төшөндә күргән. Һәр ҡайһыһының алдында нурҙан ҡойолған табаҡтар бар, иллә мәгәр бер ирҙең генә янында ундай табағы юҡ икән. Әбү Ҡоләбә бынан: "Әй, фәлән, нисек һинде табаҡ юҡ ул?" - тип һорағас, был мәйет: "Күршеләремдең донъялыҡта ҡалған балалары һәм дуҫтары саҙаҡа бирәләр, доға ҡылалар, әлеге табаҡтар шуларҙың сауаптары. Минең бер балам бар, тик ул изгелеккә түгел, саҙаҡа ла бирмәй, доға ла ҡылмай. Шуның өсөн янымда табаҡ та юҡ, нур ҙа юҡ. Бик мәхрүм мин, бик оятлымын", - тип үҙ хәлен аңлатҡан. Әбү Ҡоләбә, йоҡоһонан уянғас, был ирҙең улына күргән төшөн һөйләй, уға саҙаҡа һәм доға ҡылырға ҡуша. Ул егет тәүбәгә килеп, ғибәҙәт үтәргә тотона, атаһы өсөн доға ҡыла һәм саҙаҡаһын бирә башлай.

Әбү Ҡоләбә көндәрҙән бер көндө шул ҡәбер әһелдәрен тағы ла төшөндә күрә: барсаһы ҡәберҙәренән сыҡҡандар, һәр ҡайһыһының алдында төрлө табаҡтар бар, ти. Әлеге табаҡһыҙ ирҙең янында ла табаҡ бар икән, ҡояштан да яҡтыраҡ булып, шул ҡәҙәр нурланып тора, имеш. Был хәлдәрҙән бик тә ҡәнәғәт ҡалған ир: "Әй, Әбү Ҡоләбә, Аллаһы Тәғәлә һинә изге яҙалар бирһен, һинең һүҙең менән мине улым ғазабымдан һәм күршеләремдән оялыуҙан ҡотҡарҙы", - тип рәхмәтен белдергән.



**25 АПРЕЛЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Условия контракта". [16+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [12+]
16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30, 20.45 История одного села. [12+]
17.45 Ради добра. [12+]
18.00 Пофутболим? [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
21.00 "Елкән". [6+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00, 5.00 Күстәнәс. [12+]
23.30 Т/с "Простить нельзя расстаться". [12+]
2.30 Спектакль "Красный Паша". [12+]

**26 АПРЕЛЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Условия контракта". [16+]
11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.
15.15, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.30 "КультУра". [6+]
15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Ныҡ бул. [6+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Т/с "Простить нельзя расстаться". [12+]
3.00 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]
5.00 Автограф. [12+]

**27 АПРЕЛЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Условия контракта". [16+]
11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]
14.30, 5.00 Тормош. [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "Сулпылар". [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 Тайм-аут. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Т/с "Простить нельзя расстаться". [12+]
3.00 Спектакль "Сваха". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**28 АПРЕЛЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Жизнь заново". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Условия контракта". [16+]
11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Автограф. [12+]
15.00, 18.15 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Избранная судьба". [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 История одного села. [12+]
0.00 Т/с "Простить нельзя расстаться". [12+]
3.00 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!". [12+]
4.45 Мы дети войны. [12+]
5.00 Үткән ғүмер. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**29 АПРЕЛЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Отец Матвей". [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Когда зацветет багульник". [16+]
3.25, 4.10 Т/с "Отец Матвей". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Д/с "Боевой надводный флот Отчизны". [12+]
11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Үткән ғүмер. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 23.00 Автограф. [12+]
14.00, 5.00 Башкорттар. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 Тормош. [12+]
19.00 Вечерний телецентр. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
22.00 БашГост. [12+]
23.30 Т/с "Третья мировая". [12+]
1.45 Спектакль "Любовница". [12+]
4.00 Колесо времени. [12+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**30 АПРЕЛЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Х/ф "Акушерка". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Жизнь прекрасна". [12+]
1.40 Х/ф "Женщины". [12+]
4.47 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 Д/ф "Сыны Отечества". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [0+]
11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
11.30 Детей много не бывает. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Үткән ғүмер. [12+]
13.00 Автограф. [12+]
13.30 Башҡорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 Д/ф "Женское лицо Победы". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Башкирские народные песни. [12+]
19.00 Тамыр. 30 лет заряжаем сердца. [6+]
21.00 Полезные новости. [12+]
21.15 Ради добра. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Пером и оружием. [12+]
22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Т/с "Третья мировая". [12+]
2.30 Спектакль-балет "Журавлиная песнь". [12+]
4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**1 МАЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

4.50 Х/ф "Она сбила летчика". [12+]
8.00, 3.05 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
9.30 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
12.15 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
15.15 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Майский дождь". [12+]
4.32 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Сәләм".
9.15 Мы дети войны. [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 Д/ф "Женское лицо Победы". [12+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30 Историческая среда. [12+]
17.00 "Образцовая башкирская семья". Церемония награждения победителей Открытого республиканского конкурса. [12+]
18.15 Уроки мужества. [12+]
19.00 "Вековая связь поколений". 100 лет профсоюзам Республики Башкортостан. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Әлләсе... [12+]
21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00 Концерт Загира Исянчурина. [12+]
1.00 Х/ф "Край". [16+]
3.00 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]
5.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
5.30 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 апрель "Джут: һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 16+
**28 апрель "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+
**29 апрель "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**30 апрель - 1 май Премьера! "Два кота"** (О. Штырляева). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 апрель Рәмизә Мөхәмәтшина** бенефисы (бейеү). 6+
**27 апрель** Башҡорт филармонияһының музыкаль-әҙәби лекторийына - 80 йыл! 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**28 апрель Премьера! "Онотолған әҙәм"** (Н. Хикмәт), драма. 31-се иждад миҙгелен ябыу. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27-28 апрель Премьера! "Go, Баламишкин"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия. 12+
**29 апрель "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**29 апрель "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**29 апрель Магнитогорск ҡалаһында гастролдә:**
**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**"Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ақшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (24) дүшәмбе | 3:52 | 4:22 | 5:52 | 13:30 | 18:17 | 20:36 | 22:06 |
| 26 (25) шишәмбе | 3:50 | 4:20 | 5:50 | 13:30 | 18:18 | 20:38 | 22:08 |
| 27 (26) шаршамбы | 3:48 | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 18:19 | 20:40 | 22:10 |
| 28 (27) кесе йома | 3:45 | 4:15 | 5:45 | 13:30 | 18:20 | 20:42 | 22:12 |
| 29 (28) йома | 3:43 | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 18:21 | 20:44 | 22:14 |
| 30 (29) шәмбе | 3:41 | 4:11 | 5:41 | 13:30 | 18:23 | 20:46 | 22:16 |
| 1 (30) йәкшәмбе | 3:39 | 4:09 | 5:39 | 13:30 | 18:24 | 20:48 | 22:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 27 АПРЕЛЬ - РӘСӘЙ ПАРЛАМЕНТАРИЗМЫ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**15-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ғәлиә. Әминбәк. Әсхәл. Ҡалаҡ. Иңбаш. Апостол. Самурай. Етмеш. Мәрйен. Алтын. Тин. Фәтүә. Бәлә. Алым. Һанат. Тула. Киле. Ҡойҡа. Мәсем. Тараҡан. Йышҡы.

**Вертикаль буйынса:** Салауат. Ҡамсат. Ул. Руанда. Әй. Олатай. Ҡойма. Ғаилә. Тамаҡ. Ашҡаяҡ. Хөсәйенбәк. Ихата. Көл. Нил. Иле. Фәһем. Түбә. Еңеү. Шеш. Әйтем.

ҺОРАУ - ЯУАП

# МАШИНАЛЫЛАРҒА

**ОСАГО һәм КАСКО полистарының хаҡы нисек үҙгәрәсәк? Рәсәй автостраховкалаусылар союзының башҡарма директоры Евгений Уфимцев аңлата.**



**ОСАГО полисының хаҡы ниндәй булыр?**

Полистың хаҡы страховка түләү суммаһына бәйле. Ә уларҙың дәүмәле, үҙ сиратында, запчастарға хаҡтан тора. Рәсәй автостраховкалаусылар союзы запас частар Белешмәһенә нигеҙләнеп эш итә. Әле 2021 йылдың декабренә - 2022 йылдың ғинуарына нигеҙләнгән Белешмә ғәмәлдә. Унда февраль айында үтәсәк запчастарға хаҡтар үҙгәреүе сағылдырылмаған. Тимәк, страховка түләүҙәре суммаһы ла, ОСАГО ла Белешмәнең киләһе яңыртыуына тиклем ҡиммәтләнмәйәсәк.

**КАСКО полисына хаҡ нисек үҙгәрә?**

КАСКО-ның хаҡы автомобиль хаҡына һәм запас частарға бәйле. Ул үҫкәнгә күрә, КАСКО ла ҡиммәтләнә.

**Страховкаларҙың хаҡын кем контролдә тота?**

ОСАГО-ның хаҡы туранан-тура контролдә тотолмай, әммә уны тотҡарлаған механизмдар бар. Мәҫәлән, Үҙәк банк тариф коридоры сиктәрен һәм полистың дөйөм хаҡына бәйле коэффициенттарҙы билдәләй. Һәр водитель өсөн хаҡты үҙгәртеү механизмы ла бар - ул "бонус-малус" коэффициентын ҡулланыу. Ул теге йәки был водителдең юл-транспорт ваҡиғаһына эләккән һандан сығып иҫәпләнә. "Аварияһыҙ" водителдәр база хаҡынан ташлама ала, ә "авариялыларға", киреһенсә, күберәк түләргә тура килә. КАСКО-ның хаҡ яһалышын һәр страховка компанияһы айырым билдәләй, ябай тел менән әйткәндә, бында хаҡты баҙар үҙе көйләй.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ҠӘҘЕР КИСЕ

**Ҡайһы бер ғалимдар Ҡәҙер кисе тура килгән ваҡыт тураһында: ул - Рамаҙандың 21-се төнө, икенселәре - 23-сө төнө, өсөнсөләре - 25-се төнө, ә күбеһе - ул 27-се төн, тиҙәр. Бәйғәмбәребеҙ: "Ҡәҙер кисен Рамаҙандың һуңғы ун төнөнөң таҡ төндәрендә эҙләгеҙ", - тигән.**

Ҡәҙер кисе Мөхәммәт с.ғ.с. өммәтенә Аллаһ Тәғәлә тарафынан бирелгән махсус бер кистер. Башҡа бәйғәмбәрҙәргә бындай кис бирелмәгән. Был кистең мең айҙан да хәйерлерәк булғанын дин ғалимдары шулайыраҡ аңлата: Рәсүлуллаһ бер көн сәхәбәләренә Бәни Исраил ҡәүеменән Шәмғүн исемле бер әҙәмдең ҡылысын тағып, мең ай (80 йылдан артыҡ) Аллаһ юлында жиһад итеүе хаҡында аңлатҡас, сәхәбәләр хайран ҡалып, ғәжәпләнеп: "Был ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙҙә беҙ быға нисек ирешербеҙ?" - тинеләр. Рәсүлуллаһ та бының хәленә хайран булып, Аллаһтан: "Минең өммәтемдән дә берәү шундай булһа ине", - тип үтенәһе килә. Шунан һуң ул доға ҡыла: "Йә Раббым, минең өммәтем ғүмер яғынан бик ҡыҫҡа ғүмерле, ғәмәл яғынан иң әҙ әйҙәнең", - тип әйтә. Шул мәл Аллаһ Тәғәлә: "Ҡәҙер кисе мең айҙан да хәйерлелер", - тип аят көлимәһен индерә, Ҡәҙер кисен уға бирә. Һәм Хәбибенең мөбәрәк телəген ҡеуәтләндереп бойора: "Әй Хәбибем, Ҡәҙер кисе һинекелер һәм өммәтеңдекелер. Бәни Исраилда булған үә Аллаһ юлында мең ай жиһад иткән ул кешенең ғәмәленән хәйерлелер. Ҡиәмәткә тиклем һәр Рамаҙан шәрифтә бер тапҡыр килер".

Ҡәҙер кисендә Ябраил ғәләйһис-сәләм менән башҡа күп фәрештәләр ер йөҙөнә төшөр, Аллаһы Тәғәләнең әмере менән бер ғибәҙәт ҡылыусыға юлыҡһалар: "Йә Раббым, был Ҡәҙер кисендә доға ҡылыусыларҙың доғаһын ҡабул ит", - тиерҙәр. Шулай итеп, таң атҡансы йөрөрҙәр, таң атҡандан һуң Ябраил ғәләйһис-сәләм: "Әй фәрештәләр! Күккә ашығыҙ! - тип әйтер. Фәрештәләр: "Әй Ябраил ғәләйһис-сәләм! Аллаһы Тәғәлә был Ҡәҙер кисендә Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдең өммәтенә ни ҡәҙәр рәхмәт һәм һөйөнөстәр бағышланы?" - тиерҙәр. Ябраил ғәләйһис-сәләм: "Әй фәрештәләр! Белегеҙ: Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм өммәтенә рәхмәттәр ҡылды һәм гонаһтарын ярлыҡаны. Мәгәр дүрт төрлө төркөмдө ярлыҡаманы. Ул дүрт төркөмдөң тәүгеһе иҫерткес эсеүсе, йәғни иҫерткес эсергә даимселек ҡылыусы. Икенсеһе - ата-әсәһен рәнйетеүсене ярлыҡаманы. Өсөнсөһө - туған менән талашҡан кеше, дүртенсеһе - үс тотоусыны, йәғни асыу һаҡлаусыны ярлыҡаманы", - тиер. Был дүрт төрлө гонаһ эйәләре, тәүбә-истиғфар ҡылып, яман эштәренән туҡтаһалар ғына ярлыҡар.

Ҡәҙер тигән һүҙ - ул ҡөҙрәт тигәнде аңлата. Икенсе мәғәнәһе - тәҡдир. Был кистә фәрештәләр әҙәм балаһының бер йыллыҡ тәҡдирен алып килә. Ҡәҙер төнө мең айҙан да ҡәҙерлерәк. Рәсүлебеҙ: "Кем дә кем Ҡәҙер кисен уяу үткәреп, ғибәҙәттә булһа, был кистән сыҡҡанда әсәһенән яңы тыуған сабый бала кеүек гонаһһыҙ сығыр", - тип әйткән. Төндә ғибәҙәттә үткәреү кешенең дәрәжәһен күтәрә, Аллаһы Тәғәлә ул кешегә шәфҡәт, мәрхәмәт менән ҡараясаҡ, ул Аллаһтың күләгәһендә буласаҡ, эш-ғәмәлдәрҙә һәм уңышҡа бәхеткә ирешер, Аллаһ уны насарлыҡтарҙан һаҡлаясаҡ, һәм унан ҡурҡыу тойғоһо юҡҡа сығыр. "Ҡәҙер кисендә өс тапҡыр "Ләә иләәһә илләллааһ" тип әйтеүсенең беренсеһендә - гонаһтары кисерелер, ғәфү ителер; икенсеһендә - йәһәннәмдән ҡотолор; өсөнсөһендә - йәннәткә инер. Ҡәҙер кисендә "Ҡәҙер" сүрәһен уҡыған кеше Ҡөрьән Кәримдең дүрттән бер өлөшөн уҡыған кеүек булыр", тип тә әйтеп ҡалдырылған.

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.

# ЙӨРӘК ҺҮҘЕ ЯҢҒЫРАНЫ



**Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында "Йөрәк һүҙе. Рәми" шиғриәт конкурсының финалы уҙҙы. Быйыл ул Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналды. Финалда видеояҙмалар буйынса һайлап алынған 12 конкурсант ҡатнашты.**

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актеры, Ш.Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Артур Кәбиров енеү яуланы. Ул 500 мең һум аҡса менән бүләкләнде. Артист Рәми Ғариповтың 1964 йылда яҙған, ләкин 1987 йылда ғына донъя күргән "Табыну" поэмаһын уҡып ишеттерҙе. Икенсе урынға - Зөбәржәт Утарбаева, өсөнсө урынға Нияз Замалетдинов лайыҡ булды. Тамашасылар һөйөүе призын Урал Таһиров яуланы. "Йыл авторы" призы Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың балаларына - улы Азамат менән ҡыҙы Гөлнараға тапшырылды.

Йыйылыусыларҙы Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов сәләмләне. Ул "Йөрәк һүҙе" проектының Башҡортостан өсөн бик мөһим булыуын, республика Башлығының хуплауын әйтте. Азат Бадранов проекты тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашҡандарҙың барыһына ла Башҡортостан Башлығының Рәхмәт хатын тапшырҙы. Улар - автор һәм етәксе Наилә Сәфәрғолова, жюри рәйесе Олег Ханов, алып барыусылар Фирҙәт Ғәлиев һәм Александр Кузьменко, режиссер Сулпан Асҡарова, оператор Илгиз Насипов.

# МОДАЛА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика халҡын Милли кейем көнө менән ҡотланы һәм "Ағиҙел" художество кәсептәре предприятиеһының ҡатын-ҡыҙҙар өсөн милли биҙәкле эшлекле костюмдарҙан торған яңы коллекцияһы хаҡында һөйләне.**

"Эшлекле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың күбеһе уларҙы баһалар тип ышанам, - тип яҙҙы ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Бер-ике йыл элек милли биҙәктәр төшөрөлгән кейемдәр модаға инде. Шул ваҡыттан Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың тарихына, мәҙәниәтенә үҙ-ара ҡыҙыҡһыныу һәм иғтибар көсәйә".

"Ағиҙел" Башҡортостан художество кәсептәре предприятиеһының яңы коллекцияһы республикала йылына ике тапҡыр билдәләнгән Милли кейем көнөнә ҡарата сығарылды. Киләһе йылда предприятие ойошторолоуға 60 йыл тула, уның продукцияһы беҙҙең халыҡҡа яҡшы таныш. Был - милли колоритлы сувенирҙар, йорт кәрәк-яраҡтары, көнкүреш әйберҙәре, яңыраҡ төп предприятие кейем-һалым да тегә башлаған.

# ҠЫҘЫҠЛЫ КҮРГӘҘМӘ

**Башҡортостан Республикаһының Милли музейында "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсының иң яҡшы эштәре күргәҙмәһе асылды. Ул 2022 йылдың 29 апреленә тиклем эшләй.**

Экспозицияла Өфө, Мәскәү, Сибай ҡалаларынан, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән, Башҡортостан Республикаһының Архангел, Балаҡатай, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Мәсетле, Туймазы, Учалы районларынан финалсыларҙың, оҫталарҙың, костюмдар буйынса рәссамдарҙың һәм дизайнерҙарҙың эштәре күрһәтелә. Күргәҙмәлә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев ҡатнашты. "Бер нисә йыл элек республика Башлығы Радий Хәбировтың тап тарихи башҡорт милли кейеменә тергеҙеү кәрәклегенә иғтибар итеүе бик ҡыуаныслы, - тине ул. - Чиновниктарҙың кейеме лә уның иғтибарынан ситтә ҡалманы, хәҙер беҙ уны рәхәтләнеп кейеп йөрөйбөҙ. Республикабыҙҙа икенсе тапҡыр "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсы уҙҙы, ҡатнашыусыларҙың иң яҡшы эштәрен бөгөн Милли музейҙа күрергә мөмкин. Улар араһында башҡорт халыҡ кейеме, заманса авторлыҡ костюмы, балалар кейеме, башҡорт милли ювелир биҙәүестәре һәм аксессуарҙар бар".

Күргәҙмә ҡунаҡтары араһында "Бәхет биләмәһе" хәйриә фондының попечителдәр советы рәйесе Каринә Хәбирова ла бар ине. Ул барыһын да башҡортса сәләмләне һәм башҡорттарҙың төп милли кейемен һаҡлап ҡалыуға ҙур өлөш индергән "Тамға" конкурсында ҡатнашҡандарға рәхмәтен белдерҙе.

# ОҪТАХАНАЛА...

**Мәжит Ғафури исемендәге мемориаль йорт музейы хеҙмәткәрҙәре Милли кейем көнө уңайынан халҡыбыҙҙың ҡул эштәре байлығы, рухи ҡиммәттәребеҙгә һөйөү тәрбиәләү маҡсатында "Зөһрә ханым оҫтаханаһы"н асып ебәрҙе.**

"Ә ни өсөн Зөһрә ханым оҫтаханаһы?" тип һораусылар булыр. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың хәләл ефете Зөһрә Камалетдин ҡыҙы Ғафури-Насырова ҡул эштәре оҫтаһы булған. Музей етәксеһе ғалимә Фәйзилә Бүләкова тәҡдиме буйынса әле бына йорт-музейҙа үҙенсәлекле шундай исем менән оҫтахана эшләй башланы. Музей бинаһында милли костюмдар көндәре йыл һайын үткәрелә һәм ул тематик йәһәттән дә төрләләгә менән айырылып тора. Фәйзилә Мөҙәрис ҡыҙы әйтеүенсә, "Зөһрә ханым оҫтаханаһы"на Өфө ҡалаһынан ғына түгел, ә республикабыҙҙың төрлө район-ҡалаларынан ҡул эштәре оҫталары саҡырыласаҡ. Һәм ошо изге эште Бөрйән районының данлыҡлы Ҡыпсаҡ ауылы ағинәйҙәре башлап ебәрҙе. Улар үткәргән оҫталыҡ дәресе (етәксеһе Зәкиә Муллағолова) ҙур йәнлелек тыуҙырҙы. Ағинәйҙәр ҡыҙыҡһыныусыларҙы сергетеш эшләргә өйрәтте һәм балаҫ һуғыу серҙәре менән таныштырҙы. Шуны ла әйтергә кәрәк, быйыл Ҡыпсаҡ ауылы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәргән "Айыҡ ауыл" конкурсында ла ҡатнаша.

# БЫЛ МОНДА БАР...

**Китап нәшерләнеүе һәр ҡәләм оҫтаһы өсөн дә ҙур шатлыҡ. Әле яңыраҡ ҡына билдәле шағирә, журналист, тәржемәсе, Салауат Юлаев ордены кавалеры Тамара Юлдашеваның "Һайланма әҫәрҙәр"е донъя күрҙе.**

Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың икенсе корпусында үткән "Был монда бар мәғрур тауҙар тыны" тип аталған осрашыу тап ошо ваҡиғаға арналды. Ижад менән үткән тормош юлы, әҫәрҙәрҙең яҙылыу тарихы, илһам биргән мәлдәр, "Һайланма әҫәрҙәр"ҙең барлыҡҡа килеүе тураһында ихлас фекер алышты кисәгә йыйылғандар. Рәсәй Федерацияһы Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты исеменән уның рәйесе Лилиә Ғүмәрова ҡул ҡуйған Рәхмәт хаты шағирә эшмәкәрлегенә, уның кимәленә баһа булды, тип әйтә алабыҙ. Байрамға Тамара Искәндәриәнең шатлығын бүлешергә ҡәләмдәштәре, ижадташ дуҫтары, әҙәбиәт һөйөүселәр йыйылғайны. Сығыш яһаусыларҙың һәр береһе шәхесте һәм уның ижадын төрлө яҡлап астылар. Тамара Искәндәриәнең улдарына төбәп яҙылған шиғыры берәүҙе лә битараф ҡалдырмағандыр. Ул һәр әсәнең йөрәк аяҙы булып ишетелде. Шағирәнең ейәнсәре Камиланың башҡортса бер шәлкем шиғырҙар һөйләүе, гүйә, бына ошо киләсәктең яуабы булып яңғыраны. Тамара Искәндәриәнең шиғырҙары һәм уның шиғырҙарына яҙылған йырҙарҙы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле солисы Венера Юлгилдина башҡарҙы. Тамара Искәндәриәнең аҡыл, зиһен, күңел тәрәнлеген сағылдырған уйлы-гәмле, бай эшмле ижады - "Һайланма әҫәрҙәр"е уҡыусылар ҡулына тиҙерәк барып етһен.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАТҠАН...

## тайғандан көлгән

Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡыйыулыҡ гәҙел рәүештә кешелек сифаттарының иң беренсеһе тип һанала. Сөнки ул башҡа барлыҡ сифаттарҙың булыуын гарантиялай.

**(Уинстон Черчилль).**

Ҡыйыулыҡ - ул кәрәкле доғаларҙы уҡый-уҡый ҡурҡыу.

**(Карл Барт).**

Юғары һөҙөмтәлелеккә әйә лидерҙарҙа иң һоҡландырғаны - уларҙың уртаҡлығы бик аҙ булыуҙа. Уларҙың береһе нимәләр яҡкынлы саҡырыу ташлағанда, икенсеһе аяҡ терәп ҡаршы тора. Әммә уларға бер уртаҡ сифат хас: тәүәккәллек.

**(Ларри Осборн).**

Иң бөйөк китап - тормош китабы, уны үҙ теләгең менән ябып та, кире асып та булмай.

**(А. Ламартин).**

Еләҫ елгә лә әйләнеп тороусы флюгерға оҡшаш булырға ярамай.

**(Джек Лондон).**

Әгәр дағы бәхет килтергән булһа, ат бөтәһенән дә бәхетлерәк булыр ине.

**С.Рамишвили**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Хоҙай Тәғәлә Әҙәмде яралтҡас, уға иптәшкә ҡатын-ҡыҙҙы - Һауаны ла яралтырға ҡарар иткән һәм был ғәмәлде нисегерәк атҡарырға икән тип уйға ҡалған.**

**- Ҡатын-ҡыҙҙы Әҙәмдең башынан яралтһам, ул тәкәббер буласаҡ, - тип фекер йөрөткән Хоҙай. - Күҙенән дә яралтып булмай, юҡһа, ҡатын-ҡыҙ артыҡ күптә күреүсән буласаҡ. Юҡ-барҙы ишетеүсән булмаһын өсөн Әҙәмдең ҡолағын да Һауаны яралтыусы материал итеп ҡулланып булмай. Ҡатын-ҡыҙ күп һөйләүсән булмаһын тиһәм, Әҙәмдең ауыҙын да файҙалана алмайым. Йөрәгенән яралтһам, ҡатын-ҡыҙ көнләшеүсән буласаҡ. Әҙәмдең ҡулдарын файҙаланһам, Һауаның байлыҡ артынан ҡыуыусы булыуы бар. Аяҡтар ҙа ярамай, юҡһа, ҡатын-ҡыҙ гүмерен енел-елпе, мәғәнәһеҙ үткәреүе мөмкин...**

**Уйлаған-уйлаған да Хоҙай, ҡатын-ҡыҙҙы ир-егеттең күҙ күрмәй торған урынынан - ҡабырғаһынан яралтҡан. Үҙе шулай тип һөйләнә икән:**

**- Оялсан һәм буйһоноусан бул! Етди һәм изгелекле бул!**

**Әммә Һауаны ижад иткәндә баш та, күҙ, ҡолаҡ, ауыҙ ҙа, йөрәк, ҡул, аяҡтар ҙа барыһы ла һыңға ултыртыла, тимәк, бағы етешһеҙлектәр ҙә бергә күсә. Шуға ла ҡатын-ҡыҙ ошо сифаттарҙан азат түгел..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3387
Заказ - 505